ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# КискеӨфө

26-2 сентябрь - октябрь (һарысай - ҡарасай) 2015

№39 (665)

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

"Халыҡты халыҡ иткән тел,
йәки уны яҡлау кемдәр иҫендә?" 3,6



Милли кино менән генә...
халҡыңды донъяға таныта алаһың 8-9



Рух илсеһе булған әҙип...
үҙ һүҙен мәлендә әйтергә бурыслы 10-11



Мин эсеүемде ташланым
Кемдәргәлер - һабаҡ, кемдәргәлер кәңәш һүҙе булһын... 12



ТВ-программа 14

***XVIII быуат аҙағында башҡорттоң иң ябай кешеләре араһында ла 30 һәм 50 баш ат тотмағандар һирәк булған; күптәренең аты 500-гә еткән, байҙарҙыҡы 1000-гә тиклем, ҡайһы берҙәренеке 2000 һәм унан да күберәк булған. Байҙарҙа һарыҡтар аттар һанына тиң тип әйтерлек йәки унан да күберәк. Байҙар һыйыр малын аттарҙың яртыһы тиклем генә тотҡан. Барыһында ла тиерлек ҙур булмаған кәзә көтөүе бар.***

***И.Г. ГЕОРГИ.***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Мәктәптәрҙә 5-се кластарҙан башлап мотлак икенсе сит тел өйрәнеүҙе индереү тураһында һүҙ куйырталар, был укыу программаһынан туған телдәрҙе кыҫырыклауға алып килмәҫме?

***Хәләф ИШМОРАТОВ, Бөтөн донъя башкорттары королтайы Башкарма комитеты рәйесенең беренсе урынбаҫары:*** Беҙ уҡыған замандағы совет мәғариф системаһы донъяла иң алдынғыларҙан иҫәпләнде. Хәтеремдә, 1960 йыл Юрий Гагарин космосҡа осҡас, Американың ул саҡтағы президенты Джон Кеннеди космос өсөн ярышта АҠШ-ты совет мәктәбенең еңеүе тип атаны һәм Советтар Союзының мәғариф системаһын өлгө итеп ҡуйҙы. Үкенескә күрә, ул система СССР тарҡалғандан һуң шулай уҡ юҡҡа сығарылды. Һуңғы йылдар арауығында ғына ла Рәсәй мәғарифы ниндәй генә реформаларға дусар ителмәне! Ҡыҙғаныс, тик ыңғай яҡҡа түгел. Мәғлүм булыуынса, Рәсәй - күп милләтле ил, унда 200-гә яҡын милләт халыҡтары йәшәй. Тарихтан белеүебеҙсә, революцияға тиклем Рәсәй империяһы төбәктәренә губернатор итеп ебәрелгән вазифалы кешеләр урындағы халыҡ телендә аралашырға өйрәнеп килә торған булған, уларҙың тарихын, йола-традицияларын белгән. Мәҫәлән, 1833-1857 йылдарҙа Ырымбур һәм Һамар губерналары башында торған генерал-губернатор Перовскийҙың тап ана шундай кеше булғанлығы мәғлүм. Был уға ерле халыҡтың ихтирамын яуларға булышлыҡ иткән. Рәсәй, әлеге ҡатмарлы халыҡ һәм милләт-ара хәлдәрҙә илдәге 200-ләп халыҡтың дуҫлығын һаҡлап ҡалам тиһә, беренсе сиратта ана шул милләттәр мәнфәғәтен күҙәтергә тейеш, ә ул беҙҙә йыш ҡына һанға һуғылмай. Бөгөн халыҡ араһында популяр булмаған һәм уйланылып етмәгән реформалар арҡаһында алға түгел, артҡа ғына сигенәбеҙ. Үҙебеҙҙең милли мәғарифҡа ҡағылышлы шуны әйтер инем: әле иң тәүҙә туған телде яҡшылап өйрәнеү бурысы тора. Икенсенән, рус телен камил үҙләштереү талап ителһә, өсөнсө тел мотлаҡ халыҡ-ара аралашыу теле - инглиз, немец, ҡытай һ.б. берәй тел белеү кәрәк. Ә бына ике сит тел уҡытыуҙы мин кәрәк түгелдер, тип уйлайым. Теләгән кеше уны үҙ аллы ла үҙләштерә ала бит, хәҙер интернет аша дистанцион белем алыуҙан башлап, һәр төрлө курстар, репетитор кеүек төрлө саралар бик күп. Ә ике сит тел индереү былай ҙа еңелдән булмаған уҡыу программаһына өҫтәмә көсөргәнеш тыуҙырасаҡ һәм үҙ телен дә йүнле-башлы белмәгән балаларҙың башын бутау ғына буласаҡ. Етмәһә, сит телдәрҙән БДИ тапшырырға ти башлаһалар. Әле бына 2016 йылдан ҡытай теленән Берҙәм дәүләт имтиханы тапшырыу хаҡында һүҙ сыҡты. Шунан уҡыусы үҙ телен ҡасан өйрәнергә тейеш? Аҙнаһына бер сәғәт эсендә ниндәй белем алыр икән улар? Унан бит, үҙ телендә камил белмәйенсә тороп, сит телдәрҙе нисек үҙләштермәк кәрәктер... Хәҙер мәктәптәрҙә күп нәмә директор ҡулына тороп ҡалды, ә ул бөтәһен дә үҙе теләгәнсә эшләй. Туған телдәр уҡытыу мәсьәләһен дәүләт кимәлендә ныҡлап хәл итеү талап ителә бөгөн, юғиһә, балалар әсә теленән башлап, милләтен, илен һанламай, белмәй үҫә икән, киләсәгебеҙ кем ҡулына ҡалыр?

**(Дауамы 2-се биттә).**

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ҒАЛИМДАР ФЕКЕР АЛЫША




**Был аҙнала Өфөлә Бөтөн Рәсәй Фән фестивале үтә. Илдең иң ҙур фәнни сараһы Мәскәү, Дондағы Ростов һәм Красноярскиҙа ла барасаҡ. Башҡортостандың баш ҡалаһы Урал һәм Волга буйы федераль округтары өсөн төп майҙансыҡҡа әүереләсәк.**

Быйыл был форумда бөтәһе 20 майҙансыҡ эшләй. Уларҙың икәүһе - БР Фәндәр академияһында һәм "Башҡортостан" дәүләт концерт залында. Был майҙансыҡтарҙа абруйлы ғалимдар, сит ил ҡунаҡтары, Нобель һәм Дәүләт премияһы лауреаттары сығыш яһай. 26 сентябрҙә "Башҡортостан" залы алдында күңел асыу-шоу программаһы һәм фейерверк та буласаҡ. 27 сентябрҙә "Өфө уттары" күңел асыу комплексында Бөтөн Рәсәй фестивале сиктәрендә Science Slam тип аталған сара ла ойоштороla. Был интеллектуаль ял итеүҙең яңы формаһы, унда йәш ғалимдар 10 минутлыҡ сығыштарында үҙҙәренең асыштары тураһында һөйләйәсәк. Сығыш яһаусылар араһында физика, политология, нейрофизиология, машиналар төҙөү, ботаника, социаль психология, биотехнология фәне менән шөғөлләнеүселәр вәкилдәре бар.



# СПИВАКОВ САҠЫРА...

**Өфөлә беренсе тапҡыр "Владимир Спиваков саҡыра" фестивале үтте.**

Концерт программаһы башланыр алдынан Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов Рәсәй Милли филармония оркестрының художество етәксеһе Владимир Спиваков менән осрашты һәм Башҡортостанда мәҙәниәтте үҫтереү һәм уға булышлыҡ итеү мәсьәләләрен тикшерҙе, маэстроның тыуған көнө уңайынан уға башҡорт милли уйын ҡоралы - думбыра бүләк итте. "Ҡасандыр Владимир Теодорович: "Акустик зал төҙөлгәс кенә һеҙгә киләм", - тигәйне. Зал бар - Владимир Теодорович коллективы менән килде. "Владимир Спиваков саҡыра" фестивалдәре Өфөлә лә даими үткәрелер тип ышанам", - тине Рөстәм Зәки улы.

Халыҡ-ара фестиваль барышында танылған маэстроға "Өфө ҡалаһының почетлы гражданы" исеме бирелде. Владимир Спиваковҡа мәртәбәле исемде Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов тапшырҙы. Награда һуңғы биш йыл эсендә тәүгә бирелде.

12+

✓ *Икенсе сит тел башҡа берәй дәрес иҫәбенә үткәрелмәйәсәк, өҫтәмә дәрес йә факультатив рәүешендә лә индерелмәй, ә мотлаҡ предмет булараҡ, дөйөм расписаниела ул тәғәйен үҙ урынын аласаҡ.*



*ИҒТИБАР!*

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

**2016 йылдың тәүге яртыһына гәзит-журналдарға яҙылыу бара. Сәмле, ғәмле, фекерле уҡыусылар өсөн йән аҙығы, таяныс, серҙәш, ҡорҙаш һәм фекерҙәш булған "Киске Өфө" гәзитенә республика ҡалалары һәм районларының бөтә почта бүлексәләрендә лә йыл әйләнәһенә яҙылып була. Хаҡтар шулай: "Киске Өфө"нөң 50665 индекслыһы - 545 һум 76 тин, 50673 индекслыһы (предприятиелар һәм ойошмалар өсөн) - 575 һум 76 тин.**

● Республикала һәм республиканан ситтә йәшәгән һәр кемгә он-лайн яҙылыу мөмкинлеге лә бар. Уның өсөн "Киске Өфө"нөң интернеттағы **kiskeufa.ru** сайтында "Яҙылыу" тигән төймәгә баҫып, "Шәхси яҙылыусылар өсөн он-лайн яҙылыу " һылтанмаһы аша **vipishi.ru** сайтына күсергә кәрәк. Был сайтта гәзиттәргә яҙылыу ойошторолған. Бланкка үҙегеҙҙең мәғлүмәттәрҙе тултырып, банк картаһы, QIWI йәки интернет-банк аша аҡса күсерергә генә ҡала.

**Өфөлә йәшәүселәр өсөн гәзитебеҙгә яҙылыуҙың тағы шундай арзанлы юлдарын тәҡдим итәбеҙ:**

● Йәшәгән йортоғоҙ эргәһендәге "Өфө-матбуғат" киоскыһында 6 айға 420 һумға яҙылырға була.

● Коллективығыҙ менән яҙылһағыҙ (кәмендә 10 дана), редакция гәзитте эшләгән урынығыҙға үҙе килтереп бирә: ярты йылға - 258 һум.

● Яҡын йәшәгәндәр редакциябыҙҙа яҙылып, гәзитте аҙна һайын үҙе килеп алып йөрөй ала: ярты йылға - 258 һум.



● **Дәртләндереү сараһын дауам итәбеҙ.** Сентябрҙә 2016 йылдың беренсе ярты йыллығына яҙылыу тураһындағы квитанцияларын ебәргән уҡыусыларыбыҙ **Ә. Әсфәндиәровтың "История сел и деревень Башкортостана", Рәшит Назаровтың "Ер һәм йыһан йыры", "Антология поэзии Башкортостана", Гөлнур Яҡупованың "Ҡатындар", Шәүрә Шәкүрованың "Өфө вокзалы", башҡортса "Дини календарь", Рауфан Мортазиндың "Космоэнергетика һәм сәләмәтлек"** китаптарына лайыҡ буласаҡ. Әйҙәгеҙ, кем алыҡ?

● Ә кемдәрҙе бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә тыуған көндәрен хәбәр итһен. Гәзитебеҙ аша гәзит уҡыусыбыҙҙы тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр.

● **"Киске Өфө" - бүләгем"** акцияһы ла дауам итә. Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, атай-әсәйҙәргә, мәсеттәргә, таныштарығыҙға гәзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

● **Иҫкәртеү.** Почталарҙа, киоскыларҙа гәзиткә яҙҙырыуҙан баш тарталар икән, йә яҙҙырған булып та, өйҙәрегеҙгә гәзитте алып килмәйҙәр икән, зинһар, редакцияға шылтыратып хәбәр итегеҙ.

● Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**. Беҙҙең электрон почта: **info@kiskeufa.ru**. Беҙҙең блог: **blog. kiskeufa.ru**.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*



## Мәктәптәрҙә 5-се кластарҙан башлап мотлаҡ икенсе сит тел өйрәнеүҙе индереү тураһында һүҙ ҡуйырталар, был уҡыу программаһынан туған телдәрҙе ҡыҫырыҡлауға алып килмәҫме?

**(Башы 1-се биттә).**

***Рәмзилә АБДРАХМАНОВА, мәғариф өлкәһе хеҙмәткәре:*** Ошо йылдың 1 сентябренән 5-се кластар уҡытыуҙың яңы стандартына күсте. Унда икенсе сит тел мәктәп программаһының мотлаҡ предметы тип раҫлана. Мәктәптәрҙең күбеһе уҡытыу программаһының ошо вариантын һайланы ла инде: икенсе сит тел булараҡ, ҡайҙа - немец, ҡайҙа - француз, ҡайҙа - ҡытай йә испан һ.б. телдәр уҡытыла ла башланы. Әлбиттә, был күрһәтмәнең ҡапыл килеп төшөүе ойоштороу мәсьәләләре, кадрҙар, уҡыу әсбаптары йәһәтенән әҙерлек һәм ваҡыт талап итә. "Ҡайһы бер төбәктәрҙең быға әҙер булмауын иҫәпкә алып, уға күсеү ваҡыты бирелә, ләкин 2015-2016 йылдарҙа икенсе сит тел бөтөн мәктәптәрҙә лә мотлаҡ уҡытыласаҡ", - тине Рәсәй мәғариф министры Д. Ливанов. Уның һүҙҙәрен дауам итеп, "сит телдәрҙең аралашыу сараһы булыуын ғына түгел, ә хәтерҙе нығытыу һәм интеллектты үҫтереүгә булышлыҡ итеүен" дә билдәләп китке килә, сөнки әлеге яңылыҡты индереү менән бәйле йәмғәтселектә ризаһыҙлыҡ белдереүселәр ҙә бар. Уҡыу программаһына өҫтәмә көсөргәнеш буласаҡ, икенсе сит тел туған телдәрҙе уҡытыуға аяҡ саласаҡ, тип хафалана улар. Ләкин икенсе сит тел башҡа берәй дәрес иҫәбенә үткәрелмәйәсәк, өҫтәмә дәрес йә факультатив рәүешендә лә индерелмәй, ә мотлаҡ предмет булараҡ, дөйөм расписаниела ул тәғәйен үҙ урынын аласаҡ. Шуға күрә, туған телдәр өсөн борсолоу урынһыҙ, тип әйтер инем.

***Тәнзилә БИКБАЕВА, уҡытыусы:*** Һорауығыҙ бик урынлы. Ни өсөн тигәндә, мин үҙем дә тап быны шул хаҡта уйлап борсола инем әле. Хаҡлы ялда булһам да туған телебеҙ яҙмышына битараф ҡала алмайым, был өлкәләге хәлдәр менән хәбәрҙар булып барырға тырышам. Әле быны республиканың ҡайһы бер башҡорт мәктәптәрендә башҡорт теле дәрестәре ҡыҫҡартылған тип ишетеп, бик әрненем. Район, ҡала башлыҡтары, мәктәп директорҙары аңлы, толерантлы, юғары мәҙәниәтле шәхестәр булған хәлдә бындай хата аҙымға юл ҡуйылмаҫ ине, әлбиттә. Үкенескә күрә, һәр кем үҙен, ултырған креслоһын ҡайғырта шул бөгөн. Ундайҙар өсөн туған тел, илһөйәрлек төшөнсәләре ят, күрәһең. Фәҡәт юғарынан фарманды теләһә ниндәй сара менән булһа ла үтәү бар белгәндәре. Заманыбыҙ ҙур тиҙлектә алға елә: икенсе сит тел индереүгә бер ҡаршылығым да юҡ - балаларыбыҙ донъя кимәлендә аралаша белергә әҙер булырға тейеш, тик ул әлегеләй туған телебеҙҙе "ҡыҫҡартыу" юлы менән башҡарылмаһын ине. Икенсе тел өйрәнеү өсөн факультативтарҙы уңышлы файҙаланырға була бит, теләге бар кеше унан да күп нәмә аласаҡ. Ә белергә теләмәгәне йә икенсе телде киләсәктә үҙенә кәрәкмәй тип иҫәпләгәне былай ҙа ваҡыт уҙғарыу өсөн генә йөрөй дәрестәргә лә. Элек белем биреүҙең факультатив формалары ярайһы һөҙөмтәле генә файҙаланыла ине. Киләсәктә үҙе өсөн икенсе сит тел кәрәк тип инанған бала ихлас йөрөйәсәк унда - иманым камил, сөнки ата-әсәләре репетитор яллаған йә шулай уҡ түләүле сит тел курстарында уҡыған балаларҙы беләм. Бөтөн нәмә мәктәптә факультатив эшен нисек ойоштороуға, уҡытыусының шәхси абруйына бәйле. Тағы бер нәмә аптыратты: киләһе йылдан уҡыусылар ҡытай теленән БДИ тапшырасаҡ, тип яҙып сыҡтылар. Был телдән имтихан тапшырыу өсөн уны бер-ике йыл түгел, ә кәмендә биш йыл уҡырға, ә уның өсөн Ҡытайҙың үҙенә барып йәшәп, йәнле аралашыу нигеҙендә үҙләштерергә кәрәк, сөнки уның ифрат ҡатмарлы тел икәнлеген беләбеҙ. Ҡайһы саҡ ҡытайҙар (төрлө диалектта һөйләшеүсе) хатта үҙҙәре лә бер-береһен аңлап бөтмәй, тип ишеткәнем бар.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*

# ҠОРБАН

Үҙенде ҡорбан итеүҙе ни өсөндөр тик һәләк булыу тип ҡабул итеү ҙә бар. Тик шулай ғынамы икән? Ир-ат тәбиғәтенә һунарсылыҡ ҡомары хас. Милләт ҡатын-ҡыҙҙарҙың үҙҙәрен күп нәмәнән мәхрүм итеп йәшәүе, ҡорбан итеүе һөҙөмтәһендә лә йәшәй. Быны мин үҙемдең ҡарсәйем, әсәйем миҫалынан ғына ла сығып әйтә алам. Ҡарсәйем ҡартатайым вафат булғандан һуң күп кенә мыҡты ирҙәр һоратһа ла, ҡабат тормошҡа сыҡмай, ғүмерен атайымды, инәйемде, ҡартатайымдың башҡа ҡатындарын, беҙҙе, ейән-ейәнсәрҙәрен ҡарауға бағышлай. Тол ҡалғанда егерме йәшен саҡ үткән була, ул үҙен ҡатын итеп тойоу әмәлен ҡорбан итә.

Ә инде ғүмере буйына декрет ялында булып, ун бер бала тапҡан әсәйем иһә, үҙе өсөн бер секунд та йәшәмәне: грамотаһы ҡултамға ҡуйырлыҡ ҡына ине, юғары белем алыу түгел, ете, өс, бер класс та тамамламаны, ғүмере буйына бер китап та уҡыманы, үҙе әйткәнсә, "аяҡ эйеп" ултырманы, санаторийҙа ял итмәне, сәстәрен бөҙрәләтмәне, ирендәрен буяманы һ.б. Ә бары тик ҡатын, әсәй, өләсәй, ҡарсәй вазифаһын ғына башҡарып, үҙенән һуң 56 кеше (11 бала, 25 ейән-ейәнсәр, 20 бүләр-бүләсәр) ҡалдырып китте...

**Әмир ҒҮМӘРОВ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов Бешкәк ҡалаһында "Евразия иҡтисади союзы. Төбәк-ара хеҙмәттәшлектең яңы мөмкинлектәре" IV Рәсәй-Ҡырғыҙстан төбәк-ара конференцияһының пленар ултырышында сығыш яһаны. Республика етәксеһе, Башҡортостандың Рәсәйҙең төп индустриаль, фәнни-мәғариф һәм мәҙәни үҙәктәренең береһе булыуын билдәләп, төбәктең иҡтисади һәм инвестиция ҡеүәте менән таныштырҙы. Рөстәм Хәмитовтың шулай уҡ Ҡырғыҙ Республикаһы Президенты Алмазбәк Атамбаевтың осрашыуы булды. Башҡортостан менән Ҡырғыҙстан төбәктәре араһында иҡтисади, мәҙәни һәм мәғариф өлкәләрендә хеҙмәттәшлекте киңәйтеү мәсьәләләре тикшерелде.

✓ Белорет, Ғафури, Стәрлебаш, Федоровка һәм Хәйбулла районы игенселәре урып йыйыуҙы тулыһынса тамамланы. Архангелдәр, красно-камалар, миәкәләр һәм шарандар һуңғы гектарҙа уңыш йыя, тип хәбәр иттеләр республика Ауыл хужалығы министрлығының матбуғат хеҙмәтендә. Бөгөнгә Башҡортостан буйынса 1 миллион 621 мең гектар майҙанда (пландың 93 проценты) иген сабылған, 1 миллион 600 мең гектарҙа (92 процент) һуғылған. Уртаса уңыш гектарынан 17,8 центнер тәшкил итә, 2 миллион 853 мең тонна ашлыҡ һуғылған. Был күрһәткестәр былтырғыға ҡарағанда юғарыраҡ.

✓ Өфөлә әҙәбиәт, сәнғәт һәм архитектура өлкәһендәге Шәйехзада Бабич исемендәге республика дәүләт йәштәр премияһы лауреаттары билдәләнде. Быйылғы премияға журналист һәм яҙыусы Айгиз Баймөхәмәтов, рәссамдар Вера Фролова һәм Айгөл Ишбирҙина, Мәскәү филармонияһы артисы Артур Нәзиуллин лайыҡ булды.

✓ Өфөлә 11 йәшлек Виолетта Токарчукты үлтереүҙә ғәйепләнеүсе ҡулға алынды. Башҡортостан буйынса Эске эштәр министрлығының белдереүендә билдәләнеүенсә, енәйәтте асыу өсөн күпселек полиция бүлексәләре йәлеп ителгән. Ваҡиға урынынан байтаҡ объекттар тикшереүгә алынған. Экспертиза һөҙөмтәһендә ғәйепләнеүсенең - Өфөлә йәшәүсе 36 йәшлек ирҙең шәхесе асыҡланған. Ул оперативниктар тарафынан "Үҙәк баҙар" туҡталышы янында ҡулға алынған. Ир Рәсәй Енәйәт кодексының 105-се статьяһы буйынса (баланы үлтереү) енәйәт ҡылыуҙа ғәйепләнә.

✓ *Рус теленә күсеүҙән һеҙ урыҫ булып китә алмайһығыҙ, урыҫ барыбер һеҙҙе башҡорт тип ҡарай, ә башҡортсаны онотһағыҙ, һеҙ бер бер кем дә булмаясаҡһығыҙ. Үҙ телен хөрмәт итмәгән һәм белмәгәнде башҡалар ҙа эшкә һанамай.*



УҠЫП СЫҠТЫМ…

**Гәзиттең 34-се һанында "Халыҡты халыҡ иткән тел, йәки уны яҡлау кемдәр иңендә?" тигән диалогты уҡып сыҡҡас, бер арауыҡ уй-тойғолар кисерешендә йөрөнөм. Журналист Эльза Мөхәмәҙиева ҡорған әңгәмәлә ҡатнашыусы Белорет ҡалаһы мәғариф хеҙмәткәрҙәренең башҡорт теле, уны уҡытыу-уҡытмау мәсьәләләре, ата-әсәләрҙең туған телгә ҡарашы һәм телгә һөйөү уятыуҙа уҡытыусы ролен тикшереүҙәре сәме булған һәр кемдә фекер тулҡындары уятҡандыр.**

# "ХАЛЫҠТЫ ХАЛЫҠ ИТКӘН ТЕЛ,

## йәки уны яҡлау кемдәр иңендә?"



Диалогта ҡатнашыусы уҡытыусы М. Солтанованың, туған телде бала иң башта ғаиләлә өйрәнергә тейеш, тигәне менән тулыһынса килешәм. Ысынлап та, инә һөтө менән инмәгән нисек тана һөтө менән һеңһен ул? Ата-әсәләр бит, бала ҡала ерендә тыуған икән, уны мотлаҡ русса өйрәтергә кәрәк, тип уйлай. Русса белһә, йәнәһе, аңлы, белемле була инде. Ә бит баланың ниндәй сифаттарға эйә булып үҫеүе ата-әсәһенең ни кимәлдә аңлы, рухлы һәм мәҙәниәтле булыуына бәйле. Үҙҙәре маңҡорт булып, мәктәп алдына үҙе үтәй торған талаптарҙы ҡуйыу - шул уҡ аңһыҙлыҡтың бер күрһәткесе ул. Руссаны бала ҡала ерендә былай ҙа үҙләштерәсәк, ә ғаиләлә туған телендә һаҡлау тик маладис ата-әсәләргә генә бирелә.

Икенсе бер уҡытыусы Р. Әксәнова "Юғары трибунанан матур һүҙҙәр һөйләгән ҡайһы берәүҙәрҙең дә балалары телде белмәй", ти һәм ул хаҡлы. Бер башҡорт теле уҡытыусыһының улы менән вата-емерә русса һөйләшкәнен ишетеп аптырағайным. "Башҡортса аңламай шул" тип аҡланғайны ул шунда. Был хәлдең ни тиклем кәмһеткес һәм мәсхәрә икәнен төшөнөрлөк булмағандыр инде ул. Ә бит ундайҙар күп. Хәҙерге балаларҙың ыңғайына ҡуйһаң, улар өйҙә туған телдә бөтөнләй һөйләшмәҫкә лә мөмкиндәр, алдарында компьютер, ҡолаҡтарында ҡолаҡсын. Һин нимә өсөн әсәй йә атай? Өйрәт, тый, үтәлергә тейеш булған тәртиптәр булдыр. Бәләкәйерәк саҡтарында уҡ шул талапты ҡуйһаң һәм үҙең өлгө күрһәтһәң, бала кеше бер ҡайҙа ла бармай. "Рус теленә күсеүҙән һеҙ урыҫ булып китә алмайһығыҙ, урыҫ барыбер һеҙҙе башҡорт тип ҡарай, ә башҡортсаны онотһағыҙ, һеҙ бер бер кем дә булмаясаҡһығыҙ. Үҙ телен хөрмәт итмәгән һәм белмәгәнде башҡалар ҙа эшкә һанамай", - тип кенә торам балаларыма.

Р. Әксәнованың тағы ла "Ҡайһы бер башҡорт теле уҡытыусыларының үҙ эшенә аҡса эшләү сығанағы булараҡ ҡына ҡарауы күңелде ҡыра", тигән фекерен үҫтермәксемен. Баланың милли рухта формалашыуы уҡытыусынан да тора. Йәғни, уҡытыусының да роле ҙур, тимәксемен. Миҫалды ситтән эҙләмәйем, үҙемдән алам. Балаларымдың икеһен дә баҡсаның башҡорт төркөмөндә йөрөттөм, мәктәпкә башҡорт кластарына бирҙем. Беренсе балам башланғыс кластарҙан һуң маңҡорт ҡына уҡытыусы ҡулына эләкте. Был ханым ни башҡортса, ни русса яҡшылап белмәй. Ата-әсәләр йыйылышында ыҡылдап-мыҡылдап саҡ һөйләп тора, эшен ойоштора алмай. Ата-әсәләргә еткергән бар яңылығы: "Ҡыҙҙар шундай ғәйбәт һөйләй, малайҙар тәртип боҙа", - булыр ине. Туғыҙынсы класс имтихандары буйынса дөйөм мәктәп йыйылышында был уҡытыусы ғәм алдында: "Это же башкирский класс, конечно, слабенький", - тигән һүҙҙәре менән барыбыҙҙы ла атып йыҡҡандай итте. Быны ул үҙен аҡлап, рус директоры алдында ярамһаҡланып әйтте. Унынсы класта башҡорт балаларын икегә бүлеп, ике рус класына таратып бирҙеләр. Шулай итеп, мәктәпте рус класында тамамланыҡ. Класс етәксеһе дүрт йыл буйы класын яҡлай алмаған, үҙенең дә абруйы булмаған, башҡа уҡытыусыларҙың да беҙҙең балаларға ҡарата ҡарашы түбән булды. Ҡалған ике йылда баламды түләп, башҡа уҡытыусыларға йөрөтөргә мәжбүр булдым. Бөгөн "слабенький" тигән кластың барыһы ла тигәндәй юғары уҡыу йорттарында уҡый.

Икенсе баламды мәктәпкә бирергә ваҡыт еткәс инде аҡыллыраҡ булдым һәм уҡытыусыны һайлап алдым. Вәзирә Ҡотлоғужа ҡыҙы ҡулында белем алған ваҡыт балаларыбыҙ өсөн генә түгел, ата-әсәләр өсөн дә бер тәрбиә осоро булды. Ул баштан уҡ барыбыҙҙы ла ҡулға алды, ойоштorҙо. Балаларҙы мәктәп һәм ҡалала уҙған бар сараларға ла, шул иҫәптән олимпиадаларҙа ҡатнаштырҙы. Ата-әсәләр йыйылышын мотлаҡ берәй тәрбиә темаһына арнаны. Таҡтаға теманы аҡбур менән яҙып ҡуйыр, мәҡәлдәр, әйтемдәр менән байытып, анкеталар, тестар яҙҙырып, һәр беребеҙҙең фекерен әйттереп сығыр ине.

**(Дауамы 6-сы биттә).**

УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ

# ХАҠЫ АРЗАН - БӘҪЕ ҠИММӘТ



**Замандан артта ҡалмайым, ил һәм республикабыҙ тормошо, яңылыҡтар менән хәбәрҙар булайым тигән кешегә бер генә дана булһа ла гәзит алдырып уҡымайынса йәшәүҙе күҙ алдына ла килтереп булмай.**

Хәҙер телевидение, интернет бар, тиерһегеҙ. Уларҙы ла мин инҡар итмәйем, ләкин был саралар халҡыбыҙ мәнфәғәтен ҡайғыртып, уның иҫ киткес рухи хазиналарын асып һалып, беҙҙе, айырыуса балаларыбыҙҙы ана шул нигеҙҙә тәрбиәләү мәсьәләләрен көн тәртибенә ҡуйырға ашыҡмай. Киреһенсә, телевидение менән интернеттың кире йоғонтоһо көслөрәк булыуын күптәр таный хәҙер. Ана шуға ла замандаштарымды, башҡорт донъяһынан айырылырға теләмәгән милләттәштәремде туған телебеҙҙә нәшер ителеүсе матбуғат баҫмаларын алдырып уҡырға саҡырам. Үҙемә ҡалһа, заманыбыҙ йылъяҙмаһы булған "Башҡортостан", "Йәшлек" гәзиттәрен яратып уҡыйым, рәхмәтем ҙур уларға: шиғырҙарым, мәҡәләләрем ошо гәзиттәрҙә йыш донъя күрә. "Киске Өфө" гәзитенә яҙышҡаным булмаһа ла, ул да өйөмдә көтөп алынған ҡунаҡ. Аҙнаһына бер сыға, ләкин ала-һала уны аҙна буйы уҡырға була. Бөгөнгө хаҡтар баҙары шарттарында иң арзан матбуғат баҫмаһы ул, мәгәр бәҫе бик ҡиммәт һүҙ ҡәҙерен аңлағандарға. Туған тел, рухи донъябыҙ хазиналарын, сал тарихыбыҙ биттәрен барлап, хәтерҙәребеҙҙе яңыртыуы, һүҙ ҡәҙерен, онотола төшкән ырым-йолаларыбыҙҙы тергеҙеүгә булышлыҡ итеп, улар хаҡында түкмәй-сәсмәй беҙгә еткереп, күңелдәребеҙгә киртә барыуы менән оҡшай ул миңә. "Киске Өфө" үҙенә генә хас дизайны, стиль-йүнәлеше, һүҙ байлығына һаҡсыл мөнәсәбәте, темалар тәрәнлеге менән йәлеп итә уҡыусыны. Һәм, әлбиттә, уның "Диалог","Монолог"тары, "Фекер ҡоро" биттәренең, "Бер кәлимә фекер", "Ғаилә ҡоро","Балалар ҡоро" рубрикаларының үҙ аллы гәзит жанрына әйләнеп китеүен уңышлы журналистик табыш тип иҫәпләйем.

Замандаштарына әйтер һүҙе булған үҙенсәлекле авторҙар таба белеүе менән дә өлгө күрһәтә гәзит. Мәҫәлән, Ильяс Иҫәнбаев, Ҡадир Мәғәфүров, Самат Мөхәмәтйәнов, Айбулат Псәнчин, Хәлил Һөйөндөков, Әғләм Шәрипов, Фәүзиә Яхина, Миңһылыу Абдуллина кеүек гәзит уҡыусыға еткерер тос фекере булған авторҙарҙың һәр сығышы - ваҡиғаға тиң. Һуңғы шундай ваҡиғаларҙан Бөрйән районынан Таңһылыу Баһауетдинованың "Ҡаты икән йылан ҡарғыштары" тигән яҙмалары ныҡ тәьҫир итте. Ошо мәҡәләгә ҡарата шаңдауҙарҙың баҫылыуы ла теманың уҡыусыларҙы тулҡынландырыуы тураһында һөйләне. Ғөмүмән, гәзит сығыштарына ана шундай шаңдауҙар күберәк булһын ине. Был уның уҡымлылығын бермә-бер арттыра. Һуңғы һандарҙа тағы ла "Аңынды уят, йәки "Бәйғәмбәр" китабы тураһында" яҙмаларҙы ҡыҙыҡһынып уҡыйым. "Ҡомар" битен дә билдәләп үткем килә: үҙем өсөн ошоғаса исемдәре бигүк билдәле булмаған байтаҡ йәш авторҙарҙы асыҡланым. Ана шулай гәзитебеҙ мөхәрририәте телебеҙ, тарихыбыҙ, бөгөнгөбөҙ ҡиммәттәрен баһалай белеүсе, күңелдәре битараф булмаған замандаштарыбыҙҙы үҙ тирәһенә туплап, илһамланып эшләһен, яңынан-яңы ижад үрҙәре яулаһын, тип теләйем.

**Миңлегөл ХИСАМОВА,**
**шағирә.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓1 октябрҙә Рәсәйҙә мөлкәт һалымдарын түләү буйынса кампания тамамлана. 2 октябрҙән түләмәүселәргә штраф санкциялары ҡулланыласаҡ. Атап әйткәндә, бурыстың суммаһына көн һайын пеня һалына башлай. 2015 йылдың 1 ғинуарынан бер тапҡыр ҙа һалым белдереүҙәрен алмаған һәм милеккә һалым түләмәгән граждандар ошондай мөлкәтенең булыуы хаҡында һалым органдарына хәбәр итергә тейеш.

✓Өфө лимонарийына тәбиғәт ҡомартҡыһы статусы бирелеүе ихтимал. Ошо уңайҙан 1 октябрҙә Өфө урман хужалығы техникумында йәмәғәт тыңлауҙары иғлан ителде. Тыңлауҙар 1 октябрҙә иртәнге сәғәт 10-да Минһажев урамы, 126 адресы буйынса башлана.

✓Төркиәлә һәм Төньяҡ Кипрҙа ТӨРКСОЙ Халыҡ-ара опера көндәре уҙғарылды. Унда Әзербайжан, Ҡаҙағстан, Ҡырғыҙстан, Төркмәнстан, Төркиә, Татарстан, Башҡортостан, Ҡытай һәм Төньяҡ Кипрҙан 24 башҡарыусы ҡатнашты. Башҡортостан исеменән Башҡорт опера һәм балет театры солисткаһы, Башҡортостандың халыҡ артисы Светлана Арғынбаева сығыш яһаны.

✓20 октябрҙән 23-нә тиклем Өфөлә Беренсе "ШОС һәм БРИКС илдәре төбәктәрендә бәләкәй эшҡыуарлыҡ" (R2R) форумында сәнәғәт өлкәһендәге ҙур һәм бәләкәй эшҡыуарлыҡтың үҙ-ара эш итеү ысулдары тикшереләсәк. Дискуссияның модераторы булып "Союзконсалт" халыҡ-ара эксперттар селтәре идараһы рәйесе Олег Паладьев сығыш яһаясаҡ. Төрлө илдәрҙең ҙур һәм бәләкәй бизнесы араһында үҙ-ара эш итеүҙе киңәйтеү мәсьәләләрен тикшереү ҡаралған.

✓"Яндекс. Тәржемә"сelә тәүге тапҡыр башҡорт теле барлыҡҡа килде. Әлегә сервис һынау режимында эшләй - тәржемәләрҙә хаталар бар. Быға башҡорт теле морфологияһының ҡатмарлы булыуы һәм ундағы текстарҙың аҙлығы сәбәпсе. "Яндекс. Тәржемә"се сервисы бөтәһе 64 тел менән эшләй.

✓Башҡортостанда "Осҡон" башҡорт видео конкурсына ғаризалар ҡабул итеү 30 ноябргә тиклем оҙайтылды. Уны ойоштороусылар - Силәбе өлкәһенең Башҡорт йәштәре союзы, Мәскәүҙәге һәм Санкт-Петербургтағы Башҡортостан студенттары һәм аспиранттары ассоциацияһы - конкурсты быйыл март айында иғлан иткәйне. Ғаризалар конкурстың рәсми сайтында һәм "Бәйләнештә" социаль селтәрендәге төркөмдә мобиль видео, музыкаль клип, социаль видеоролик, ҡыҫҡа метражлы фильм номинациялары буйынса ҡабул ителә.

✓ *Алдағы иҫәп алыуҙа яңғыраған төп һорауҙар - респонденттерҙың милләте, енесе, йәше, ғаилә хәле, белем кимәле, хужалығы, килем алыу юлдары элеккесә ҡала.*



## ЕТЕ РАЙОН

**Калинин районы.** Двигателдәр төҙөү буйынса берләшкән корпорация Пекинда үткән Aviation Expo China халыҡ-ара авиация-космик күргәҙмәһендә ҡатнашты. Был корпорацияға ингән Өфө моторҙар эшләү берекмәһе күргәҙмәлә үҙендә етештерелгән двигателде күрһәтте.

**Совет районы.** "Реаль эштәр" төбәк проекты сиктәрендә әлеге көндә 12 уйын майҙансығы һәм хоккей коробкаһы төҙөүгә асыҡ аукцион иғлан ителгән. Проект сиктәрендә 7-се һанлы мәктәп территорияһында тышҡы яҡтыртҡыс ҡуйылған 7 бағана ултыртылған. "Замандаш" үҫмерҙәр клубын һәм 110-сы һанлы мәктәпте техник йыһазландырыу көтөлә. "Йәш техниктар станцияһы" дөйөм белем биреү учреждениеһына спорт велосипедтары һатып алыу ҡаралған. Бөтә планлаштырған эштәр йыл аҙағына тиклем хәл ителәсәк.

**Дим районы.** Правда урамы буйынса урынлашҡан "Әкиәттәр аллеяһы"на ошо көндәрҙә яңы "ҡунаҡ" - арбаға егелгән ҡыҫала килеп етте. Быға тиклем сихри "Әкиәттәр аллеяһы"на "Простоквашино" мультфильмынан Шарик, Матроскин ҡушаматлы бесәй, Иван-царевич һәм Царевна-лягушка, Буратино һәм башҡа персонаждар ҡуйылған, ултырғыс арттарына ут-ҡош, күгәрсен, ябалаҡтар һырлап эшләнгән. Кискеһен мөғжизәле донъяны ағас ботаҡтарына "ҡунған" баҙлауыҡтар яҡтырта. Дим районының матур урындарының береһен киләсәктә тағы ла яңы һындар менән тулыландырыу көтөлә.

**Киров районы.** Наркотиктарға ҡаршы көрәш комиссияһы яҙ һәм йәй осоронда наркотик сығанағы булған үләндәрҙе юҡ итеү эштәренә йомғаҡ яһаны. Профилактик саралар барышында полиция хеҙмәткәрҙәре менән берлектә 20 рейд ойошторолған, ҡала халҡы ҡатнашлығында 72 йыйылыш үткәрелгән, наркотиклы үҫемлектәр сәсеүлеген бөтөрөү ниәтендә 1500-ҙән артыҡ шәхси йорт территорияһы тикшерелгән.

**Ленин районы.** Үткән аҙнала Өфө ҡалаһының 39-сы гимназияһы "Рәсәйҙә йәшәйем" тип аталған сираттағы туристик слет үткәрҙе. Был сара уҡыу йортоноң туған көнөнә арнап йыл да уҙғарыла. Быйыл Урмансылар паркында гимназияның 8-11 синыф уҡыусылары үҙ-ара етеҙлектә, зирәклектә, айбарлыҡта көс һынашты, биология, география, туризм, тормош хәүефһеҙлеге нигеҙе буйынса белемен һынаны. Ярыш, уйындарҙан һуң балалар "Беҙ донъяны таҙартабыҙ!" акцияһына ҡушылып, парктағы бөтә сүп-сарҙы йыйып, таҙартып сыҡты.

**Орджоникидзе районы.** "Полимер" ғилми-етештереү берекмәһенә быйыл 25 йыл тула. Шул айҡанлы ойошма ҡала халҡы өсөн Черниковканың Ҡуласа урамы, 61 адресы буйынса заманса балалар майҙансығы төҙөттө. Был балалар майҙансығы "Берҙәм Рәсәй" партияһының "Реаль эштәр" төбәк проекты сиктәрендә эшләнгән. Проекттың төп идеяһы - ҡала халҡын борсоған мәсьәләләрҙе ситтән килгән финанс ярҙамында хәл итеү.

**Октябрь районы.** Әле ҡалала туҡталыш павильондары яңыртыла. Нуғай-Аҡбирҙе ауылдары араһында быяла түбәле, ултырғыслы һигеҙ заманса туҡталыш павильоны ҡуйылған. Комсомол урамы буйлап "Искра" кинотеатры" туҡталышында ла тиҙҙән яңы павильон эшләнеп бөтә, Зорге һәм Галле ҡалаһы исемендәге урамдар киҫелешендәге туҡталышты яңыртып ҡороуға рөхсәт алынған.

*КӨНАУАЗ*

# ҮҘЕБЕҘҘЕҢ КЕМЛЕГЕБЕҘҘЕ...

## теркәтеп ҡуяйыҡ

**Быйыл 1-31 октябрҙә Рәсәйҙә халыҡ иҫәбен алыуҙың бәләкәйтелгән варианты - һайланма участкаларға ғына ҡағылған Халыҡтың микро-иҫәбен алыу кампанияһы уҙғарыла. Ул "Минең йортом - минең илем" тигән девиз аҫтында үтә. Маҡсаты - халыҡтың бөгөнгө ижтимағи-демографик хәлен өйрәнеү. Был турала журналистар менән осрашыу ваҡытында Дәүләт статистика федераль хеҙмәте Башҡортостан Республикаһының территориаль органы етәксеһе Әкрәм Ғәниев белдерҙе.**




Рәсәйҙең барлыҡ төбәктәрен дә үҙ эсенә алған был сара 2020 йылға планлаштырылған Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыуға әҙерлек тә булып тора. Халыҡтың микро-иҫәбен алыу кампанияһы 1985, 1994 йылдарҙа ла ойошторолған булған. Әкрәм Мөхәмәт улы әйтеүенсә, был сара БМО составындағы бөтөн илдәргә лә ҡағыла. Быйылғыһы иҫәп алыусыларҙың ҡағыҙ урынына планшет компьютерҙар ҡулланыуы менән айырыласаҡ. Шулай уҡ һорауҙар исемлеге лә тулыландырыласаҡ. Халыҡ иҫәбен алыуҙа тәү тапҡыр бирелгән һорауҙарға килгәндә, респонденттарҙан нисә бала үҫтерергә теләүҙәре, был планды тормошҡа ашырыу өсөн ниндәй шарттар талап ителеүе, ниндәй сирҙәр менән яфаланыуҙары, көндәлек тормошта ниндәй мохтажлыҡ кисереүҙәре теркәләсәк. Әлбиттә, алдағы иҫәп алыуҙа яңғыраған төп һорауҙар - респонденттарҙың милләте, енесе, йәше, ғаилә хәле, белем кимәле, хужалығы, килем алыу юлдары элеккесә ҡала.

- Халыҡтың микро-иҫәбен алыу ваҡытында Башҡортостан Республикаһында һайланма рәүештә билдәләнгән 134 иҫәп алыу участкаһы эшләйәсәк, - тип таныштырҙы эш барышы менән Башҡортостанстат рәйесе, - уларҙың 77-һе - ҡала ерендә, 57-һе ауылдарҙа урынлашасаҡ. Республиканың һәр муниципаль районында кәмендә бер участка һайлап алынасаҡ. Иҫәп алыусылар ошо участкаға ҡараған бөтөн хужалыҡтарҙы ла йөрөп сығасаҡ. Уларҙы Росстат тарафынан бирелгән танытмаһы, "Росстат" тигән яҙыуы булған күк портфеле, шундай уҡ исем яҙылған күк беләҙеге буйынса танырға була.

2016 йылда беҙҙе тағы ике иҫәп алыу - 2016 йылғы Бөтә Рәсәй ауыл хужалығы иҫәбен алыу, шулай уҡ Бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡ субъекттары эшмәкәрлеген федераль статистик күҙәтеү көтә. Ауыл хужалығы иҫәбен алыу, "Бөтә Рәсәй ауыл хужалығы иҫәбен алыу тураһындағы" 108-се Федераль законға ярашлы рәүештә, 2016 йылдың 1 июленән 16 августына тиклем уҙғарыла. Маҡсаты - ауыл хужалығының бөгөнгө хәле һәм төҙөлөшө, ауыл хужалығы сығанаҡтарының хәле, уларҙы файҙаланыу, ауыл хужалығы эшмәкәрлеге алып барған субъекттар, муниципаль берәмектәр тураһындаентекле мәғлүмәттәр туплау. Сараның девизы - "Ауыл тәртиптә, ил - ниғмәттә". Ауыл хужалығы иҫәбен алыу тураһында алдағы һандарҙың береһендә мәғлүмәт бирербеҙ.

**ЙОМҒАҠЛАП...**

**Кәңәшмәлә билдәләнеүенсә, әлегә Рәсәй Федерацияһы закондары халыҡ иҫәбен алыуҙа ҡатнашыуҙы граждандарҙың үҙ иркенә ҡуя. Киләсәктә Ҡытай, Бразилия, Һиндостан һымаҡ күп илдәр миҫалын күҙ уңында тотоп, закон сығарыусылар был сарала ҡатнашыуҙы халыҡ өсөн мәжбүри итеүҙе планлаштыра. Башҡортостанстат етәксеһе Әкрәм Ғәниев халыҡты был сарала әүҙем ҡатнашырға, һорауҙарға мөмкин тиклем тулыраҡ яуап бирергә саҡырҙы. Үҙебеҙҙән өҫтәп, бары шуны ғына әйтке килә: был микро (киләсәктә, 2020 йылда, "макро"һы ла көтөлә бит инде) иҫәп алыу ваҡытында үҙебеҙҙең барлығыбыҙҙы, ҡаҙаныштарыбыҙҙы, уңыштарыбыҙҙы, хыялдарыбыҙҙы, шулай уҡ проблемаларыбыҙҙы теркәтеп ҡуяйыҡ. Файҙаһы тейер. Зыялылар йә вариҫтар үҙ һығымтаһын яһар.**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ.**

*ӨФӨЛӘ БАР...*

# ҺИГЕҘ ҠАТЛЫ ЙОРТТАР



**Башҡортостанда һәм баш ҡалала мәҙәни һәм тарихи мираҫ объекттарын һаҡлауға ҙур иғтибар бүленә. Ҡала округы хакимиәте һорауы буйынса ҡаланың тарихи йөҙөн һаҡлау маҡсатында архитектур элементтары булған йорттар Күп фатирлы йорттарҙа дөйөм милекте капиталь ремонтлау республика программаһына индерелде.**

Бындай йорттар иҫәбендә 1 Май урамындағы 26-сы һәм 27-се йорттар ҙа бар. Ҡала халҡына билдәле был һигеҙ ҡатлы ике йорттың ҡыйығын алыштырыу бара, стеналар ҡупҡан буяуҙан таҙартыла. Капиталь ремонт 2016 йылда тамамланасаҡ. Халыҡта "Сталин йорто" тип йөрөтөлгән ҡалалағы тәүге иң бейек йорттар үткән быуат уртаһы төҙөлөшөнөң уникаль объекттары тип табылған. Ҡалалағы тәүге һигеҙ ҡатлы йорттар менән бер рәттән ӨДНТУ-ның Йәштәр һарайы, Ҡаҙан-Богородица ҡорамы, "Еңеү" кинотеатры архитектура ҡомартҡыһы тип табылған. Был биналар ул ваҡытта Сталин исемен йөрөткән урамдың берҙәм архитектура ансамблен тәшкил иткән.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Өфөлә Һалдат күле эргәһендәге биләмә төҙөкләндереләсәк. Бынан тыш, И. Якутов исемендәге паркта йәйәүлеләр һәм велосипед юлдары ремонтланасаҡ. Тейешле тендер дәүләт һатып алыуҙары сайтында урынлаштырылған. Эштәрҙең заказсыһы - Өфө хакимиәтенең коммуналь хужалыҡ һәм төҙөкләндереү идаралығы. Эштәр килешеү төҙөлгәс башланасаҡ. Уны 2016 йылдың 1 ноябренә тамамлау ҡаралған.

✓Өфөләге 58-се лицейҙың математика уҡытыусыһы Рима Ронжина "Йыл уҡытыусыһы-2015" Бөтә Рәсәй конкурсының финалында ҡатнаша. Быйыл ул 24 сентябрҙән 3 октябргә тиклем Ҡаҙанда уҙа. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, йола буйынса бәйге бынан алдағы еңеүсенең тыуған төйәгендә үткәрелә. Былтыр ошо мәртәбәле исемгә Татарстан уҡытыусыһы лайыҡ булды. Рима Ронжина - ҡала һәм республика педагогик оҫталыҡ конкурстары еңеүсеһе. Уның педагогик стажы - 21 йыл.

✓29 сентябрҙә Өфөлә вакансиялар йәрминкәһендә йәштәргә эш табырға ярҙам итәсәктәр. Сара иртәнге сәғәт 11-ҙә БДПУ-ла башлана (Октябрь революцияһы урамы, 3а), тип хәбәр иттеләр ҡала хакимиәтенең матбуғат хеҙмәтендә. Йәрминкәлә Йәштәргә эш табырға булышлыҡ итеү үҙәгенең вакансиялар банкы менән танышырға, эш биреүселәр менән аралашырға, белгестәр менән кәңәшләшергә мөмкин. Вакансиялар йәрминкәһендә ҡатнашырға теләүсе эш биреүселәр 279-06-56 телефоны буйынса мөрәжәғәт итә ала.

✓Яңыраҡ Башҡортостан ҡурсаулығының яңы сәфәр үҙәген төҙөү тамамланды. Бөгөн ул бөтә илдән һәм донъянан туристарҙы ҡабул итергә әҙер. Ҡурсаулыҡтың матбуғат хеҙмәтендә хәбәр итеүҙәренсә, сәфәр үҙәге "Башһырт", "Змеевик" һәм "Арадый" экологик һуҡмаҡтарын, Тәбиғәт музейын, маралдар майҙансығын үҙ эсенә алған "Башһырт шарьяж" экскурсия комплексының бер өлөшө булып тора.

✓Башҡорт дәүләт филармонияһында Балалар бейеү академияһы асыла. 1 октябргә тиклем 3-12 йәшлек балалары булған ата-әсәләрҙән ғаризалар ҡабул ителә. Уҡыу программаһында - эстрада, халыҡ һәм классик бейеү; акробатика һәм актерлыҡ оҫталығы. Дәрестәрҙе тәжрибәле педагогтар үткәрәсәк. Өҫтәмә мәғлүмәттәр өсөн телефондар: 8-937-857-94-87, 8-927-954-42-32.

✓ *Әле генә һинең күңелеңдә уйламай, ауыр һүҙ әйтеп, бысраҡ ағып китеүсене ғәфү итеү үҙеңә хыянат итеүгә тиң кеүек. Әммә ғәҙеллек көсәп, бар асыуыңды күңелеңә туплап йөрөү ҙә һаулыҡ өсөн хәүефле.*



ЙОЛАЛАРЫБЫҘ



# ӨЙРӘК -

## ерҙе бар иткән зат

**Башҡорт халыҡ ижадында өйрәк донъяның ҡайһы бер элементтарын барлыҡҡа килтереүсе булараҡ сығыш яһай. "Утрау барлыҡҡа килтергән ике өйрәк" легендаһында һөйләнеүенсә, донъя барлыҡҡа ғына килгән мәлдә ерҙең өҫтө һыу менән ҡапланған булған.**

Бына бер мәлде сикһеҙ диңгеҙҙә ике өйрәк пайҙа була. Улар диңгеҙ төбөнә сумып, һыу өҫтөнә ләм сығара башлағандар. Инә өйрәк ләм өҫтөнә үҙенең ҡауырһындарын ҡағып төшөргән һәм уларҙан оя үргән, һуңынан йомортҡа һалып, бәпкәләр баҫып сығарған. Бәпкәләр үҫеп еткән, үҙҙәре оя ҡороп, балалар сығарған. Шул рәүешле өйрәк оялары ныҡ күбәйеп киткән һәм бергә йәбешеп, утрау хасил иткән. Шулай итеп һыу өҫтөндә ҡоро ер барлыҡҡа килгән.

Ошондай уҡ йөкмәткеле легенда З. Әминев тарафынан Баймаҡ районының бөрйән башҡорттарынан яҙып алынған. Башта бөтөн ерҙә тик һыу ғына булған. Ошо һыуға ҡайҙандыр өйрәк килеп төшә һәм һыу аҫтына сумып, лай сығара башлай. Унан оя үргәс, ике йомортҡа һалып, бәпкәләр баҫып сығара. Бәпкәләр үҫеп еткәс, ҡоро ер өсөн үҙ-ара ыҙғышып китәләр. Ер ул мәлдә бәләкәй генә була, үҙенә ике өйрәк бәпкәһен һыйҙыра алмай. Бер бәпкә икенсеһен һыуға төртөп төшөрә һәм, һөйләүҙәренсә, ул аждаһаға әйләнә. Ваҡыты-ваҡыты менән ул үҙен был донъянан ҡыҫырыҡлап сығарыуҙарын иҫенә төшөрөп, бөтөн йән эйәләренә зыян килтереп ала, ти. Был космогоник мифтар фольклор һәм этнографик артефактар менән нығытылып, боронғо башҡорттарҙа өйрәк культы киң таралған булған тигән фекерҙе нығыта.

Ысынлап та, "диңгеҙ төбөнә сумыусы өйрәк тарафынан барлыҡҡа килтерелгән ҡоро ер" сюжеты фин-уғыр халыҡтарында ла киң таралған. Урал тел ғаиләһенең тағы бер тармағы - самодийҙарҙа был сюжет нганасандарҙа (Краснояр крайының төньяғы) осрай. "Донъяны барлыҡҡа килтереү тураһында"ғы әкиәттә һөйләнелеүенсә, тәүҙә Алла ерҙе барлыҡҡа килтерә. Тик тиҙҙән уны һыу баҫа. Һыу өҫтөндә йөҙөп йөрөгән өйрәк һыуға сума ла, ете көндән һуң океан төбөнән үлән, мүк алып сыға. Уларҙы һыуға ташлағас, ҡоро ер барлыҡҡа килә.

Өйрәк-ерҙе барлыҡҡа килтереүсе образы төрөк-монгол халыҡтарына ла ят түгел. Алтай һәм шор халыҡтары ижадында ике изге өйрәк - иң юғары Аллаһ Ульгень менән уның ҡустыһы - үлеләр донъяһы башлығы Эрлик донъяны барлыҡҡа килтереүсе булараҡ һүрәтләнә. Эрлик Ульгендың ҡушыуы буйынса океан төбөнән балсыҡ һәм ләм ташый, Ульгень уларҙан ер (тигеҙлектәр һәм урмандар), һауа һәм ерҙе тотоп тороусы йән эйәләрен һәм балыҡтарҙы барлыҡҡа килтерә. Эрлик уға ҡарышып тауҙар, һаҙлыҡтар булдыра. Хакастарҙа ла ҡоро ерҙе ике өйрәк барлыҡҡа килтерә, улар йылға төбөнән ҡом алып, уны һибеп сыға. Тик бер өйрәк сукышында бер аҙ ҡом ҡалдыра һәм улар ҙурайып үҫә башлай. Был ҡомдан тауҙар барлыҡҡа килә.

**Азалия ИЛЕМБӘТОВА.**
**"Башҡорттарҙың изге ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

УҠЫП СЫҠТЫМ...



# "ХАЛЫҠТЫ ХАЛЫҠ ИТКӘН ТЕЛ,

## йәки уны яҡлау кемдәр иңендә?"

**(Башы 3-сө биттә).**

Ә иң мөһиме, ул балаларҙың рухын үҫтерә белде. Уларҙы "Мин - башҡорт" тип ғорурлана белергә, юғалып ҡалмаҫҡа, оялып-тартынып тормаҫҡа, белгәнен күрһәтә алырға өйрәтте. Класс башҡортса концерттар ҙа ҡуйҙы, осрашыуҙар үткәрҙе, ижади китаптар сығарҙы. Беҙгә: "Һеҙ башҡорт класы ата-әсәләре, бөтә нәмәлә лә беренсе булырға тейешһегеҙ", - ти торғайны уҡытыусы. Талапсан да булды. "Бишле" алыу өсөн уҡыусылары ҡара тир түкте. Бына шундай уҡытыусы ҡулында тәрбиәләнгән класты, ҡараһам, бишенсегә тағы алда телгә алған хыныма тапшырырға торалар. Ризаһыҙлығымды белдереп, директорға индем, икенсе бер шундай уҡ рухлы башҡорт теле уҡытыусыһын ҡуйыуҙарын һораным. Инде һуң, тигәс, икенсе мәктәпкә күсеү теләген белдерҙем. Директор рус класына барырға тәҡдим итте. Башҡорт класында яҡшы старт алған бала бында ла һынатманы, ярты йыл эсендә кластың лидеры булып алды һәм ике йылдан Р. Ғәрипов исемендәге Башҡорт гимназия-интернатына уҡырға инде. Унда иһә балаларҙа милли рух, милли үҙаң тәрбиәләү үҙәк урынға ҡуйылған. Бына шундай уҡыу йорттары күберәк булһын ине лә бит.

Директорҙарың нимә тип кенә аҡлаһа ла, ҡала мәктәптәрендә башҡорт класына түбән ҡараш һаҡлана шул. Мин быны үҙ тәжрибәмдә тойҙом. Башҡорт класына аңлы рәүештә килгәндәрҙән тыш, күберәк ауыл мәктәптәренән булғандарҙы, балалар баҡсаһына йөрөмәгәндәрҙе, сит милләт балаларын тығалар нишләптер. Күп осраҡта уларҙы олимпиадалар ситләп үтә. Был класҡа талап та артыҡ ҙур түгел. Һәм, әлбиттә, көсләрәк уҡытыусылар юғарыраҡ күрһәткестәр өсөн был класты ситләп үтергә тырыша. Хатта ата-әсәләр йыйылышы булғанда ла мәктәп директоры башҡорт класына инеп сығырға ваҡыт тапмай. Был тәңгәлдә ата-әсәләр уяуыраҡ һәм уҡытыусы абруйлы булмаһа - эштәр хәрт.

Ары М. Солтанова: "Студенттарҙың телмәр мәҙәниәте, интеллект кимәле аптырата", - тип һөйләй. Мин филология факультетында белем алыусылар, йәғни башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары булып сығасаҡ студенттар хаҡында фекер йөрөтәм. Күп йылдар студенттар өсөн фәнни эштәр яҙам, уҡытыусыларға дәрес пландары, асыҡ дәрес өлгөләре төҙөйөм. Һәм яңылышмай ғына шуны әйтә алам: бөгөнгө башҡорт филологияһында уҡып йөрөгән студенттарҙың күпселеге башҡортса дөрөҫ һөйләм төҙөй ҙә белмәй. Улар башҡортса һөйләшә белгәс, башҡорт теле уҡытыусыһы була алам, тип уйлай микән - аптырайым. Үҙе яҡшылап белмәгәнде ул һөймәгәнде ул нисек итеп уҡытһын! Уҡытыусының белемһеҙлеге, аңһыҙлығы йөҙәнән һирпелеп, аңҡып тора бит ул. Шундайҙар балаларҙа ла, ата-әсәләрҙә лә башҡорт кластарына һәм башҡорт теленә кире ҡараш уята.

Диалогта ҡатнашыусы М. Саранцева башҡорт теле уҡытыусыларының категориялары хаҡында һүҙ алып бара. Әгәр ҙә ул категорияләр һәм башҡа төрлө исемдәр һәр ваҡыт ысын сифат күрһәткесе була алһа икән. Үҙем үк уҡытыусыларҙы категорияға ла, атҡаҙанған исеменә лә әҙерләшкәнем бар һәм быһың систематын беләм. Мине башҡорт теле һәм әҙәбиәтенән Бөрйән районының төпкөл ауылында Вәзимә Ишбулды ҡыҙы Мәзитова тигән уҡытыусы уҡытты. Бер ниндәй категорияһы ла, данлы исеме лә булманы уның. Әммә мин ошо көнгәсә тел буйынса ул биргән белем нигеҙендә эш итәм, институт ундай базаны бирә алмай. Ишекте асып, тупһаны аша атлағандан һөйләй башлай торғайны ул апай, һәр дәресе ҡыҙыҡлы, фәһемле булды. Уның белемле булыуы, үрҙә әйткәнемсә, бөтә булмышынан һирпелеп торҙо һәм шуның менән беҙҙе йәлеп итте лә.

М. Саранцева үҙенең сығышында "Бөгөн ҡағыҙ, теүәл һандар заманы", тип тә асыҡ әйтә. Ысынлап та шулай, һандар күп итеп күрһәтелеп, ҡағыҙҙа матур яҙылһа - булды. Әсифатта эш юҡ. Уҡытыусылар ана шул күрһәткестәр артынан ҡыуып хәлдән тая. Уларҙы бер туктауһыҙ ҡағыҙ эше менән күмәләр. Ҡайһы ваҡыт йәшерәк уҡытыусылар нимә тултырғанын, нимә яҙғанын да аңламай, килеп ярҙам һорай. Шул уҡ ваҡытта башҡорт теле уҡытыусыһы милли тел уҡытыусыһы булараҡ яҡланмай. Заманында бер аҙ башҡорт телен уҡыттым һәм ошондай хәлдәргә тарыным. Математика һәм рус теле талаптарына күнгән балалар башҡорт теле буйынса белем талаптарына күнергә теләмәй. Улар башҡорт теле дәрестәрен яҙа-йөҙә яҙғылап, уҡығылап, ял итеп ултырыу мәле итеп ҡарай (бигерәк тә рус кластарында). Үҙем уҡытҡан балаларҙы эшләргә күндергәйнем, класс етәкселәре килеп етте: "Нинә ыҙалатаһығыҙ, хәҙер ата-әсәләре мыжый башлаясаҡ", - тиҙәр. Шул ваҡыт мине, башҡорт теле уҡытыусыһын, завуч та, директор ҙа яҡлап сыҡманы.

Әлбиттә, ниндәй уҡытыусы, ниндәй ата-әсә һәм ниндәй уҡыусы булыу һәр кемдең үҙаңына, интеллектуаль кимәленә бәйле. Әммә башҡорт милләтенән булып донъяға килгәс, "наҙан башҡорт", "моңһоҙ башҡорт" булып үткәрмәйексе был ғүмерҙе, "аңлы башҡорт", "белемле башҡорт" булайыҡ. Ә белем һәм аң, шул уҡ мәҙәнилек һәм рухлылыҡ туған телеңде өйрәнеүҙән башлана.

**Миләүшә ХӘБИЛОВА.**

МӘҢГЕЛЕК ХӘҠИҠӘТ

# ҒӘФҮ ИТЕҮ...

## сигенеүҙе аңлатмай



**Халыҡ мәҡәлдәрендә, әҙәби әҫәрҙәрҙә, дини тәғлимәттәрҙә, бөйөк аҡыл эйәләре әйткән һүҙҙәрҙә кемдер берәү рәнйетһә лә, уны ғәфү итеү мөһим, тиелә. Әммә...**

Һәр урында ғәҙеллек эҙләп йөрөүселәр өсөн ғәфү итеү үтеп сыҡҡыһыҙ шырлыҡ кеүек тойола торғандыр. Сөнки насарлыҡ эшләгән, күңелеңдә киткән берәүҙең ғәҙел язаһын алмай йөрөп ятыуы барыбер ҙә дөрөҫ түгел һымаҡ. Ул кеше лә һин кисергәнде кисерһен, ауырлыҡтар күрһен ине, тип уйлап, иҫәп тигеҙләнеүен теләйбеҙ. Әле генә һинен күңелеңдә уйламай, ауыр һүҙ әйтеп, бысраҡ ағып китеүсене ғәфү итеү үҙенә хыянат итеүгә тиң кеүек. Әммә ғәҙеллек көсәп, бар асыуыңды күңеленә туплап йөрөү ҙә һаулыҡ өсөн хәүефле. Күптәр быны белә, әммә асыуын килтергән кешенең ҡылығын ҡабат-ҡабат иҫенә төшөрөп, көйөгән яңыртып тора. Кемгәләр ҡарата асыу тотоу, йөрәк, мейе йә үпкәләр кеүек уҡ, йылап ҡына кешенең айырылғыһыҙ бер тән ағзаһына әүерелә. Асыуҙы күңелдә ни тиклем оҙаҡ йөрөтһәк, шул тиклем ғәҙелерәк хөкөм булыр, үс алыу барыһын да тигеҙләр, тип көтәбеҙ. Кешене асыуландырған хәл-ваҡиға үткәндәрҙә ҡалған һәм үс алыу менән уны кире төҙәтеп булмауына төшөнөп етә алмайбыҙ.

Ғәфү итеү - үткәндәрҙе үҙгәртергә өмөтләнеп, иҫтәлектәргә бирелмәүҙе аңлата. Эйе, ҡапыл ҡубып, донъя емергән дауыл ғәҙел түгел, әммә нисек кенә ауыр булмаһын, ошо емерек ҡалала йәшәргә тура килә. Асыуланыуҙан файҙа юҡ, уның ярҙамында емерек йорттарҙы төҙөкләндереп булмай. Быны һеҙ үҙ ҡулығыҙ менән аткарып сығырға тейеш. Кешене ғәфү итеү шулай уҡ төҙөкләндереү буйынса үҙ өҫтөңә ҙур яуаплылыҡ алыуҙы аңлата. Был йән тыныслығы алыу өсөн яһалған тәүге аҙым.

Ғәфү итеү һеҙҙе рәнйеткән кешеләрҙең ғәйебен йомшартмай. Ғәфү иттем дә, ул кешене ярата башланым, тигәнде лә аңлатмай был. Иң мөһиме, улар ҡалдырған ауыр яра бер ҡасан да уңалмаҫын аңларға кәрәк. Ошо ябай ғына хәҡиҡәтте аңлағандан һуң, яраны үҙегеҙҙән башҡа берәһе лә ямап, уңалтмауына төшөнөрһөгөҙ. Шул саҡ тормош һеҙҙең өсөн артабан дауам итеүен күрерһегеҙ. Тимәк, һеҙ үҙ яҙмышығыҙға үҙегеҙ хужа, һеҙ ғәҙел. Ғәфү итеү - күңел яралары һеҙҙең киләсәккә хужа булмауын аңлау. Һеҙ ҡурҡып артҡа сигенмәйһегеҙ. Кирећенсә, бар көсөгөҙҙө туплап, артабан атлайһығыҙ.

**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА әҙерләне.**

ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ

**Репрессиялар - тарихыбыҙҙың ҡанлы биттәренең береһе. Улар 1929-1930, 1937-1938 йылдарҙа, 50-се йылдар башында тулҡын булып үтә. Бөтә Рәсәй коммунистар партияһы Үҙәк комитетының 1937 йылғы февраль-март пленумындағы Сталин телмәре илдә сәйәси репрессиялар башланыуға этәргес була. Был ваҡиғаларҙы тулыраҡ күҙ алдына килтереү Башҡортостандың Үҙәк дәүләт йәмәғәт берекмәләре архивында һаҡланған документтарҙың ҡайһы берҙәрен байҡап китәйек.**

# ҒӘЙЕПҺЕҘ ҒӘЙЕПЛЕЛӘР,

## йәғни Золом ҡорбандары тураһында бер кәлимә



1937 йылдың августында Өфөгә Мәскәүҙән Бөтә союз коммунистар партияһының Үҙәк комитеты эргәһендәге партия коллегияһы комиссияһы ағзаһы Сәхйәнова килеп китә. 26 августа ул Сталинға, Башҡортостан өлкә комитетының беренсе секретаре Быкин менән икенсе секретары Исәнсурин халыҡ дошмандары менән буржуаз милләтселәрҙе яҡлай һәм улар менән берлектә эш итә, тип хәбәр итә. Бына нимә тип яҙа Сәхйәнова: "Башҡортостан өлкә комитеты һәм уның секретарҙары милләтсе-вәлидовсыларға һәм троцкистарға бәлә тороп сәйәси ышаныу белдергән, уларҙы республиканың партия, хужалыҡ, мәҙәниәт өлкәһендәге етәксе вазифаларға тәҡдим иткән..."

11 сентябрҙә "Красная Башкирия" гәзите "Идиотской болезнью - политической беспечностью и слепотой - страдало руководство башкирской парторганизации" тип яҙа. 17 сентябрҙә "Правда" гәзитендә "Кучка буржуазных националистов в Башкирии" тигән мәҡәлә баҫыла. Шул уҡ көндә "Известия" гәзите "Башкирские буржуазные националисты и их покровители" тигән баш аҫтында мәҡәлә сығара. Ә 3 октябрҙә "Красная Башкирия" гәзите бына нимә тип хәбәр итә: "Бөгөн өлкә комитеты пленумы асыла. Башҡортостандың партия ойошмаһы етәкселәрҙең дошмандар менән бәйләнеше тураһында йөҙәрләгән факт асыҡланған... Был факттарҙан бер ҡайҙа ла ситләшеп булмай. Пленум Быкин менән Исәнсуриндан был һораулрға тура яуап талап итәсәк". Пленум иртәгәһенә, 4 октябрҙә асыла һәм 6 октябрҙә тамамлана. Бары тик өс көн дауам итә. Әммә был өс көндә бик күп ваҡиғалар була. Ябай ваҡиғалар түгел, ә халыҡтың, һәр ғаиләнең хәтерендә әллә күпме йылдар һаҡланасаҡ ваҡиғалар.

Пленумды үткәрергә Мәскәүҙән Бөтә союз коммунистар партияһы Үҙәк комитеты секретары Жданов килә. Ул тимер юл вокзалында махсус вагонда йәшәй. Вокзалдан алып Совет урамында урынлашҡан Өлкә комитеты йортона тиклем (хәҙерге БР Милли музейы бинаһы) һалдаттар ҡуйыла. Өлкә комитеты ишегенә "ялыуҙар ҡабул ителә" тигән иғлан эленә. 3 октябрҙән 4-нә ҡараған төндә өлкә комитетының барлыҡ бюро ағзалары, район комитеттары секретарҙары ҡулға алына. БАССР-ҙың Эске эштәр халыҡ комиссариаты (НКВД) етәксеһе Медведев була. Өс-дүрт көн эсендә Өфө төрмәләре кешеләр менән тултырыла. "Халыҡ дошмандары" камераларға һыймай башлаһа, алып китеп аталар.

Пленум президиумында Жданов, Сәхйәнова, ҡала комитеты секретары Семенов һәм Киров районы комитеты секретары Митин була. Ждановтың телмәрендә бик ентекле ғәйепләү һүҙҙәре яңғырай. Бына нимә тип сығыш яһай ул: "Иптәштәр! Буржуаз милләтсе-вәлидовсылар Башҡортостанды СССР-ҙан айырып, ихтилал тәркемдәре ойошторол, пантөрки дәүләте төҙөргә теләй. Вәлидов менән бәйләнешкә ингәндәр (Таһировтың Төркиәгә барғаны); төрлө яҡлап эш иткәндәр - башта Англия, шунан япон-немец шпиондары, Өфөләге мосолмандарҙың үҙәк идараһы менән бәйләнештәр. Өс террористик төркөм төҙөлгән... Үҙәк комитет Быкин менән Исәнсуринды вазифаларынан бушатырға ҡарар итте..."

"Башҡортостан" гәзитенең баш мөхәррире Аҙнабаев пленумда былай тиеп сығыш яһай: "Башҡорт теленә аңлашылмаған һүҙҙәр индерелә. Таһировтың дошман икәнлеге асыҡланһа ла Исәнсурин уны Яҙыусылар союзынан сығармаҫҡа бойорҙо. Быкин менән Исәнсурин Таһировтың әҫәрҙәрен бар көнсығыш телдәренә тәржемә итергә ҡуйшты. Яҙыусылар пленумында Таһировты фаш итергә теләгәйнеләр, Исәнсурин рәхсәт итмәне... Исәнсурин буржуаз-милләтселәрҙе хуплай..."

Пленумда Киров районы комитеты секретары Митин ошондай телмәр тота: "Башҡортостан бурзуаз милләтселәренең идеяһы Туран дәүләтен төҙөү, был дәүләттә башҡорт милләтселәре һуңғы урында булмаҫтарына ышана. Ошоларҙан сығып, милләтселәр Вәлидов идеяларын яңы шарттарҙа дауам итә. Буржуаз милләтселәрҙең төп маҡсаты яңы шарттарҙа элекке Вәлиди кадрҙарын һаҡлап ҡалыу һәм йәштәрен милләтсе рухында тәрбиәләү... Ошо көнгә тиклем улар өлкә комитеты бюроһы, Исәнсурин менән Быкин яҙҙамында маҡсатына яҡынлашты - элекке вәлидовсылар юғары вазифаларҙа эшләүен дауам итә. Мәсәлән, Дауытов, вәлидовсы, Вәлидов хөкүмәте ағзаһы, Госплан рәйесе, Ишмөхәмәтов, Вәлиди генералы Мортазиндың уң ҡулы, Ейәнсурин - вәлидовсы... Башҡорт театры сәхнәһендә вәлидовсылар Мәһәҙиев менән Мортазин етәкселегендә башҡорт феодалдары, байҙары хаҡындағы спектаклдәр бара. Улар милли геройҙар итеп күрһәтелә, мәсәлән, "Ҡарағол", "Башҡорт туйы".

Әхмәтзәки Вәлидиҙең китеүенә теүәл ике тиҫтә - 20 йыл ваҡыт үтһә лә, ил етәкселеге сәйәсәтендә уның исемен онотторою, уның көрәштәштәренән ҡотолоу юлдары дауам иттерелә. Был Вәлидиҙең ни тиклем ҙур шәхес, юғары кимәлдәге сәйәсмән булыуына дәлил дә инде.

Быкин менән Исәнсуриндды пленумда ҡулға алалар, башҡаса улар өйҙәренә бер ҡасан да ҡайтмаясаҡ. Пленумда 274 кеше партиянан сығарыла һәм ҡулға алына. Жданов йомғаҡлау телмәрендә бына нимә тип сығыш яһай: "Башҡортостандың контрреволюция үҙәге юҡ ителде. Бағаналар киҫелде, ҡоймалар еңелерәк ҡолатылыр... Тиҙерәк ҡәһәрле фамилияларҙы оноторға. Уларҙың ҡәберенә уҫаҡ ҡаҙаҡ. Партияға ҡаршылыҡты юҡ итергә, уларҙың ейәндәренә һәм бүләләренә партияға ҡаршы ауыҙ асырға ла ярамағанлығын аңлатырға. Буржуаз милләтселәр Туран дәүләте төҙөү маҡсатын ҡуйған. Был ҡапҡан. Улар Баҡортостанға Абиссиния, Шанхай яҙмышын әҙерләгән. Исәнсурин япон-немец фашизмы агенты..."

9 октябрҙәге "Красная Башкирия" гәзитендә ҡоро ғына мәғлүмәт бирелгән: "4-6 октябрҙә Бөтә союз коммунистар партияһының Башҡортостан өлкә комитетының 3-сө пленумы үтте. Пленумда 5 кешенән торған яңы бюро һайланды. Бюро ағзалары итеп иптәш Заликин, Медведев, Митин, Нурғәлиев, Семенов һайланды. Беренсе секретарь итеп иптәш Заликин тәғәйенләнде".

Жданов ошондай уҡ пленумдарҙы Ҡаҙанда һәм Ырымбурҙа үткәрә. Ул ҡайтып киткәндән һуң "халыҡ дошмандары" менән көрәш көсәйтелә. 20 октябрҙә Башҡортостан үҙәк башҡарма комитеты сессияһында 156 кешенең 47-һе "халыҡ дошманы" тип табыла. Быкиндың ҡатыны Крущанская Софья Захаровна ҡулға алына. Ауырлы ҡатынды Өфө төрмәһендә атып үлтерәләр. Исәнсуриндың ҡатыны Лотфия Шәмсетдин ҡыҙы Нуртдинова шулай уҡ фатирында ҡулға алына. Балаларының ҡайҙа икәнлеген, ниндәй яҙмышҡа дусар ителеүен дә белмәйенсә, ул Карел-Фин Республикаһында һәм Ҡаҙаҡ ССР-ында 1947 йылға тиклем төрмәлә ултыра. Улы Рөстәм һәм ҡыҙы Гренада менән 12 йылдан һуң, 1949 йылда осраша. Балаларҙы Киров өлкәһе Уржум ҡалаһының балалар йортонда тәрбиәләнгән була.

Дөйөм алғанда, 1930 йылдан Сталин үлгәнгә тиклем, Башҡортостандан илле меңдән ашыу кеше фажиғәле яҙмышҡа дусар ителә. Композитор, йырсы Ғәзиз Әлмөхәмәтов, яҙыусыларҙан Ғабдулла Амантай, Ғөбәй Дәүләтшин, Дауыт Юлтый, Булат Ишемғол, Төхвәт Йәнәби, Һәҙиә Дәүләтшина; дәүләт эшмәкәрҙәренән Афзал Таһиров, Һиҙиәт Сәғәҙиев, Әхмәт Исәнсурин, Зиннәтулла Булашев, Шәрифә Тимерғәлина һәм башҡа меңәрләгәндәр ҡара исемлеккә инә. Архив материалдарынан күп осраҡта ғәйепләү ҡағыҙҙарының ялған булыуы күренә. Был кешеләрҙең күбеһенең ҡәбере билдәһеҙ, әммә уларҙың башҡарған эштәре, үҙҙәре халыҡ хәтерендә. Коммунистар партияһының XX һәм XXII съездары Сталиндың шәхес культын фашлай. СССР-ҙың Юғары суды Хәрби коллегияһы тарафынан меңәрләгән кешеләр үлгәндән һуң аҡлана һәм партия сафына ҡайтарыла, тарихи һәм юридик дөрөҫлөк урынлаша. Яҙмыштары фажиғәле өҙөлгәндәрҙең исемдәре теркәлгән Хәтер китаптары донъя күрә. Тарихыбыҙҙың былдай биттәрен белеү, хәтерләү мотлаҡ кәрәк шул.

**Зилә НИҒМӘТУЛЛИНА.**

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Йомғаҡлау

Ҡағыҙә булараҡ, һәр колхозға айына кәмендә ике тапҡыр кино килә, ә ҡайһы бер колхоздарға - аҙнаһына ике тапҡыр. Йылына 2-3 тапҡыр Өфөнән һәм башҡа ҡалаларҙан ҙур концерт программаһы, колхоз тормошон сағылдырған пьесалар менән артистар, ҡурсаҡ театрҙары артистары труппалары килә.

Заманса башҡорт ауылы тормошонда китапханалар, уҡыу ыҙбалары ҙур роль уйнай (**һүрәт**). Ауыл китапханаларында ғәҙәттә 1500-2000 атамалы китап, брошюра һәм журналдар бар, 5000 атамаға әйә ҙур китапханалар ҙа бар. Улар яҙғы баҫыу эштәре барышында фермалар, бригадалар, артелдәрҙә хеҙмәтләндереүсе күсмә китапханалар ойоштора. Һәр башҡорт ауыл китапханаһы уртаса 6 гәзит, шул иҫәптән туған телендә, һәм 10-ға тиклем журнал алдыра. Китапханаларҙың даими уҡыусылары ауылдағы йорттар һанынан да артып китә. Ғәҙәттә хужалыҡтарҙың 70-80 проценты гәзит алдыра, әммә ҡайһы бер колхоздарҙа һәр йорт гәзитҡә яҙыла.



Дөйөм грамоталылыҡҡа бәйле һәм мәҙәни кимәлдең быгаса булмағанса күтәрелеүе һөҙөмтәһендә башҡорттарҙың донъяға ҡарашы тамырынан үҙгәрә, дини ырымдар тулыһынса юҡҡа сыға.

Ҡарттар төрлө мифик заттар, аждаһа, бәрей, шүрәле, мәскәй, төрлө эйәләр һ.б. тураһындағы хикәйәттәрҙе иҫләй. Әле лә башҡорттарҙың мосолманлыҡҡа тиклемге ғөрөф-ғәҙәттәре тураһында ниндәйҙер материалдар йыйырға мөмкин. Әммә ярты быуат элек, ошо темаларға ололар менән генә түгел, урта йәштәгеләр менән әңгәмәләшкәндә лә был мифик заттарҙы ысын кеүек итеп һөйләйҙәр ине. Бик йыш уларҙың кешеләргә килеп нимә эшләүҙәре тураһында ишетергә тура килде.

Хәҙерге ваҡытта ҡарттар, был хаҡта һөйләгәндә, улар элек була торғайны, хәҙер юҡтар, тип бик йыш ҡабатланы. Йәштәр ололарҙың һөйләгәнен әкиәт кеүек ҡабул итә, уларҙың күпселеге ул мифик донъя тураһында бөтөнләй бер нәмә лә белмәй.

Һынлы, бигерәк тә биҙәкле сәнғәт бик бай һәм төрлө. Тегеү йәки был ысул менән кейем, ҡорал, ат егеү ҡорамалдары, йорт йыһазы биҙәлә. Бигерәк тә сигеү, аппликация төрҙәре төрлө. Үҙҙәре эшләгән туҡыманы фабрика материалына алмаштырыу, үҙҙәре теккән кейемде һатыуҙыҡына, йорт йыһаҙдарын фабрика йәки заводта эшләнгәненә алыштырыу төрлө әйберҙәрҙе башҡорт милли орнаменты менән биҙәүҙе сиклөй. Шуға ҡарамаҫтан, башҡорт сәнғәте үлмәй. Башҡортостан рәссамдары һәм архитекторҙары тарафынан башҡорттарҙың халыҡ һынлы сәнғәте тураһында ҙур материал тупланған, бик ҡиммәтле альбомдар бар. Башҡорт декоратив орнаменты хәҙерге ҡала архитектураһы һәм художество сәнәғәтендә ҡулланылыш тапҡан. Ул совет эмблематикаһы менән байытылған һәм тышҡы стеналарҙы һәм бина эстәрен биҙәгәндә ҡулланыла. Шулай ҙа яңы көнкүрештә башҡорттарҙың бай орнаментын файҙаланыу бик сикле, ә уны биналарҙы биҙәгәндә, текстилдә, келәмдәрҙә һ.б. ҡулланырға мөмкин булыр ине. Сөнки башҡорттар араһында талантлы профессиональ рәссамдар, һынлы сәнғәт оҫталары һәм скульпторҙар, декораторҙар бар.

***✓ Аҡсаң күп булып та, идеяһыҙ фильм төшөрөү ҡурҡынысы бар. Ә бына бәләкәй генә бюджетҡа барыһын да нисек һыйҙырырға тип баш ватҡанда фантазияң нығыраҡ эшләй башлай.***

# МИЛЛИ КИНО

## халҡыңды донъяға

**Кино барлыҡҡа килгән генә мәлдә алдынғы ҡарашлы кешеләр уға ҙур уңыштар юрап, кино - ул иң мөһим сәнғәт төрө, тигән. Советтар Союзы дәүерендә кино пропаганданың иң ҡеүәтле ысулдарынан һаналһа, бөгөнгө донъя кинематографын сәнғәт тип түгел, кино бизнесы тип атау күпкә дөрөҫөрәктер ҙә. Ошондай шарттарҙа милли кинематограф үҙенең алдына ниндәй бурыстар ҡуйырға тейеш? Ғөмүмән, нимә һуң ул милли кино? Ни өсөн беҙҙең тамашасы, башҡорт киноһы юҡ, тигән фекерҙә? "Башҡортостан" киностудияһы режиссерҙары Вилүрә ИҪӘНДӘҮЛӘТОВА һәм Таңсулпан БУРАҠАЕВА менән ошо һорауҙарға яуаптар эҙләйбеҙ.**

**"Милли кино" тигән төшөнсәне нисек аңлатырһығыҙ? Башҡорт киноһын мотлаҡ башҡорт ижадсыһы төшөрөргә һәм унда бары тик башҡорт халҡының милли рухы, әхлаҡи ҡиммәттәре сағылырға һәм был кино бары тик үҙебеҙҙең тамашасыларға ғына тәғәйенләнергә тейешме?**

**Т. БУРАҠАЕВА:** Милли кино - ул халыҡтың мәҙәниәтенә таянып, халыҡ тураһында төшөрөлгән фильм. Боронғораҡ заман күрһәтеләме унда, бөгөнгө көнмө, фильм милләттең рухын, йәшәйеш үҙенсәлектәрен, холоҡҡылығын асып бирергә тейеш. "Ә уны мотлаҡ башҡорт кешеһе төшөрөргә тейешме?" тигән һорауға элегерәк "Эйе" тип яуап бирә инем, хәҙер ҡарашым бер аҙ үҙгәрҙе. Әлбиттә, үҙебеҙҙән башҡа беҙҙең мәҙәниәтте өйрәнеп, икенсе халыҡ тураһында кино төшөрөргә теләгән кеше булмаҫ та, әммә был ихтимал, сөнки донъя кинематографияһында ундай осраҡтар бар. Милли киноның тағы бер күрһәткесе: ул да булһа - тел. Донъя кимәлендә ҡарағанда, бөгөн милли телдәргә ҡыҙыҡһыныу арта. Хәтерегеҙҙә булһа, урыҫтар ҙа аңлаһын өсөн киноны урыҫ телендә төшөрөргә кәрәк, тигән тенденция барлыҡҡа килгәйне бер заман. Хәҙер, киреһенсә, башҡа милләт вәкилдәре субтитр менән ҡарауҙан да ҡыйынһынмай, телдең моңо уларға халыҡты нығыраҡ аңларға булышлыҡ итә. Фантастик фильмдарҙа, әйтәйек, "Аватар" йәки бик популяр булған "Игра престолов" тигән сериалда уйлап табылған халыҡҡа тел дә уйлап табалар, сөнки ул бик тәбиғи яңғырай. Шуға ла башҡорт киноһы башҡорт телендә булһа, был дөрөҫөрәк тә буласаҡ, тип уйлайым.

**В. ИҪӘНДӘҮЛӘТОВА:** Тик шул уҡ ваҡытта "кино теле" тигән төшөнсә лә бар. Тауышһыҙ кинолар осоро булған, йәғни кино теле хәрәкәт аша ла күрһәтелә ала. Субтитрҙары инглиз телендә барған ҡаҙаҡ фильмын ҡарағанда уларҙың нимә хаҡында һөйләшеүе тураһында уйламайым да, минең ундағы картиналарға, операторҙың, режиссерҙың оҫталығына иҫем китә. Тимәк, ижадсы талантын телһеҙ ҙә күрһәтә ала. Икенсенән, һәр телдең үҙенең көсө, моңо бар, фильмдарға ул мәртәбә генә өҫтәй.

"Башҡорт фильмын тик башҡорт ҡына төшөрә аламы?" тигәнгә килгәндә, башҡа милләттән булған белгестәр ижади процеста ҡатнаша алһа ла, режиссер барыбер башҡорт булырға тейештер. Кинопленка ул шундай тылсымлы әйбер, унда һинең ҡаныңа һеңгән милли асылың да сағылыш таба, уға һинең энергетикаң күсә, шунда ғына фильм тамашасының күңеленә барып етә. Халҡыңдың яҙмышы елегеңә үтеп һыҙлағанда ғына, йөрәк ҡаның менән һуғарылғанда ғына милли кино төшөрөп була.

Милли фильм билдәле бер халыҡтың тормошона бәйләнгән, шуның өсөн уны прокатҡа сығарыуы ла ауыр. Кино үҙенә түгелгән сығымдарҙы ҡапларға бурыслы, тип, көнбайышса фекер йөрөтә башлаһаҡ, үҙебеҙҙең милли юҫыҡтағы кинолар зыян күрәсәк. Милли колоритты декоратив маҡсатта ғына ҡуллана башларға тура килмәҫ тимә ул саҡта. Коммерция фильмының милләтен билдәләүе ауыр. Тик шул ваҡытта тап милли кино менән генә кинофестивалдәр, кинофорумдар аша үҙеңдең халҡыңдың барлығын донъяға таныта алаһың. Йәғни, глобаль донъяла милли кинематографтың үҙ урыны бөтөнләй юҡ, тип уйларға ярамай.

**Т. БУРАҠАЕВА:** "Ни өсөн берәй билдәле генә Голливуд йәки Рәсәй актерын саҡырып, прокатҡа сығырҙай кино төшөрмәйһегеҙ?" тип һорайҙар йыш ҡына. Ҡаҙаҡтар "Кочевник" фильмы менән был юлды үтеп ҡараны һәм фильм тулыһынса уңышһыҙлыҡҡа дусар булды. Тимәк, прокатҡа сығыу беҙҙең өсөн беренсел маҡсат булырға тейеш тә түгел.

**Милли кинематография үҫешен тәьмин итеүсе киностудиябыҙ, белгестәребеҙ бар, йыл һайын фильмдар төшөрөлөп тора, тик шулай ҙа ни өсөн тамашасыларыбыҙҙың күбеһе, башҡорт киноһы юҡ, тигән фекерҙә һуң?**

**Т. БУРАҠАЕВА:** Беҙҙең халыҡтың ҡыҙыҡ бер үҙенсәлеге бар: ул һәр ваҡыт нимәлер өмөт итеп һәм был өмөтө аҡланһын өсөн кемгәләр талаптар ҡуйып йәшәй. Һуңғы осорҙа милли идея эҙләйбеҙ, тибеҙ, ләкин кемдер ул идеяны уйлап сығарып, беҙгә тотторорға тейеш һымаҡ. Нишләп лидерҙар тыумай һәм беҙҙе дәртләндереп, артынан эйәртмәй, тибеҙ. Башҡорт киноһына ҡарата ла шундай талап, ахыры: кемдер төп милли идея булырлыҡ фильмды төшөрөп, беҙгә күрһәтергә тейеш, имеш. Әйтерһең, шул саҡта бөтәһенең дә күңеле тынысланып, рухланып китер, улар нимә өсөн йәшәгәнен аңлар, милләт үҫеп, алға китер. Юғиһә, ҡасан ысын кино төшөрә башлайһығыҙ, ни өсөн Салауат Юлаев тураһында фильм төшөрмәйһегеҙ, тигәнерәк һорауҙарҙы бөтөн ерҙә лә бирмәҫтәр ине. Бының менән шуны ғына әйтергә теләйем, милли идея ҡағыҙға яҙылған ниндәйҙер аныҡ идея булмаған кеүек, беҙҙең милли кино ла ниндәйҙер бер төп фильм түгел. Беҙ төшөргән бөтөн фильмдарҙа милли идея бар, сөнки был идея халҡыбыҙҙың асылында, йәшәйешендә, донъяға ҡарашында, мәҙәниәтендә - бары тик быны тоя, күрә белергә кәрәк. Шул саҡта тамашасы фильмдарға ҡарата артыҡ талапсан булмаҫ ине, сөнки бер фильмда халыҡты бөтөн яҡлап асып та булмай.



**В. ИҪӘНДӘҮЛӘТОВА:** Шул уҡ Салауат Юлаевты ла бер фильмда ғына асып бөтөп булмаясаҡ. Береһендә уны шағир-импровизатор итеп, икенсеһендә бала сағын һәм йәшлеген, өсөнсөһөндә Палдискиҙа тотҡонлоҡта үткән ғүмерен төшөрөргә булыр ине. Шул уҡ ваҡытта батырҙың бер яғын асып ҡына ла уның шәхесен күрһәтеп була. Унан һуң, ҙур йылға тулы һыулы булһын өсөн бәләкәй генә инештәр ҙә кәрәк бит әле. Киностудия бар көсөн 15-20 йыл буйына ҙур бер кино төшөрөүгә генә һалды икән, ти, ул саҡта базала башҡа бер кино ла булмаясаҡ. Кино юҡ, тиһәләр ҙә, әле беҙҙең ҡыҫҡа метрлы фильмдар ҙа, документаль фильмдар ҙа, йәнһүрәттәребеҙ ҙә бар. Аҡсаң күп булып та, идеяһыҙ фильм төшөрөү ҡурҡынысы бар. Ә бына бәләкәй генә бюджетҡа барыһын да нисек һыйҙырырға тип баш ватҡанда фантазияң нығыраҡ эшләй башлай. Үҙенә күрә бер мәктәп был ижад кешеһе өсөн.

Матди мөмкинлектәребеҙҙе иҫәпкә алып, ҡыҫҡа фильмдарға ла һалынған ҙур идеяларҙы күрә белһә ине тамашасы. Йыл һайын "Кино төнө" үтә, быйыл 7 яңы фильм тәҡдим ителде. Башҡорт киноһы юҡ, тигән кеше киноға бөтөнләй йөрөмәйҙер ул, тип кенә уйларға ҡала. Былтыр киностудия беренсе тапҡыр этник фильмдар фестивале уҙғарҙы, әллә унда тамашасылар залдарҙы тултырып йөрөнө тиһегеҙме? Быйыл декабрҙә үтәсәк икенсе фестивалдә был хәл үҙгәрер, тип ышанам. Шулай ҙа тамашасы менән бәйләнеш барлыҡҡа килә, йәш режиссерҙар республика буйлап кино күрһәтеп, яҡшы башланғысҡа юл һалды ла инде. Халҡыбыҙҙың бер шәп яғы бар, уны бер ҡуҙғытып ебәрһәң, дәртләнә лә китә ул. Башҡорт бит ул йырлы-моңло халыҡ, оҙаҡ түҙеп өйөндә ята алмай барыбер. Яңыраҡ Ырымбурҙа йөрөп ҡайттыҡ, Ә. Абдразаҡов, Д. Юлтый, М. Буранғолов, Ә. Әбделмәнов, Ғ. Амантаев, С. Агиштың ауылдарында булдыҡ. Ошо сит мөхиттә, далала ултырған ауылдарҙа йәшәүсе 80-90 йәшлек инәйҙәр ҙә килде башҡорт киноһын күрергә. Ағас клублы, 5-6 өйлөк ауылда көн күрһәләр ҙә бөтөнләй икенсе донъяла йәшәй улар. Йәнһүрәттәргә балалар һымаҡ көләләр, фильмдарҙа күрһәтелгән төрлө яҙмышлы геройҙарҙы йәлләп илайҙар, кино бөткәс тә ҡайтып китмәйҙәр, һорауҙар бирәләр. Балалар йәнһүрәттәрҙе ҡабат-ҡабат һорай, уларға бөтөн нәмә танһыҡ. Бөтөн халыҡ өйөндә телевизор ҡарай, клубтар юҡ ауылдарҙа, төшөргән киноларыбыҙҙы кем ҡарар инде, тип уйлайһың ҡайһы берҙә, ә бына ошондай йәнле осрашыуҙарҙан стимул алаһың да, тағы яңы эштәргә тотонаһың.

**Һеҙ үҙегеҙҙең ижади ҡеүәтегеҙҙе тулыһынса тормошҡа ашырам, тип әйтә алаһығыҙмы?**

**В. ИҪӘНДӘҮЛӘТОВА:** Эш бында беҙҙең нимә эшләргә һәләтле булыуыбыҙҙа ла түгел. Әлбиттә, һәр ижадсы үҙенең хыялында әллә ниндәй проекттар йөрөтә. Бына мин бер башҡорт геройы тураһында фильм эшләр инем, тик уны масштаблы итеп күрһәткем килһә, Францияға ла, Германияға ла барырға кәрәк. Бының өсөн тағы ла матди яҡты уйлайһың. Әле төшөргән киноларҙы биҙәр өсөн оркестрҙар яллап, шәп музыка яҙҙырғым килмәй, тиһегеҙме әллә? Композиторға мөрәжәғәт итһәң, был аҡсаға бына ошолай ғына яҙам, тип әйтәсәк. "Мөрйәнән күтәрелә төтөн, бер үк һүрелмәһен" фильмында шул урман араһында бер үҙе йәшәп ятҡан ағайҙың өйөн һауанан төшөргөм килмәйме? Хыялдар ҙа мөмкинлектәр менән бергә үҫә, әле лә ватылған машиналарҙы тауға тиклем этеп мендереп, ҡышын һыуыҡта аэросаналарҙа өшөп йөрөһәк тә, эшләр өсөн шарттар юҡ, тип бер кем дә зарланмай.

**Т. БУРАҠАЕВА:** Кино юҡтан бар булмай, иң тәүҙә уның идеяһы тыуа. Быйыл һиңә матди мөмкинлек биреләме, юҡмы, йылдың ҡайһы миҙгелендә биреләүенә ҡарайһың да, ошо әҙер идеяларҙың береһен һайлап алып эшләргә тотонаһың. Әлбиттә, ҡеүәтемде тулыһынса файҙаланам, тип әйтә алмайым, яңы уҡып бөттөм, киләсәктә һис шикһеҙ тағы ла ҡыҙыҡлы проекттар буласаҡ. Көрсөк заманында ниндәйҙер юлдарын табып, нимәләр төшөрөп, милли кино сәнғәте усағын һүндермәүебеҙ ҙә яҡшы күренеш. Үкенес инде шулай ҙа, йылдар буйы ситуация үҙгәрмәй һәм һин үҙеңде ниндәйҙер бөйөк эшкә тотонорға әҙерлек үтеп йөрөгән уҡыусы һымаҡ ҡына тояһың. Әммә беҙ күңелдәребеҙҙе төшөрмәйбеҙ, ҡолас ташлап эшләр көндәр ҙә булыр әле, киностудияның хәле йылдан-йыл яҡшыра бит барыбер.

**Дәүләт финанслауы проблемаһы уның булыуында йәки булмауында түгел, бәлки, уның аҙ һөҙөмтәле булыуындалыр? Дәүләт ярҙамының кәрәкле фильмдарға китмәгән осраҡтары буламы?**

**В. ИҪӘНДӘҮЛӘТОВА:** Финанс көрсөк тормоштоң бөтөн өлкәләрен ялманы бит инде. Дәүләт финанслауы йылдан-йыл кәмегән хәлдә лә, киностудияның беренсе маҡсаты - ундағы режиссерҙарҙы эш менән тәьмин итеү. Шуға йәнһүрәттәр ҙә, ҡыҫҡа метрлы фильмдар ҙа, документаль фильмдар ҙа йыл һайын төшөрөлә. Унан һуң, һәр сценарийҙы художество советы ҡарай. Шуға ла аҡсаның кәрәкмәгән ергә китеүе - булмаған хәл, киреһенсә, уның аҙ булыуы һөҙөмтәһендә шәп ике әйбер араһынан береһен генә һайларға тура килә. Шуға ла режиссерҙар, миңә мөмкинлек бирмәйҙәр, тип үпкәләй алмай. Режиссерҙарға тамаша-

***Артҡа әйләнеп ҡарап, ҡайһы ғына фильмды алып ҡарама, уларҙың береһе лә буш түгел, йөкмәткеһе яғынан тәрән, фәлсәфәһе лә бар, режиссерҙарҙың күңел һыҙланыуын да сағылдыра. Ҡарап сыҡҡас та, был геройҙың ғүмере минең өсөн һабаҡ, быныһы өлгө, тип уйланһын ине тамашасы. Кеше ниндәй генә дәүерҙә, ниндәй генә шарттарҙа йәшәмәһен, иң тәүҙә кеше булып ҡалырға бурыслы. Ижад кешеһен дә ана шул кеше тигән иң юғары сифат борсой, беҙ шунан бер нисек тә тайпыла алмайбыҙ. Кемдер беҙҙе хыялый ҙа тиер, әммә беҙ бит юғары сәнғәт аша тамашасыны уйландырырға ынтылабыҙ.***

***✓ Милли кинематография үҫешен тулы метрлы фильм ғына билдәләмәй. Тағы берҙе ҡабатлайым, финанс яғынан ҡыҫҡа метрлы фильмды төшөрөүгә еңелерәк, шуға улар беҙҙә күберәк. Сифат яғынан улар һис тә насар түгел.***



сының талабы ҙур булһа ла, ижади коллективтың уларҙың күңелен тынысландырырҙай кино төшөрөрлөк финанс мөмкинлеге юҡ, быны ла танырға тура килә. Шулай ҙа беҙ, ярай әле киностудия бар, тип шөкөр итәбеҙ. Башҡортостанда булған мөһим ваҡиғаларҙан киножурнал эшләнә. Яңыраҡ генерал Шаймуратовҡа һәйкәл асылды, яҡташтары телевизорҙан һәйкәлдең таңғы 4-тә, томанды йырып нисек ауылға килеп инеүе хаҡында һөйләп тора. Их, шунда камера булһа ине, тигән үкенес шунда уҡ күңелде ялманы...

Артҡа әйләнеп ҡарап, ҡайһы ғына фильмды алып ҡарама, уларҙың береһе лә буш түгел, йөкмәткеһе яғынан тәрән, фәлсәфәһе лә бар, режиссерҙарҙың күңел һыҙланыуын да сағылдыра. Ҡарап сыҡҡас та, был геройҙың ғүмере минең өсөн һабаҡ, быныһы өлгө, тип уйланһын ине тамашасы. Кеше ниндәй генә дәүерҙә, ниндәй генә шарттарҙа йәшәмәһен, иң тәүҙә кеше булып ҡалырға бурыслы. Ижад кешеһен дә ана шул кеше тигән иң юғары сифат борсой, беҙ шунан бер нисек тә тайпыла алмайбыҙ.

булып килә алмай, мәҫәлән, ҡапыл ғына финанс мөмкинлек килеп тыуҙы ла, бөтөн режиссерҙар уға тотоноп китте түгел. Әгәр ҙә етди тотоноп, халыҡтың да фекерен алып, яҡшы сценарий менән төшөрһәң, ун йыл эсендә ҙур бюджетлы тарихи бер фильм эшләргә була. Ҡырғыҙҙар бит "Курманджан датка" фильмын шулай уҡ оҙаҡ йылдар төшөргән, ә ниндәй һөҙөмтә бирҙе ул! Ә замансараҡ, ябайыраҡ сюжетлы фильмды 1-2 йыл эсендә төшөрөп бөтөргә була.

**▸ Милли кинематографияның үҫешен тулы метрлы фильмдар ғына билдәләйме?**

**В. ИҪӘНДӘҮЛӘТОВА:** Мотлаҡ түгел. Ҙур кино юҡ икән, беҙҙә кино үҫешмәгән, тип уйлау хата. Был бигерәк тә фестивалдәргә йөрөгәндә күренә. Ҡайһы берҙә ниндәйҙер дәүләт фестиваль үткәрә, ә үҙҙәрендә кино бөтөнләй үҫешмәгән. Ҡайһы бер республикаларҙың киностудияһы юҡ, тимәк, уларҙың кино ижад итергә базаһы юҡ. Мәҫәлән, Чебоксарҙа шундай фестиваль үтә, ҡайҙан ғына ҡатнашыусылар килмәй унда. Тик уларҙың визы һайлана һәм ошо девизға торошло фильмдар һайлап алына - был фестивалдәрҙең эске сәйәсәте. Мәҫәлән, Венеция кинофестивалендә һыу темаһы өҫтөнлөк ала. Дини фестивалдәр бар.

**▸ Башҡорт киноһын йыш ҡына ҡаҙаҡ, ҡырғыҙ кинолары менән сағыштыралар, минеңсә, был бөтөнләй урынһыҙ кеүек. Ни тиһәң дә, был дәүләттәрҙә кино сәнғәте үҫеше беҙҙең республикалағы кеүек 25 йыл менән генә сикләнмәй бит?**

**В. ИҪӘНДӘҮЛӘТОВА:** СССР тигән бөйөк дәүләт бар саҡта Ҡырғыҙстан да, Ҡаҙағстан да - союз, беҙ автономлы республикалар инек. Һәр бер союздың үҙенең киностудиялары бар ине - "Ҡырғыҙфильм", "Ҡаҙаҡфильм" һ.б. Ни өсөн бөгөн ҡырғыҙҙарҙың бөтөн документаль фильмдары һәйбәт? Сөнки һуғыш ваҡытында Балтика буйы киностудияһы бөтөн базаһы менән эвакуацияланып, Ҡырғыҙстанда көслө кино мәктәбе тыуҙыра. 1941 йылда Ҡаҙағстандың Алма-Ата киностудияһы "Мосфильм" һәм "Ленфильм" киностудиялары менән ҡушыла. "Берләштерелгән һәр береһе кино ҡарауға 100-әр һум ғына сығарып һалһа ла, кино төшөргән сығымдар ниндәйҙер кимәлдә кире ҡайта ла ҡуя. Башҡортостанда башҡорттар күпме, ә Өфөлә? Бөтөн райондар буйлап күрһәтеп үтһәк тә, прокат ҡеүәһе сикле беҙҙә. Беҙ үҙебеҙҙе яҡуттар менән сағыштыра алыр инек. Әлбиттә, уларҙың матди хәле яҡшыраҡ, сөнки алмас яткылыктарына бай төбәк. Улар фильмдарға бик ҙур инвестициялар һала, минеңсә, һуңғы осорҙа яҡут фильмы тигән феномен да барлыҡҡа килде хатта.

**В. ИҪӘНДӘҮЛӘТОВА:** Яҡут фильмы феномены тип әйтергә ашыҡмайыҡ әле, Таңсулпан. Яңыраҡ ҡына өр-яңы фильмдары сыҡты, унан алдараҡ төшөрөлгән 1-2 фильмдарын ҡарарға тура килде. Уларҙа мәңгелек туңлыҡ һәм ауылдарының аралары шул тиклем йыраҡ, мәҫәлән, береһе Өфөлә урынлашҡан икән, икенсе ауылдары Баймаҡта һымаҡ. Бер көндө бер ауылда күрһәтәләр ҙә киноны, вертолет менән икенсеһенә алып китәләр. Башҡа кинолар уларға барып та етмәй. Сифаты яғына килгәндә, был кинолар һауалағы спектакль

мәк, был сифатлы кино, тигән мөнәсәбәт барлыҡҡа килде. Мин фестивалгә "Кәләш алам" фильмын алып килгәс, уҡытыусыбыҙ курсташтарыма: "Һеҙ Таңсулпанға ҡарамағыҙ, уның артында бөтөн Башҡортостан тора, ә һеҙ үҙегеҙҙең булмаған мөмкинлектәрегеҙҙән сығып кино төшөрәһегеҙ", - ти. Техник яҡтан мөмкинлектәр бар беҙҙә, мәҫәлән, крандар ҡулланабыҙ, ә ул кранды ҡуртымға алыу ныҡ ҡыйбатҡа төшөр ине.

**В. ИҪӘНДӘҮЛӘТОВА:** Матди базаһы бөтөнләй булмаған башҡа өлкәләр менән сағыштырғанда, беҙҙең эшләргә мөмкинлегебеҙ бар, етәкселек тарафынан ярҙам, аңлау бар, идеяларҙы худсоветҡа сығара алабыҙ. Быйыл киностудияның штатында булмаған ике режиссерҙың - Руслан Юлтаев һәм Андрей Носковтың кинолары үтте. Йәғни, бәләкәй генә бюджеттан башҡаларға ла ярҙам итеү ысулдарын табабыҙ. Беренсе кинофестивалдә кинопавильон төҙөлдө, быйыл тон студия төҙөлөп ята, үҙебеҙҙең тауыш яҙҙырыу студияһы буласаҡ. Был йәһәттән республика Башлығының грантынан ҙур файҙа күрәбеҙ, ул беҙгә генә түгел, күпме мәҙәниәт усаҡтарына ярҙам булды. Ике кино төшөрөлдө был гранттарға, береһе Булат Йософовтоң "Визит" фильмы, икенсеһе Айнур Асҡаровтың "Әсә" киноһы.

Әмир ағай Абдразаҡов театр режиссеры булһа ла, башҡорт киноһы булһын, тип, башҡорт яҙыусыларының әҫәрҙәрен күмәк сәхнәләр, аттар, менән төшөрөп, телевизион ысул менән булһа ла сериал рәүешендә сығара алған. Бөгөнгө көн күҙлегенән ҡарағанда, ул бик дөрөҫ эшләгән, кемдер башларға тейеш ине бит. Ҡаҙағстанда киностудияла эшләгән Малик Яҡшимбәтов ҡайтып, матур кино мәктәбе өлгөһө күрһәткән. "Врата свободы" киноһын төшөргән саҡта уның эргәһендә ярҙам итеп йөрөүсе йәш егеттәр - Рияз Исхаҡов, Даян Ғәйетҡоловтар уның фатихаһы буйынса уҡырға киттеләр. Йәш булһа ла, киностудияның тарихы бай, киләсәге лә киноларға, шәхестәргә бай булыр.

# МЕНӘН ГЕНӘ... таныта алаһың

Кемдер беҙҙе хыялый ҙа тиер, әммә беҙ бит юғары сәнғәт аша тамашасыны уйландырырға ынтылабыҙ. "Мөрйәнән күтәрелә төтөн, бер үк һүрелмәһен" киноһында ғүмер буйына яңғыҙ йәшәгән геройҙы, мәҫәлән, бәхетле йәшәгән тип әйтеп буламы? Мин бәхетле, тип әйтеп торһа ла, уның күңеле тулы һағыш, тормоштоң күпме ләззәттәренән мәхрүм ҡалған. Шунан был кешене аҡыллы тип иҫәпләй алабыҙмы? Икенсе яҡтан, һин уның урынында булһаң ни эшләр инең? Бер үҙе урманда йәшәүе батырлыҡ та һымаҡ, икенсе яҡтан, батырлыҡмы ул? Бына бындай һорауҙарҙы беҙ тамашасыларға ҡалдырабыҙ. Хөкөм сығарыр алдынан ныҡ уйларға кәрәк, уйлана белгән кеше генә аҡыллы тип иҫәпләнергә хаҡлы шуға ла.

**▸ Ҡыҫҡа метрлы фильмдарҙы оҫта итеп төшөрөргә өйрәндек хәҙер. Тулы метрлы фильмдар ошондай уҡ уңышҡа өлгәшә алыр инеме?**

**Т. БУРАҠАЕВА:** Халыҡ араһында ҡыҫҡа метрлы фильм - ул етлекмәгән фильм тигәнерәк ҡараш йөрөй. Ҙур фильм төшөрә алмағанға, ҡыҫҡа метрлы фильмдар төшөрәләр, тип уйлайҙар улар. Сығымдар яғынан ҡарағанда был шулайҙыр, әммә ҡатмарлылыҡ йәһәтенән улар бер нисек тә айырылмай. Киностудияла ҙур фильмдар төшөрөлгәне бар, мәҫәлән, Айсыуаҡ Йомағоловтың, Булат Йософовтоң фильмдарын алайыҡ. Әгәр ҙә мөмкинлектәр булһа, тулы метрлы фильмдарҙы барыһы ла төшөрә аласаҡ.

**В. ИҪӘНДӘҮЛӘТОВА:** Тулы метрлы фильмдар тотош ағым донъя кимәлендәге фильмдары ҡайҙа? Сағыштырып ҡараһаҡ, беҙҙә ҡыҫҡа метрлы фильмдар ҙа, документалистика ла, йәнһүрәттәр ҙә фестивалдәрҙә лайыҡлы сығыш яһарлыҡ кимәлдә, үҙ киноң өсөн оялып ултырмайһың.

**Т. БУРАҠАЕВА:** Милли кинематография үҫешен тулы метрлы фильм ғына билдәләмәй. Тағы



Үҙәк киностудия" тип атала ул һәм 1944 йылға тиклем бөтөн киноларҙың 80 проценты ошонда төшөрөлә. Эйзенштейнға "Иван Грозный" фильмын төшөрөргә ярҙам итеп йөрөгән ҡаҙаҡ та кино сәнғәте серҙәренә өйрәнеп йөрөгәндер бит инде. Унан һуң, тәжрибә менән бергә матди база ла тороп ҡала. Бөгөн ҡырғыҙҙар ҙа, ҡаҙаҡтар ҙа ошо мәлдә сәселгән орлоҡтарҙың уңышын йыя. Ә Башҡортостанда кино-

***Беҙҙең халыҡтың ҡыҙыҡ бер үҙенсәлеге бар: ул һәр ваҡыт нимәлер өмөт итеп һәм был өмөтө аҡланһын өсөн кемгәлер талаптар ҡуйып йәшәй. Һуңғы осорҙа милли идея эҙләйбеҙ, тибеҙ, ләкин кемдер ул идеяны уйлап сығарып, беҙгә тоттороорға тейеш һымаҡ. Нишләп лидерҙар тыумай һәм беҙҙе дәртләндереп, артынан эйәртмәй, тибеҙ. Башҡорт киноһына ҡарата ла шундай талап, ахыры: кемдер төп милли идея булырлыҡ фильмды төшөрөп, беҙгә күрһәтергә тейеш, имеш. Әйтерһең, шул саҡта бөтәһенең дә күңеле тынысланып, рухланып китер, улар нимә өсөн йәшәгәнен аңлар, милләт үҫеп, алға китер.***

берҙе ҡабатлайым, финанс яғынан ҡыҫҡа метрлы фильмды төшөрөүгә еңелерәк, шуға улар беҙҙә күберәк. Сифат яғынан улар һис тә насар түгел. Америка фильмдары менән сағыштырыуҙан киләмелер ҡыҫҡа метрлы киноға бындай мөнәсәбәт? Улайға ҡалһа, "Оскар"ға тәҡдим ителгән милли кинолар ҙа бар. Яңыраҡ бер ҡаҙаҡ режиссеры Ермек Турсуновтың "Килен" фильмы "Оскар"ҙың һайлап алыу турҙарының ярым финалына етте. Ә ҡырғыҙ режиссеры Эльнура Османалиеваның "Сәйҙә" ҡыҫҡа метрлы фильмы Венеция кинофестиваленең конкурс программаһына үтте.

**В. ИҪӘНДӘҮЛӘТОВА:** Унан һуң "Оскар"ға ла иң һәйбәт фильмдар бара тип әйтеп булмай бит. Һәр фестивалдең үҙенең дестудия барлыҡҡа килгәнгә 25 кенә йыл. Беҙҙә бындай техник база бер ҡасан да булманы. Былтыр күсенгән бина иҫәбе буйынса унынсыһы икәнен генә иҫәпкә алһаҡ та, хәлебеҙҙең нисек булыуын самаларға тейештәр. Ижад кешеһе өсөн матди-техник база үҙе бер ҡорал.

**Т. БУРАҠАЕВА:** Тағы ла прокат темаһына әйләнеп ҡайтҡанда, ҡаҙаҡтар ҙа, ҡырғыҙҙар ҙа һан яғынан башҡорттарға ҡарағанда күберәк. Ҡырғыҙҙарҙың үҙҙәренең әйтеүе буйынса, уларға сит кинолар бөтөнләй килмәй, улар тик үҙҙәренең киноларын ғына ҡарай. Ҡаҙағстанға Голливуд кинолары килә, тик ҡаҙаҡтарҙың үҙҙәренең кинолары уларға конкуренция тыуҙыра ала. Сама менән ҡаҙаҡтар - 10 миллион, ҡырғыҙҙар 4 миллион, уларҙың кеүек. Улар шуны кино тип уйлайҙар, әммә был әле кино түгел. Хәҙер яҡуттар үҙҙәрен аҡлау өсөн, беҙ үҙебеҙҙең кинобыҙҙы булдырабыҙ, ул традицион Рәсәй киноһына ла, Голливуд фильмына ла оҡшамаған, тип әйтәләр. Яҡуттар бик талантлы, бик музыкаль халыҡ, уларҙың һәр береһе рәссам, шаман, тик милли кино уларҙа әлегә юҡ. Улар әле үҙенең киноһын булдырырға маташа ғына. Бына башҡорт фильмы тигән феномен барлыҡҡа килә башланы.

**Т. БУРАҠАЕВА:** Ысынлап та, Санкт-Петербург дәүләт кино һәм телевидение институты үткәргән Питеркит фестиваленә беренселәрҙән булып Айнур Асҡаров, Андрей Носков юл һалды инде. Хәҙер унда, Башҡортостанда төшөрөлгән, тиһәләр, ти-

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Йәмғиәттең милли кино репертуарына иғтибар итеп, хатта уға ниндәйҙер тәнҡит һүҙҙәре белдереүе, бәлки, битарафлыҡҡа ҡарағанда яҡшыраҡтыр ҙа. Икенсе яҡтан, бөгөнгө кинотеатрҙарҙың потенциаль тамашасыһының йәше уртаса 25-30 йәш тип алһаҡ һәм уларҙың төрлө махсус эффектлы Голливуд киноларында тәрбиәләнеүен иҫкә төшөрһәк, башҡорт режиссерҙары уларҙың талабына бер ҡасан да яуап бирмәйәсәк, сөнки милли киноның үҫеш юлдары бөтөнләй икенсе төрлө. Абруйлы халыҡ-ара фестивалдәрҙә лайыҡлы баһа алып йөрөгән режиссерҙарыбыҙҙың фильмдары кинематографик яҡтан белемле, заманса әйткәндә, эстетик йәһәттән алдынғы тамашасыларға тәғәйенләнеүе лә башҡорт киноһының юғарылығы тураһында ғына һөйләй түгелме? Һәр хәлдә, башҡорт киноһы, уның үҙенең ныҡлы нигеҙҙәре, тимәк, киләсәге лә бар. Тамашасыға уны күрә белергә өйрәнергә генә кәрәк.**

**Ләйсән НАФИҠОВА**
әңгәмәләште.

ЯҘЫУСЫҒА ӨС ҺОРАУ

**Әҙәбиәт йылы уңайы менән булдырылған рубрикабыҙҙа был юлы беҙҙең һорауҙарға шағир, әҙәби тәнҡитсе, филология фәндәре докторы, БДУ профессоры Фәнил Күзбәков яуап бирә.**

# РУХ ИЛСЕҺЕ БУЛҒАН ӘҘИП...

## үҙ һүҙен мәлендә әйтергә бурыслы

**➔ Художестволы әҙәбиәт идеологияға буйһонмай, ул идеологияны барлыҡҡа килтерергә тейеш, тибеҙ. Әҙәбиәттең йылдан-йыл тормоштоң бәләкәй генә майҙансығына ҡыҫырыҡлана барыуы уның йәмәғәтселек өсөн яраҡһыҙ институт икәнлеген аңлатмаймы?**

- Граждандар йәмғиәте көслө булған, йәиһә рухиәтте алға ҡуйған зыялылар ил башында торған ҡоролошта ғына әҙәбиәт идеологияны барлыҡҡа килтерешеүҙә һиҙелерлек роль уйнай ала. Асылда иһә, власть әһелдәре әҙәбиәтте генә түгел, ғөмүмән, сәнғәтте, улай ғынамы - буйһондора алған бар даирәне һәр осорҙа ла үҙенә хеҙмәт иттерергә тырышҡан һәм тырыша. Был күренештең заманына ярашлы формалары, сифаты, кимәле генә үҙгәрә, ә асылы шул килеш.

Әммә, бәхеткә, сәнғәттең алымдары күп төрлө. Образлы, кинәйәле телдә, берҙе һөйләп, икенсене аңғарта алыу мөмкинлектәре менән иң ҡаты цензура аҫтында ла, бетонды ярып килеп сыҡҡан йәшел үлән ҡыяғы һымаҡ, үҙенекен итеп, йәшәүгә һәләтле ул сәнғәт. Шулай булмаһа, менәр йыл әүәл ижад ителгән әҫәрҙәр беҙҙең дәүергә килеп етмәҫ, еткән хәлдә лә күңелдәрҙе тетрәндерә, зиһенде яҡтырта, аҡылды байыта алмаҫ ине. Шундай илаһи көскә эйә булғанға ла әкиәт икәнен белгән әкиәтте уҡығанда ла тәрән кисерештәргә юлығаһың, ә трагедия кеүек әҫәрҙәр тураһында һүҙ ҙә юҡ. Хыял донъяһына бирелгән автор үҙе лә йәшкә быуылып ултырыуы ихтимал. Ижадсының бындай халәтен Пушкин ана нисегерәк тә аңлайышлы итеп әйтеп бирә алған: "Над вымыслом слезами обольюсь..."

Әлбиттә, һәр ижадсы - үҙ заманының балаһы. Әммә улар араһында ла заман идеологияһына ихластан инанып ижад итеүселәр бар, тамаҡ һәм дан хаҡына "эш" күрһәтеүселәр ҙә бар. Тик, нисек кенә булмаһын, теге йәки был әҫәрҙе ниндәйҙер идеяға хеҙмәт иткән тип кенә юҡҡа сығарыу үҙен аҡлап бөтмәйәсәк. Сөнки уның баһаһы ваҡыт һынауҙарын үткәндән һуң идеяға бирелгән-бирелмәгәнлеге менән түгел, ә сәнғәт әҫәре, ижад емеше булараҡ, тормош дөрөҫлөгөн бар ҡапма-ҡаршылығында аса алыу-алмауы менән билдәләнәсәк.

Идеяларҙың да бит төрлөһө булған һәм бар. Ғүмерлеһе, ғүмерһеҙе. Әммә, тота килеп, "идея" һүҙе ҡулланылған өсөн генә ниндәйҙер ҡараштарҙы инҡар итеү мәғәнәһеҙлек булыр ине. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, әлегә күпселекте иртәгәге әйҙәрлек, күңелдәрен елкендереп, аҡылдарын биләп, оптимистик уйҙар ҡуҙғытырҙай, өмөттәрҙе баҙлатырҙай идея табылмаған. Ә күптәр әйткән яҡшылыҡ - дөйөм төшөнсә генә шул. Кемдер өсөн яҡшы булған күренеш икенсе берәүгә бик насар булыуы ихтимал, ә өсөнсөһөнә һыуыҡ та, эҫе лә түгел. Шулай ҙа әҙип, рух илсеһе булараҡ, үҙ һүҙен мәлендә әйтергә бурыслы.

Йәнә бер күренешкә иғтибар итке килә. Әҙип, мәсәлән, уҡыусыһының мәнфәғәттәрен, рухи кимәлен белеп, иҫәпкә алып эш итһә, насар түгел. Ә бына "Уҡыусы ошоно ярата бит, ошоно үҙ итә" тигән принцип ҡына өҫтөнлөк итә башланымы - ижадсының кәсепсегә әйләнеүен көт тә тор (бөгөн беҙ бындай күренештәрҙең тере шаһиты). Эйе, кәсепсенең эшләгәне лә баҙарҙа үҙ алыусыһын табыр. Ә Хоҙай мөһөрө менән тамғаланғанын күрмәй үтеүҙәре лә бик ихтимал. Сөнки, әгәр ҙә һәр нәмә, һәр күренеш, һәр бер әҙәм балаһы, исеме есеменә тап килеп, тәбиғәтенә, булмышына ярашлы тәғәйен генә баһаланһа, кешелек донъяһы күптән ожмах баҡсаһында ғына йәшәр ине. Әлегә ошо бер генә "әгәр" менән сикләнеп, шуны айырым-асыҡ билдәләйек әле, йәмәғәт: ысын мәғәнәһендәге ижад емеше, һатыуға сығарыла ҡалған хәлдә лә, һис кенә лә баҙар бизмәне менән генә үлсәнә алмаған! Беҙ иһә, күптәребеҙ социализм дәүерендә формалашҡан быуын, баҙарҙы һүгәһүгә, ул тыуҙырған шарттарға яраҡлашырға маташабыҙ. Һәм... яраҡлашасаҡбыҙ. Сөнки әҙәм балаһына, биологик затҡа, иң ябай ғына булһа ла йәшәрлек шарттар кәрәк. Әммә ул биологик зат ҡына түгел бит. Ул - Кеше! Хоҙай яралғыһы, тик ошо яралғыға Иблис тә үҙ өлөшөн индереп өлгөргән. Бына ошо ҡапма-ҡаршылыҡтарҙан туҡылған яралғыны һүрәтләүсе әҙип үҙе лә әүлиә түгел. Ул да әҙәм балаһы: берәүһе хәҡиҡәт эҙләй, үрһәләнә, нимәлер таба, низелер юғалта; икенсеһенә бындай ғазаптар бөтөнләй хас түгел, әммә һәләтенә ярашлы "баҙар" хаҡтарын, "баҙар" талаптарын белеп эшләгән "әйберҙәр"е бар; өсөнсөһө, дүртенсеһе... Һәр ҡайһыһының әйтер һүҙе бар. Булһын, әйтелһен! "Әйт, кем икәнең асыҡланыр", ти бит аҡыл эйәһе. Ана шул әйтелгәнгә, яҙылғанға тәғәйен баһа бирә алһаҡ икән дә бит...

Идеология, әлбиттә, йәмғиәтте туплау өсөн кәрәк. Башҡортта ил-йортто зирәк аҡыллы сәйәсмән ил ағалары



менән йәнәш ҡанатлы һүҙгә маһир сәсәндәребеҙ һаҡлаған. Үҙ бурысын яҡшы аңлағандары ил зарын һөйләп кенә ҡалмаған, ә халыҡ исеменән ни эшләргә кәрәклеген күпселек яҡшы аңларлыҡ кимәлдә әйтеп тә биргән. Тап ошондай бурысты күҙ уңында тотҡан Ҡарас сәсән "Мин - халыҡтың теле", ти. Халыҡ үҙе лә бындай шәхескә рух илсеһе, ҡанатлы һүҙ менән милләт исеменән сығыш яһаусы итеп ҡараған. Ысынында ла атаҡлы һүҙ оҫталарыбыҙҙың тарихи роле - уларҙың халыҡ телләгән, халыҡ өмөтөн, халыҡ аһын килер быуындарға еткерә алыуҙарында. Әммә шуныһын күҙ уңынан ысҡындырырға ярамайҙыр: халыҡ исеменән сығыш яһаусыны, халыҡ мәнфәғәтен ҡайғыртыусыны йәмәғәтселек үҙ мәлендә ҡабул алһын, уны күтәрмәләһен, күҙ ҡараһылай һаҡлаһын ине. Сөнки бындайҙар бик-бик һирәк, мендән берәү. Хатта Ҡарас сәсән был йәһәттән үҙенең икеләнеүен белдерә: "Мин - халыҡтың теле, - тип тора ла, - тик халыҡ ауыҙын асырмы икән?"- тип риторик һорау ҡуя. Тел эшкә егелһен өсөн ауыҙҙың асылыуы кәрәк шул. Был һорау бөгөн дә ни тиклем актуаль, ҡырҡыу яңғырай! Ауыҙын аса аламы халыҡ? Асырға теләге, әйтә алыр һүҙе бармы? Уның исеменән сығыш яһай алырлыҡ әҙиптәребеҙгә ышанырлыҡмы? Әллә, шыма һөйләп, ҡаҡ таҡтаға һалаларМЫ? Әйтә лә алды, ышандырҙы ла, ти, әйәрерлекме халыҡ?

Әҙәбиәттең йылдан-йыл тормоштоң бәләкәй генә майҙансығына ҡыҫырыҡлана барыуы властарҙың сәнғәтте, әҙәбиәтте тейешенсә баһалай, тулыһынса ҡуллана белмәүҙәренән һәм белергә лә теләмәүҙәренән тип уйлайым. Әммә бәләнең башы шулай ҙа йәмәғәтселектең рухи ҡиммәттәргә (хатта туған телебеҙгә ҡарата!) битарафлығында. Шуны аңлаһаҡ ине: йән эйәһе булараҡ үҙебеҙҙе нисек тә һаҡлай алырбыҙ ул (ашарлыҡэҫерлек, кейенерлек, йәшәрлек урын - былары ғына нисек тә булыр), тик әҙәм балаһынан Кеше булыу талап итеlә бит ул. Улай ғына ла түгел, билдәле милләт вәкиле булған Кеше, тимәк, милләтенә торошло башҡорт була алыу талап ителә! Күренеүенсә, милләтте һаҡлау, бергә туплау, бөгөнгө катаклизмдарға бирешмәслек иммунитет булдырыу өсөн милли идеология кәрәк. Ул беҙгә үҙебеҙҙе башҡорт булараҡ һаҡлау өсөн кәрәк, ә кемдәргәлер ҡаршы сығыу, башҡаларҙы баҫып алыу, буйһондороу, үҙенә хеҙмәт иттереү өсөн түгел. Әҙиптәребеҙ тап ошондай уй-теләк менән Шәйехзада Бабич, Рәми Ғариповтар һымаҡ яңһа икән!..

Әлегеһе мәлдә иң кәрәге шулдыр: халҡым, милләтем тиһең икән, ҡулыңдан килгәнен эшлә. Аҡса юҡлыҡҡа, эшһеҙлеккә, етәкселеккә зарланма. Йүнсел йүнен табыр, ташҡа ла ҡаҙаҡ ҡағыр! Проблеманы моронлаған ерендә үк хәл итергә ынтылайыҡ, йәмәғәт! Шул осраҡта әҙәбиәттең дә алыштырғыһыҙ роль уйнауы асыҡланыр, сөнки аңлашып эшләү өсөн һөйләшеп алырға ла кәрәк бит. Ҡанатлы һүҙ менән рухланып башҡарылған эш артынса ойошторолған байрамдың йырһыҙ үтмәүе лә йәнә бер иҫбатланыр.

**➔ "Донъяны матурлыҡ ҡотҡарыр" тигән Достоевский. Ә бына донъяны тик шиғыр ярҙамында ғына нисек итеп үҙгәртеп була, тип уйлайһығыҙ?**

- Буталсыҡлыҡҡа юл ҡуймау маҡсатында шуны теүәл генә асыҡлап китәйек: һүҙ нимә тураһында бара һуң? Бит донъя күп ҡырлы, ҡапма-ҡаршылыҡлы, даими үҫеш-үҙгәрештә. Унда төрлө-төрлө илдәр, меңәрләгән милләттәр, тиҫтәләгән конфессиялар йәшәй. Байы бар, ярлыһы бар. Әйтәйек, Америка Ҡушма Штаттары Рәсәйҙе ҡотҡарырға теләр инеме? Йә булмаһа, матурлыҡты француз, эскимос йәки башҡорт бер төрлө генә күҙаллаймы? Тышҡы матурлыҡты, эске матурлыҡты?.. Ниңә, атаҡлы яҙыусы был турала уйланмағандыр тиһеңме ни, тиер кемдер. Бөтә хикмәт тә шунда шул. Үйҙарының осона сыға алмағанға ла әҫәрҙән-әҫәргә был турала һүҙ оҙайта бит ул. Тел төбө иһә матурлыҡты христиандарса аңлауға илтә. Йәғни Хоҙай Тәғәлә яралтҡанға донъя илаһи, матур һәм уйлы әҙәми зат, Достоевский аңлауынса, Муса бәйғәмбәрҙәй, кешелек хаҡына үҙен ҡорбан итергә әҙер булып, Илаһ ҡылған бар матурлыҡты һаҡларға тырышыу ғына уны ҡотҡарып ҡаласаҡ тигән инаныс менән йәшәргә бурыслы.

Гәзит сиктәрен иҫәпкә алып, фәлсәфә диңгеҙенең тәрән сөңгөлдәренә ыңғайлаҡ өсөн "матурлыҡ"ты сәнғәткә бәйле аңлайыҡ та, "донъя"ны башҡорт донъяһы менән генә сикләп торайыҡ (юғиһә, Рәсәй киңлеге лә дарыны бушҡа шартлатыуға килтереүе бар).

Ысын мәғәнәһендәге художестволы әҫәр уҡыусының күңел донъяһына нур төшөрмәй ҡалмай тигән фекерҙәмен (Теләһә ниндәй шиғырҙың да үҙ уҡыусыһы булыуы мөмкин. Әммә әлегә һүҙ был турала түгел, ә сәнғәт критерийҙарына яуап биргән, талапсан зауыҡты хушһындырған әҫәрҙәр хаҡында). Талантлы шиғыр матурлыҡты күрергә, тәрәнерәк аңларға, уны тейешенсә баһаларға ла ярҙам итә, әйләнә-тирәне, кешеләр араһындағы мөнәсәбәттәрҙе яҡшыраҡ, камилыраҡ итергә ынтылыш та тыуҙыра. Күренеүенсә, юғары художестволыҡҡа эйә әҫәр зауыҡлы уҡыусыны илһамландырып ҡына ҡалмай, ә ыңғай, әүҙем эшмәкәрлеккә әйҙәй, донъяның, йәшәйештең илаһилығын, әҙәм балаһы булмышының серлелеген, ҡабатланғыһыҙ булыуын күрһәтеп, кешелә матурлыҡ тойғоһон, теләһә ниндәй осраҡта ла Кеше булып ҡалыуҙың бөйөклөгөнә инаныс тәрбиәләй. Парта артында шиғыр ятлатып түгел, ә "аҡыллы йөрәк" (Лев Толстой) формалаштырыу юлы менән. Бындай инаныс, Кешенең бөйөклөгөнә инаныс, ижадсымын тигән ижадсыға бик кәрәк. Был осраҡта ул ҡот осормалы күренештәрҙә лә матурлыҡты асығыраҡ күрһәтеү өсөн файҙаланасаҡ. Мәсәлән, Гюгоның Квазимодаһы менән Эсмеральда. Улай ғына ла түгел әле. Тышҡы ҡотһоҙ-

*✓ Яҡты донъяға тыуып, мине ҡулыңа алғас, был мәлгә тиклем тик ошо бәхетле минуттар өсөн йәшәгәнеңде аңлауҙан күҙҙәреңдән йәштәр эркелер. Тып-тып тамған тамсылар битемдә өтөп, йоҡомдан уятыр.*



лоҡ менән эске донъяның ярашмауы ла бар. Шул уҡ Квазимоданың күңеле матур түгелме ни? Үҙен ҡурҡыныс аҫтына ҡуйып, матурлыҡты ҡотҡарырға ынтылыуы менән генә лә ул үҙенә ҡарата теләктәшлек, һоҡланыу, йылы тойғо уята. Бындай әҙәби күренештәрҙе донъя әҙәбиәтенә юлланмайынса ла табып булыр ине. Мәҫәлән, Суфиян Поварисов Ғәлимйән Ибраһимов яҙмышына арналған трилогияһында тышҡы һәм эске донъяның ярашыу-ярашмауына бәйле фәһемле күренештәрҙе мауыҡтырғыс итеп тасуирлай алған.

Ғөмүмән, "Рәсәйҙә Шағир - шағирҙан юғарырыҡ" (Евгений Евтушенко) тигән фекер менән килешкәндә, шиғыр ярҙамында күпкә өлгәшергә мөмкин. Бындай инаныс тәү сиратта, әлбиттә, шағирҙың үҙе өсөн кәрәк (үҙе менән һоҡланыу, кәпәренеү өсөн түгел, ә миссияһының иҫ китмәле яуаплылығын аңлау өсөн!), ә зауыҡлы уҡыусыға донъяны ла, үҙен дә артабан камиллаштырыу өсөн.

**➔ Ҡатын-ҡыҙ ир-ат өсөн асылып бөтмәгән сер булып ҡалырға тейеш, тибеҙ. Әгәр ҙә асылып бөтһә, ул ҡатын-ҡыҙҙың ир-ат өсөн ҡыҙығы ҡалмай, тиҙәр. Был дөрөҫмө?**

- Был осраҡта күптәр "сер" тигәндә көтөлмәгән ҡыуаныс килтерә торған тылсымды күҙ уңында тоталыр, моғайын. Сөнки Пандора йәшниге лә сер менән лыҡа тулы, тик уның бикле тороуы хәйерлерәк. Тылсымға килгәндә... Бала саҡта, мәҫәлән, һәр көндө тылсымдай ҡабул итәһең. Һәр көн һинең өсөн яңылыҡ, һәр көн ниндәй ҙә булһа эҙ ҡалдыра. Ә иртәгәге көн тағы ла сағыуыраҡ булыр һымаҡ. Бәлки, был бәхетле балалыҡ өсөн генә шулайҙыр. Ихтимал, шулайҙыр. Заманында Булат ағай Рафиҡов та балалығы һуғыш осорона тура килгән быуын исеменән, асырғанып, "Салбар ишаратын тарта-тарта, ҡасҡым килде бала сағымдан", тип ҡуйғайны.

Ҡатын-ҡыҙға килгәндә... Ысынында ла тылсым эйәһеләй булырға тейештер ул. Ҡатын-ҡыҙға Хоҙай Тәғәлә тарафынан, миңә ҡалһа, ир-атҡа ҡарағанда бар сифаттар ҙа мулыраҡ бирелгәндер. Сөнки ул - яралтыусы. Кешене яралта! Хоҙай эшен башҡара түгелме? Бында ир-аттың да ҡыҫылышы бар ҙа, тиер кемдер. Кем бәхәсләшһен? Бар, әлбиттә. Тик әсәмен тигән әсә тыуасаҡ йән эйәһен йөрәк аҫтында туғыҙ ай йөрөтөп кенә ҡалмай, ә артабан да уны үҙ ғүмере ахырынаса ҡурсалаясаҡ.

Теге тылсымлы сер Хоҙай Тәғәлә тарафынан (кемдер тәбиғәттән, тип аңлаһа ла хилафлыҡ юҡ) һалыналыр ҡыҙ балаға һәм үҙен ҡыҙ кеше тип таный башлаған мәлдән һиҙҙерә башлайҙыр. Танауына еҫ керә башлаған малай өсөн ҡайһылыр бер ҡыҙҙың һирпелеп ҡарауы ғына ла мәңге онотолмаҫ хәтирәгә әйләнер, әммә нилектән шулай килеп сыҡҡанлығы асылмаҫ сер булып һаҡланыр. Шундай ҡараш тәьҫирендәлер, дүрт юллыҡ яралғайны бер мәл:

*Ҡатын-ҡыҙҙың*
*барсаһында барҙыр*
*Йылмайыуы Мона Лизаның.*
*Йылмайыуға серен*
*төргән ҡатын -*
*Серҙәр серелер ул донъяның.*

Бәлки, бала саҡ хыялы менән ғүмер ахырынаса йәшәй алғандарға ғына донъя серлерәк күренәлер? Әммә ундай мәлдәрҙе иҫкә алғандарҙың күбеһе: "Ә дүрәклек, бала-сағалыҡ уҙған инде...", йә булмаһа, "йәшлек-йүләрлек", тип ҡул һелтәй, "юҡ-бар менән баш ҡатырмау" яйын ҡарай. Ә бит ана шул йылмайыу артындағы серҙе аса алһаң, кем белә, бәлки, һиңә бөтөнләй икенсе донъя балҡыған булыр ине.

Мифтарға ярашлы, кешелек таңында әҙәм балаһы бер бөтөн итеп яратылған, имеш. Бынының, бәлки, Яралтыусы тәжрибә үткәреү өсөн генә "әүәләгәндер". Артабан ул был йән эйәһен ҡап урталай бүлгән дә икеһен ике яҡҡа һелтәгән. Уларҙан таралышҡан йән эйәләре - бөгөнгө әҙәм балалары - ана шул үҙ яртыларын эҙләп хитланалар икән. Тапһалар - бәхетле, тапмаһалар...

Нисек кенә булмаһын, ир менән ҡатын бер бөтөндө барлыҡҡа килтерергә тырышҡан ике донъя. Эйе, икеһе ике донъя. Бына ошо икеһе ике донъя бер донъя булып йәшәй алһын өсөн ҡатын-ҡыҙ асылмаған сер булып ҡалырға тейештер ҙә. Теге ваҡыт, йылмайып, илаһи донъяға әйҙәне. Ул илаһи донъяға торошло тормош ҡора алырға ла кәрәк бит әле. Бергәләп, ҡулға-ҡул тотоношоп. Әлбиттә, ул донъяға саҡырып индереү генә аҙ. Икәүең дә бер күтәрелгән бейеклектә ҡала алыуың бурыс. Ә донъя көтөү - ысыҡлы аҡланда сәскә йыйып, бер-береңә бүләк итеп, ҡыуышып йөрөү генә түгел... Хөкүмәт эшендә лә эшләй, йорто ла гөл кеүек, аш-һыуы - теленде йоторһоң, көлөп-йылмайып тора, йырлап ебәрә, бейеп китә... Нисек барыһына ла өлгөрә? Сер! Ҡыуаныста - йыуаныс: бала тыуҙы. Мыжый, төндәрен илап сыға, ауырып китә. Әсәһе зарланмай, керпек ҡаҡмай төн үткәрә, сабыйын бәпләй, ире тәрбиәле, йөҙө генә тартылып киткән. Ниңә зарланмай? Сер! Ире ҡыҙмаса ҡайтҡан. Кискелеккә аҙыҡ-түлек, балаға һөт алаһы урынға бер сәскә тотҡан булған. Хәстәрүш... Әй, никахлашҡан көндәре икән дә. Ниңә бысранған йүргәк менән сәпәйһе урынға хәйләһеҙ йылмая? Сер!

Бер үк мәлдә ҡыҙыҡ ҡына көтөп йөрөгән ир-ат өсөн ҡатын-ҡыҙ серлелеге оҙаҡҡа бара микән? Төп сер, моғайын, ир-егеттең шул сер донъяһын һаҡлай белеүендәлер. Кешелекте йәшәтеүсе һәм йәшәртеүсе мәңгелек сер булып ҡалһын ул ҡатын-ҡыҙ.



# ТЫУМАҒАН БАЛАНЫҢ...



## атаһына хат яҙғаны...

Төн. Ҡала йоҡлай. Тәҙрәләрҙә күптән инде уттар һүнгән. Балконда ике шәүлә. Уларҙың һөйләшеүен бер кем ишетмәй ҙә, тыңламай ҙа төҫлө. Тынлыҡта аҫылынған айырым-асыҡ һүҙҙәрҙе ҡараңғылыҡ йота. Шулай тойола ғына, ә ысынында иһә, бушлыҡҡа төбәлгән һүҙҙәр төнгө шаһиттарҙың бәғерҙәрен телә...

- Туйҙым йәшәүҙән. Миңә егерме өс йәш, ә мин үҙемде шул тиклем ҡарт тоям...

- Теленә күп һалышма, рюмканды бушатып ҡуй.

- Әйләнгән һайын проблема, уңышһыҙлыҡ. Бер кем дә мине аңламай. Бына ошо ерҙә ятып үлһәм, хатта ҡайғырыусы ла булмаҫ.

- Ташла шул фәлсәфәнде. Ҡана, булмаһа, тағы берҙе ҡояйым.

-Беләһеңме, минең бер кемгә лә кәрәгем юҡ. Ней атай-әсәйем иҫән түгел. Ә туғандарым өсөн мин ят бауыр.

-Юҡты һөйләгәнсе, әйҙә, берҙе тоҡандырып ебәрәйек.

-Был тормош менән мине бер нәмә лә бәйләмәй. Шулай булғас, ни бысағыма, кем өсөн йонсоп йәшәргә һуң?

Теге икәү, тәмәкеләрен тартып бөтөп, инеп киттеләр. Бер аҙҙан фатирҙа янған яңғыҙ ут та һүнеп ҡалды. Шуны ғына көткән тиерһең, меңдәрсә йондоҙсоҡтарҙан торған тере Ут балконға атылды. Тәҙрә аша тауыш-тынһыҙ инде лә, түбә таҡтаһында бер ни тиклем аҫылынып торҙо. Карауатта салҡан ятҡан баяғы йәшәүҙән туйған егеттең баш осонда туҡтап, моңло йыһан телендә әллә йырланы, әллә көйләне. Шунан Ут өҫтәлдә ятҡан ҡағыҙ өҫтөнә төштө лә, ҙур тиҙлек менән ары-бире йөрөй башланы. Ҡағыҙҙа һүҙҙәр теҙелде:

"Һаумы, минең ҡәҙерле атайым!

Һине яратып хат яҙыусы мин - ҡыҙың. "Атай", тип өндәшеүем һинең өсөн үтә сәйер, яттыр. Эйе, һин минең ҡәҙерле атайым, ә мин һинең әлегә тыуырға өлгөрмәгән, әммә ул көндө түҙемһеҙләнеп көтөүсе ҡыҙың. Дөрөҫө, йыһандың осһоҙ-ҡырыйһыҙ киңлегендә осоп йөрөүсе бер бәләкәй йән эйәһе. Һинең менән осрашыр мәлдәрҙе уйлап, ерҙәге бәхетле тормошом хаҡында хыялланып, үҙ сәғәтемде һәм сиратымды көтөп, һәүетемсә генә тереклек итеүем. Бер йондоҙҙан икенсе йондоҙға сәфәр итеүҙән, үҙем кеүек донъяға яралырға әҙерләнгән сабый-йәндәр менән уйнауҙан ялҡып китһәм, һинең янға осам. Беләһеңме, һинең бала-сағыңды, үҫеүеңде, хәҙер егет булып етеүеңде күҙәтеү ифрат та ҡыҙыҡ. Ни эшләптер, һин дә минең менән осрашыуға бик етди әҙерләнәһең кеүек тойола ине. Тик, атай, һин күп нәмәне аңлап етмәйһең шул. Беләм, йөрәгеңдең мөйөшөндә йәшеренгән оло һөйөү миңә генә тәғәйенләнгән. Тик һин әлегә минең барлығымды ла белмәйһең.

Атай, яҡты донъяға тиҙерәк тыуып, һине бик-бик бәхетле иткем килә. Ә беҙҙең осрашыу йәки осрашмау мөмкинлеге бары тик һинән тора. Һуңғы ваҡытта эшләгән эштәрең, ҡылыҡтарың мине хафаға һала. Һиңә ярҙам кәрәк булғанда янына осоп барып өлгөрмәҫмен һәм һинең менән ҡурҡыныс хәл булыр, тип ҡурҡам ҡайһы саҡ.

Атай, иҫләйһеңме, ун алты йәш сағыңда тәүге тапҡыр дуҫтарың менән эсеп, күрше ауыл малайҙарынан туҡмалғайның? Һине һыу эскеһеҙ итеп типкеләп, йылғаға ташланылар. Шул саҡ бата башлағас, һиңә бар энергиямды йүнәлтеп, дарья тамағынан йолҡоп алдым. Һин, башҡаса эсмәм, тип, үҙ-үҙеңә ант иттең. Әммә юҡ-юҡта шул шайтан төкөрөгөн ауыҙыңа алып ҡуяһың. Етмәһә, йыш ҡына төшөнкөлөккә бирелеп, үткәндәрҙе барлайһың. Дуҫтарың менән уртаҡ бизнес булдырабыҙ тип янып йөрөгәндә үк, был эштең аҙағы хәйерле тамамланмаясағын яҡшы белә инем. Быны һиңә лә аңғартырға теләп, төрлө ҡаршылыҡтар тыуҙырҙым. Киләсәктә һин ысынлап та үҙ эшеңде асасаҡһың ул. Тик иң тәүҙә, атай, институтты тамамларға кәрәк. Бер генә йылың ҡалды бит диплом алырға.

Кисә башыңда ҡайнаған ҡурҡыныс уйҙарҙы уҡып, төнө буйы янында булдым. Үҙемдәге һөйөү энергияһын сәстәреңдән йөрөттөм, шунан һуң ғына тынысланып, йоҡлап киттең. Зинһар, башҡаса үлем тураһында уйлама. Һинең яҡты донъяла йәшәүең минең өсөн бик мөһим. Моғайын да, үҙеңде яратыусы кескәй ҡыҙыңдың, ергә тыумайынса, Мәңгелек Йыһан энергияһынан йотолоуын теләмәйһеңдер. Атайым, беҙҙе алда шундай бәхетле мәлдәр көтә, шуның өсөн түҙемле һәм сабыр булырға тырыш. Бер тапҡыр башыңды элмәккә тығып, мине шул тиклем ҡурҡытҡайның, бүтәнсә улай дыуамалланма. Ул ваҡытта бөтөн энергиямды түбәләге сөйгә бәйләнгән бауҙың өҙөлөүенә йүнәлттем. Әллә күпме энергиямды сарыф иткәнлектән, бер йыл буйына яныңа килә алманым. Шул осор нисек һине һағынып уҙарымды белһәң икән...

Атай, һиңә бер сер сисәйемме? Оҙаҡламай һин әсәйемде осратасаҡһың. Үәт! Нисек танырһыңмы? Ҡайғырма, бынының үҙ өҫтөмә алам. Ҡолағыңа "Ул!" тип шыбырлармын, һәм һинең йөрәгең йышыраҡ тибә башлар, тамырҙарың буйлап ялҡын йүгерер. Беләһеңме, төҫкә-башҡа мин һиңә оҡшаясаҡмын: ҡара муйыл күҙле, көләкәс ҡыҙсыҡ буласаҡмын. Бары сәстәремдең етен төҫөн, эре бөҙрәләрен генә әсәйемдән аласаҡмын. Яҡты донъяға тыуып, мине ҡулыңа алғас, был мәлгә тиклем тик ошо бәхетле минуттар өсөн йәшәгәнеңде аңлауҙан күҙҙәреңдән йәштәр эркелер. Тып-тып тамған тамсылар битемдә өтөп, йоҡомдан уятыр. Һәм һинең бәләкәс кенә ҡыҙың, күҙҙәрен асып, тәүге тапҡыр яҡты донъя бүләк итеүсе атаһының үҙенеке ишеләй күҙҙәренә бағыр. Минең тәпәй баҫыуым, "атай" тип өндәшеүем, башҡа бәләкәй уңыштарым һиңә ҡыуаныс артынан ҡыуаныс килтерер. Беҙ һинең менән урамдан етәкләшеп уҙған саҡта башҡаларҙың һоҡланыулы ҡараштарын күреп, күңелеңдә ғорурлыҡ хисе уяныр. Саҡ ҡына ауырып китһәм, төн йоҡоларыңдан яҙып, сәғәттәр буйы янымда ултырырһың. Алыҫ ергә сәфәргә сыҡһаң, бер йылмайыуыма зар-интизар булып, тиҙерәк ҡайтырға тырышырһың. Ләкин былар бөтәһе лә алда әле. Әммә ул көндәр киләсәк булып, үткәндә һәм бөгөндә тыуа. Тимәк, мин - һиндә. Мине яҡты донъяға илткән юл һинең йөрәгең, тормошоң аша үтә.

Атайым, беҙҙең ерҙәге бәхетле осрашыуыбыҙға һин дә әҙерлән. Рухыңды нығыт, күңелеңде байыт. Сөнки яҡты донъяның, тормоштоң серҙәрен иң беренсе булып һин миңә асасаҡһың бит.

...Әйткәндәй, бая иҫерек дуҫың, нервыларҙы тынысландыра тип, ялған рәхәтлек биреүсе аҡ порошок ҡалдырғайны. Шуны ел менән ситкә осорайым әле. Ундай нәмәләр тормошто еңеләйтмәй, бары бәхетле минуттарға илтеүсе күперҙәрҙе генә емерә, осрашыу мәлдәрен йырағайта. Аңлаһындар ине ошоно кешеләр... Һин дә аңла, атай!

Һине өҙөлөп һөйөүсе ҡыҙың".

Әле генә ҡаштары төйөлөп, йөҙө ҡарайып ятҡан егеттең сырайы асылып, тәне яҙылып, битенә нур һәм тыныслыҡ ҡуныуын күргәс, тере Ут, хушлашҡандай, уның баш осонда әйләнде лә, асыҡ тәҙрә аша таңға ҡарай һүрәнләнгән йондоҙҙар ҡосағына атылды.

**Ләйсән ИСҠУЖИНА.**

✓ *Был яҡта аңлатып булмаҫлыҡ үкенес ҡала төҫлө. Әле әсәйем, атайым менән хушлашып өлгөрмәгәнмен, балаларымдың башынан һыйпамаған-мын. Әммә мин өйҙә бер үҙем, улар минән алыҫта.*



*ИНТЕРНЕТТАН*



# ҺАЛҠЫНДАР...

## йөрәк сирен көсәйтә

■ Америка ғалимдары еңел генә ябығыу юлын уйлап тапҡан. Хәҙер әллә ниндәй күнегеүҙәр эшләп организмды ыҙалатыу ҙа, диеталарҙа ултырыу ҙа кәрәкмәй. Май күҙәнәктәрен эстән генетик яҡтан үҙгәртеп, хатта йоҡлағанда ла ябығып буласаҡ, ти Массачусетс технология институты ғалимдары. Тикшеренеүҙәр лаборатор сысҡандарҙа үткәрелгән. Май күҙәнәктәренең генын үҙгәртеп, ғалимдар метаболизмды тиҙәйтә алған, һөҙөмтәлә артыҡ майҙар үҙенән-үҙе янып бөткән. Тикшеренеүҙәр һөҙөмтәһе буйынса, сысҡандар ашауҙы икләмәй генә үҙ ауырлығының яртыһын юғалтҡан. Тән ауырлығына физик әүҙемлектең булыуы йәки булмауы ла йоғонто яһамаған. Сысҡандар көнө-төнө ябыҡҡан, сөнки уларҙың метаболизмы энергия йыйыу режимынан уны таратыуға күскән. Ғалимдар билдәләүенсә, был процесс кешеләрҙә лә шулай уҡ уңыш менән барасаҡ. "HealthDay" мәғлүмәттәре буйынса, әлеге мәлдә донъяла һимереү менән 500 миллиондан ашыу кеше яфалана.

■ Тестостерон һәм кортизол гормондары артыҡ күп булһа, кеше үҙе лә һиҙмәҫтән алдаша башлай. Тикшеренеүҙәрҙә ҡатнашҡан 117 кеше математик тест эшләп, уны үҙ-аллы тикшереп, һөҙөмтәһен ғалимдарға еткерергә тейеш булған. Дөрөҫ сиселгән мәсьәләләр аҡсалата бүләк менән билдәләнгән. Ғалимдар кешенең гормональ фоны менән алдашыуға һәләте булыуы араһында бәйләнеш булыуы йәки булмауы тураһында белергә теләп, анализдар ҙа алған. Аҙаҡтан асыҡланыуынса, кемдәр үҙенең уңышын арттырып әйткән, уларҙа кортизол менән тестостерон кимәле юғарыраҡ булған. Ғалимдар раҫлауынса, кортизол стресс хәлдәрендә күберәк бүленеп сыға, йәғни кеше алдаша, һөҙөмтәлә стресс кисерә һәм уның кортизол кимәле лә күтәрелә. Ә тестостерон, киреһенсә, ҡурҡыу тойғоһон баҫа, йәғни кеше яҡшы һөҙөмтәләргә өлгәшеү өсөн алдашыуға бара һәм бының өсөн уға бер ниндәй ҙә яза булмаясағына ышана. Быға тиклем окситоцин - "мөхәббәт гормоны" тураһында асыштар булғайны. Бағтиһәң, алкоголь организмға окситоцин кеүек йоғонто яһай икән, шуға ла алкоголле эсемлектәрҙе һөйөүгә мохтаж булыусылар күберәк ҡуллана, тип раҫларға ла мөмкин.

■ Һауа температураһының 10 градусҡа түбәнәйеүе инфаркт ҡорбаны булыу хәүефен 7 процентҡа күтәрә. Кардиологтарҙың яңыраҡ үткән "ESC Congress 2015" сараһында ғалимдар ошо турала хәбәр итте. Белгестәр алты йыл дауамында Канаданың Виннипег ҡалаһында йәшәүсе кешеләрҙә миокард инфаркты ни сәбәптән барлыҡҡа килеүен асыҡлаған. Йәйгеһен был ҡалала көндәр ҡоро һәм эҫе тора, ҡышын ныҡ һыуыҡ була. Һалҡын ваҡытта миокард инфаркты йышыраҡ булған. Шуға ла кем йөрәк сирҙәре менән ауырый, һауа температураһы ҡапыл һыуытҡан мәлдә үҙ организмына иғтибарлыраҡ булһын, тип кәңәш итә ғалимдар.

■ Кеше һәр ваҡыт оҙаҡ йәшәргә, сәләмәт булырға хыяллана. Аҙ хәрәкәтләнеү, эмоциональ көсөргәнеш кеше организмының әүҙемлеген түбәнәйтә һәм йөрәк һәм ҡан тамырҙары, яман шеш, ревматизм, матдәләр алышыныуы менән бәйле сирҙәр барлыҡҡа килә. Былар барыһы ла организмдың иртә ҡартайыуына килтерә. Күп ғалимдар кешенең сәләмәтлегенә физик күнекмәләрҙең файҙалы булыуын билдәләй. Физик әүҙемлек метаболизм процестарын көйләп кенә ҡалмай, йөрәк ауырыуҙарын да иҫкәртә. Бынан тыш, әүҙем тормош алып барған кешенең кәйефе лә күтәренке була, ул стрестарға ла бирешмәй. Ғалимдар бигерәк тә йәйәү йөрөргә кәңәш итә. Яйлап ҡына атлап йөрөһәң, йөрәк ауыртмай, тиҙәр улар. Йәйәү йөрөргә яратҡан кеше артыҡ ауырлыҡ менән дә яфаланмаҫ, уның үҙәк нервы системаһы ла ныҡ булыр. Тәүҙә 350-500 метрҙы йәйәү үтеп ҡарағыҙ, аҙаҡтан иһә тиҙлекте лә, арауыҡты ла арттырырға мөмкин. Йәй көнө ысыҡ төшкән үләндә ялан аяҡ йөрөү файҙалы, ул организмды нығыта.

*ТӘҮБӘ*

**1998 йылдың 19 июль төнө... Донъяға өр-яңынан тыуған көнөм, йәғни төнөм. Ғәжәп, тәүге тапҡыр ҙа мин төндә тыуғанмын. Икенсе тыуған төнөмдө мин "Тәүбә төнө" тип тә атайым. Ни өсөн тиһегеҙме? Сөнки мин тап шул мәлдән башлап Шешәбикә ханым менән хушлаштым. Мине юғалтыу ҡайғыһынан үкереп илап ятып ҡалды ул. Был "ҡара яу" афәтенән мин үҙ-үҙемде ҡулға алып, тик ихтыяр көсө ярҙамында ғына ҡотолдом. Тәүге рюмканы ҡулыма 1982 йылда алғайным. Тәүҙә студент ятағында һыранан башланым, яйлап-яйлап шарапҡа, араҡыға күстем. Аҙаҡ, был аҙғын Шешәбикәнең ҡолона әүерелеп, 16 йыл ғүмеремде әрәм иттем. Эскелекте аҙғын ҡатынға сағыштырыуым да юҡтан ғына түгел: ул үҙе һәр саҡ һиңә ҡосағын йәйеп тора, тәм итһәң, күңелле һымаҡ, тормоштағы ҡытыршылыҡтар тигеҙләшә, ә ул: "Тағы, тағы, йә..."- тип ымһындыра. Әммә шул уҡ "ҡатын" иртәгәһен эсеңдә үлеп ятҡан бесәйгә әүерелә. Тышҡа сығып, кире ҡосағына ташланыр өсөн йәнә ирендәреңде тейгеҙеүҙе һорай, талап итә. Саҡ-саҡ ҡына ауыҙға алдыңмы, тәүҙә ҡып-ҡыҙыл булып биткә сыға, аҙаҡ булмышыңа күсеп, тағы ла һиндә йәшәүен дауам итә.**

**Нисек эскене ташларға һуң? Никаһһыҙ ҡауышҡан был "албанкы" ҡатындан нисек ҡотолорға? (Беҙҙең яҡта аҙғын ҡатындарҙы албанкы тиҙәр). Ғәҙәттә, эсеүен ташларға уйлаған кеше, үҙендә көс тапмаһа, наркологҡа йә психологҡа бара. Нарколог медицина препараттары менән дауалай, әммә дарыуҙарҙың көсө ваҡытлыса ғына. Психолог иһә һиндә булған ыңғай көстәрҙе уятып, был сиргә ҡаршы йүнәлтә. Әммә психолог туҡтауһыҙ ҡатмарлыҡтар тыуҙырған тормош юлында һәр саҡ янында була алмай. Ә бит кеше ауырлыҡтар алдында үҙ-үҙен еңә алмаған осраҡта рюмкаға ынтыла.Үҙ аллы, тик ихтыяр көсө менән был афәттән ҡотолоу мөмкинме? Үҙемдең тәжрибәнән сығып әйтәм: мөмкин! Тәүбә төнөнән алып бөгөнгәсә кисергәндәремде иҫләй торғас, ҡыҙыҡ ҡына яҙмалар барлыҡҡа килде. Үҙҙәре был ҡоллоҡтан ҡотолорға теләп тә, көстәре, ихтыярҙары етмәгәндәргә ошо яҙмаларымды тәҡдим итәм. Бәлки, ярҙамым да тейер. Был яҙмаларымды шартлы рәүештә "Һабаҡтар" тип атаным.**



# МИН ЭСЕҮЕМДЕ ТАШЛАНЫМ

## Кемдәргәлер - һабаҡ, кемдәргәлер кәңәш һүҙе булһын...

### 1-се һабаҡ: "Хоҙай өс тапҡыр иҫкәртә"

Аллаһы Тәғәлә кешегә өс тапҡыр иҫкәртеү ебәрә, тиҙәр. Был иҫкәртеүҙәр төрлөсә булыуы бар. Кемделер ул йәшәү менән үлем араһына ҡуя, икенселәргә кинәйә генә ебәрә. Саҡ-саҡ үлемдән ҡалғандарҙың был хәлгә көлөп ҡарауҙары аптырата. Тәүбә төнөмә тиклем мин ике тапҡыр иҫкәртеү алғайным инде, тимәк шул киҫәтеүҙе ҡабул итмәгән булһам, бөгөн, бәлки, яҡты донъяларҙа булмаҫ инем. Бөтә хикмәт иҫкәртеүҙе аңлауҙа һәм артабан шундай хәлгә ҡалмаҫ өсөн кисекмәҫтән саралар күреүҙәлер. Тәүге ике иҫкәртеү миңә бик ҡаты эскәндән һуң түҙеп торғоһоҙ баш ауыртыу, бахмур синдромы менән килде. Тәүгеһендә телем болғанып, һөйләшә алмаҫ хәлгә килдем, икенсеһендә иҫемде юғалтып ҡоланым. Ике осраҡта ла мин яйлап-яйлап баш төҙәтеү юлы менән аяҡҡа баҫтым. "Шынаны шына менән һуғып сығаралар", тип әйтәләр бындай саҡта.

Өсөнсө иҫкәртеү алдынан өс көн буйына күп итеп һыра, шарап, коньяк, араҡы һемерҙем. Компаниябыҙ ҙа бик елле ине, һуңғы тостарҙы әйткәнде бөтөнләй хәтерләмәйем. Төндә уянып киттем дә, хәлемдең үтә мөшкөллөгөн аңланым: баҡтиһәң, үлемдең эргәһенә үк килеп баҫҡанмын икән. Бер генә аҙым ҡалған, хәҙер аяғыма баҫып китмәһәм, йөрәгем туҡтаясаҡ. Көс-хәл менән тороп, бүлмә буйлап йөрөргә тотондом, йөрәк туҡтаған еренән кире эшләй башланы. Һыу эсергә, эсемдәге "үлгән бесәйҙе" һуғарырға иттем. Барманы. Шешә төбөндә ҡалған араҡыны стаканға һалып, еҫкәргә лә өлгөрмәнем, сайҡалып киттем. Ярамай! Ярты сәғәт самаһы бүлмә буйлап тәпәйләгәс, кире ятып ҡарарға уйланым. Әммә башымды терәүем булды, төпһөҙ упҡынға тәгәрәй яҙҙым. Тағы ла күҙемә үлем күренде, "теге яҡ" та эргәмдә генә яҡшы уҡ күренә, унда инеп китһәң, еңел генә булып ҡалыр һымаҡ. Шул уҡ ваҡытта был яҡта аңлатып булмаҫлыҡ үкенес ҡала төҫлө. Әле әсәйем, атайым менән хушлашып өлгөрмәгәнмен, балаларымдың башынан һыйпамағанмын. Әммә мин өйҙә бер үҙем, улар минән алыҫта. Миңә ни, ярар, "рәхәтлеккә" сумыр ҙа китермен, һуң уларға ҡыйын буласаҡ бит. Упҡынға сумып уҡ өлгөрмәҫ борон, ҡапыл һикереп аяғыма баҫам да, донъялыҡҡа кире ҡайтҡандай булам. Тағы ла бүлмә буйлап йөрөргә тотонам. "Теге яҡта" шул тиклем рәхәт, был яғы бик-бик ауыр икән!

Хәҙер инде һыу эсеү, йә булмаһа, баш төҙәтеү мөмкинлеге бөтөүен тулыһынса аңлар хәлдәмен. Бүлмә буйлап йөрөйөм дә йөрөйөм. Туҡта әле, ятып булмаһа ла, ултырып тороу мөмкиндер. Ултырғысҡа терәлеүем була, йөрәк дөпөлдәй башлай. Тағы ла аяғыма баҫып, мине донъяла әлегә йәшәтеүсе берҙән-бер шөғөлдө дауам итәм - иҙән таҡтаһын шығырлатам. Башҡаса сарам юҡ...

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**
**(Дауамы бар).**

**Редакциянан: Авторҙың был яҙмалары гәзитебеҙҙә баҫылып сыҡҡайны инде. Актуаллеген, мөһимлеген иҫтә тотоп, уларҙан тағы ла өҙөктәр биреп алырға булдыҡ. Уны уҡып, тағы кемдәрҙер тәүбә һүҙе яҙырға батырсылыҡ итһә (аноним булһа ла ярай), уларҙы ла гәзитебеҙҙә баҫып сығарыр инек. Хаттар көтәбеҙ.**

*ҠЫҘЫҠ ТАҺА!*

# СЕБЕНДЕҢ...

## бер ҡанатында - ауырыу, икенсеһендә -дауа



**Бәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт саллалаһу ғәләйһи үә сәлләм әйткән: "Әгәр бер һауытҡа себен төшһә, кеше шул себенде тәүҙә батырып алһын, һуңынан ғына алып ырғытһын үә ашын ашаһын. Дөрөҫлөктә, уның бер ҡанатында ауырыу булһа, икенсеһендә дауаһы" (Бохари йыйынтығынан).**

Был хәҙисте күптәр аңламай. Хатта муғтәзилиттәр ваҡытында "Аллаһ илсеһе Мөхәммәт яңылышҡандыр", тип уйлағандар. Әле лә күптәр был юлдарҙы уҡығас, "Себен төшкән аш-һыуҙы нисек ашарға була?" тип аптырай. Ҡасим университетының микробиолог талиптары Бәйғәмбәрҙең һүҙҙәрен тәжрибә ярҙамында һынап ҡарай. Таҙа (стериль) һыуға себенде яртылаш төшөрөп үә тулыһынса сумырып, һыуҙарҙы Петри һауыттарына һалалар. Себен яртылаш сумырылған Петри һауытында кеше өсөн хәүефле сальмонелла, стафилококк һәм башҡа бактериялар булыуы асыҡлана. Ә икенсеһендә, себен тулыһынса сумырып алынған Петри һауытында, бактерия түгел, ә антибиотик эшләгәндә ҡулланылған актиномицет булыуын күрәләр. Эксперимент Бәйғәмбәребеҙҙең хәҙисен иҫбатлай.

Доктор Мөхәммәд әс-Сәмәхи, тикшереү үткәреп, себен эсендә күҙәнәктәр (продольные дрожжевые клетки) барлығын асыҡлаған. Ул күҙәнәктәр һыуһыҙ хәрәкәткә килмәй, ә шыйыҡсаға барып эләгеү менән бөтә зарарлы бактерияларҙы юҡ итә. Шуға күрә себен бысраҡ урында йөрөһә лә, үҙе ауырып үлмәй. 1932 йылда, Һиндостанда ваба киҙеүе барса халҡын үлтереп бөтә яҙғанда, бер ауыл халҡы ғына һаҡланып ҡалған. Ғалимдар ауыл халҡын тикшергәс, уларҙың себендәр йөҙөп йөрөгән ҡоҙоҡтан һыу эсеүен белгән. Шул һыу уларҙы ҡотҡарып ҡалған да инде.

Был феноменды Австралиялағы Маккуори университеты профессоры Энди Битти ҙа тикшергән. Тикшеренеүҙәр шуны күрһәткән: себенде һыуға сумырғанда бактериофаг бүленеп сыға. Ул бактериофаг башҡа зарарлы бактерияларҙы ашай. Бактериофагтың ҙурлығы - 20-25 микрон, уны үтә көслө микроскоптар аша ғына күрергә мөмкин. Себен бактериофагтарынан бик көслө антибиотиктар ҙа эшләй башлағандар.

Быларҙы бәйғәмбәребеҙ Мөхәммәт саллалаһу ғәләйһи үә сәлләм нисек белгән, тигән һорау тыуыр. Ябай кеше түгел, хатта ғалимдар ҙа бактериофагтар барлығын яңы асыҡланы бит. Әлбиттә, уның белеме - Аллаһтан.

**Илшат ХАФИЗОВ.**

*✓ Үҙ асылығыҙҙа, йәнегеҙ менән тәнегеҙ берҙәм булғанда, һеҙ барығыҙ ҙа изгеһегеҙ. Берҙәмлек юҡта ла яуыз түгелһегеҙ. Сөнки татыулыҡ булмаған өй уның ҡараҡтар ояһы икәнен аңлатмай, ул бары тик татыулыҡ булмаған өй генә.*



КИТАБЕННАС




# АҢЫҢДЫ УЯТ,

## йәки "Бәйғәмбәр" китабы тураһында

**Ливан яҙыусыһы Хәлил Джебрандың "Бәйғәмбәр" исемле был китабы XX башында донъя күргән. Китап бынан ике быуат элек яҙылһа ла, ундағы фекерҙәр уҡыусы күңелендә шаңдау таба, аңды яҡтырта. Үҙегеҙ уҡып ҡарағыҙ.**

### Йондоҙҙар һанаусы "Ә нимә ул ваҡыт?" тип һораған

"Һеҙ икһеҙ-сикһеҙ ваҡытты үлсәргә, уны сәғәттәргә, миҙгелдәргә бүлеп, шул арауыҡта ҡулайлашырға, йәнегеҙгә йүнәлеш бирергә теләйһегеҙ, - тигән Бәйғәмбәр. - Ваҡыттан инеш яһап, уның ярында ваҡыт аҡҡанын ҡарап ултырырға теләр инегеҙ. Ләкин күңел төбөгөҙ менән тормоштоң ваҡыт ағышына буйһонмауын һиҙәһегеҙ. "Кисәге" - "бөгөндөң" хәтере, "иртәнге" - "бөгөндөң" хыялы икәнен дә беләһегеҙ. Күңелегеҙҙәге бөтөн Илаһилыҡ донъя яралған көнгә барып тоташҡанын да һиҙәһегеҙ. Һөйөүҙең мәңгелек һәм сикһеҙ булыуын да тояһығыҙ. Ул икһеҙ-сикһеҙ Һөйөү һәр берегеҙҙең күңелендә: ваҡыт та, шуның кеүек, бүлгеләнмәй. Уйығыҙҙа ваҡытты миҙгелдәргә бүләһегеҙ икән, һәр миҙгелдең эсендә башҡа миҙгелдәр ҙә булһын. "Бөгөн"өгөҙ үткәндәрҙе хәтерләһен, киләсәкте көтһөн".

### "Изгелек менән яуызлыҡ тураһында әйт", тигән аҡһаҡалдарҙың береһе

"Һеҙҙең яҡшы яҡтарығыҙ тураһында әйтә алам, тик яуызлыҡ тураһында түгел, - тигән Бәйғәмбәр. - Яуызлыҡ - ул асыҡҡан һәм интеккән шул уҡ изгелек. Асыҡҡан саҡта изгелек аҙыҡты хатта ҡараңғы төпкөлдәрҙән дә таба, сарсағанда үле һыуҙы ла эсә. Үҙ асылығыҙҙа, йәнегеҙ менән тәнегеҙ берҙәм булғанда, һеҙ барығыҙ ҙа изгеһегеҙ. Берҙәмлек юҡта ла яуыз түгелһегеҙ. Сөнки татыулыҡ булмаған өй уның ҡараҡтар ояһы икәнен аңлатмай, ул бары тик татыулыҡ булмаған өй генә. Рулһеҙ карап та океандағы ҡурҡыныс утрауҙар араһында маҡсатһыҙ аҙашып йөрөп, батмауы ихтимал. Башҡаларға изгелек өләшер һәләтегеҙ барҙа - изгеһегеҙ. Башҡаларҙан игелек күргәндә лә, яуыз түгелһегеҙ. Сөнки изгелек көткәндә һеҙ Ер-әсә күкрәген имгән тамыр кеүекһегеҙ. Шуға күрә емеш тамырға: "Минең кеүек башҡаларға уңыш өләш", - тип әйтә алмай. Сөнки емеш өсөн муллыҡ өләшеү - уның асылы, тамырҙыҡы - һут алыу. Һеҙ - изгелек йөрөтөүселәр, тойғоларығыҙҙы һүҙ менән бер ваҡытта ла тулыһынса әйтеп бирә алмайһығыҙ. Изгелек ҡылғанда һәйбәтһегеҙ, изгелек ҡылмағағыҙ ҙа һеҙҙе яуыз тип әйтеп булмай. Изгелек ҡылмағанда ғүмерегеҙҙе бушҡа үткәрәһегеҙ, ваҡытты әрәм итәһегеҙ. Ашығығыҙ. Йәл, боландар ташбаҡаларҙы шәберәк атларға өйрәтә алмай шул. Тик изгелек аша ғына камиллаша алырһығыҙ. Онотмағыҙ, был интылыш һеҙҙең һәр берегеҙҙә бар. Ләкин берәүҙәрҙә ул диңгеҙгә ашыҡҡан тау йылғаһы ағымына оҡшаған, икенселәрҙә - шым аҡҡан, боролоштарҙа аҙашып, диңгеҙгә етә алмаған шишмә ағымы кеүек. Әммә сапсандар яй ҡуҙғалғандарға: "Ни өсөн яйлайһың һәм туҡтап ҡалаһың?" - тип бәйләнмәһен. Сөнки изгелекте ихлас өләшеүсе бер ваҡытта ла яланғас кешенән: "Кулдәгең ҡайҙа?" - тип һорамаҫ, асарбаҡтан: "Өйөң юҡмы ни?" - тип төбәшмәҫ".

**Исмәғәзәм ИСМӘҒИЛЕВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

ЭТИКЕТ

# ҠЫЛЫҠТАРЫҢА - ТӨҘӘТМӘ,

## йәғни баланы был ҡағиҙәләргә нисек өйрәтергә?

**Балала матурлыҡ хисе тәрбиәләү һәр атай-әсәйҙең, ғөмүмән, ололар алдында торған бурыстарҙың береһе. Бөгөнгө көндә беҙ барыһын да үтә ныҡ ябайлаштырабыҙ: йәмәғәт транспортында ололарға урын бирмәйбеҙ, театрға көндәлек тормошта кейеп йөрөгән кейемдә барабыҙ, телевизорҙан ҡан ҡойошло боевиктар һәм бер ниндәй әҙәпкә, мәҙәниәткә өйрәтмәгән сериалдар ҡарайбыҙ һәм һуңынан балаларҙың мәҙәниәтһеҙлегенә аптырайбыҙ. Нисек итеп балала матурлыҡ хисе тәрбиәләргә?**

Эште үҙегеҙҙән башларға кәрәк. Әгәр ҙә баш күтәрмәй телевизорҙан "Дом-2" тапшырыуын ҡараһағыҙ, өйөгөҙҙә сәнғәт тураһындағы китаптар менән тултырылған фәтеүә булмаясаҡ. Әгәр үҙегеҙ өҫтәл артында табанан ашайһығыҙ, тубығығыҙҙы бөгөп, ултырғысҡа менеп ултыраһығыҙ икән, бала бер ҡасан да өҫтәл артында үҙен матур тотмаясаҡ. Балағыҙ классик музыка тынлаһын тиһәгеҙ, күрше бүлмәлә башҡа төрлө музыка тыңламағыҙ. Балалар өгөт-нәсихәтте тыңламай, улар ололарҙың ҡыланышын һәм ысынбарлыҡта ниндәй эштәр башҡарыуын күреп, шуларҙы уҡ ҡабатлай.

Баланы үҙен йәмғиәттә тәртипле һәм матур тоторға өйрәтеүҙең бер алымы - китап уҡыу. Ләкин улар иҫәбендә мәғәнәһеҙ, бала өсөн ҡыҙыҡлы булмаған китаптар һәм үҫмерҙәр өсөн тәғәйенләнгән журналдар түгел, ә "ысын" әҙәбиәт булһын. Уҡыуға әүәҫлекте балала бишектә яткандан уҡ өйрәтергә була - бының өсөн хәҙер һатыуҙа булған һыуҙан һәм бала тешенән "куркмаған" китаптар алып, уйынсыҡтары араһына һалып ҡуйыу һәйбәт һөҙөмтәләр бирәсәк. Үҙен белә башлағандан алып китаптар араһында үҫкән бала, ғәҙәттә, китап уҡыуға бик әүәҫ була. Ләкин баланан китап уҡыуҙы талап итеп, үҙегеҙ ҡулығыҙға китапты тотоп та ҡарамайығыҙ икән - яҡшы һөҙөмтә көтмәгеҙ. Бәләкәй балалар бигерәк тә ата-әсәһенең йоҡлар алдынан уларға ҡыҫҡырып әкиәт уҡыуын ярата. Ошондай ғәҙәтте үҙ ғаиләгеҙҙә булдырыуығыҙ артабан баланың китапҡа ҡарата булған һөйөүен тәрәнәйтәсәк кенә.

Мәҙәниәтле, тәртипле бала тәрбиәләүҙең тағы бер юлы - төрлө музей, күргәҙмәләргә йөрөү, театрға барыу. Бәләкәйерәк балалар бик теләп бындай сараларға йөрөһә лә, үҫмерҙәр, күпселек осраҡта, баш тартырға тырыша. Шуға күрә таяҡты үтә нык бөгөргә тырышырға ярамай - һындырып ҡуйыуығыҙ бар. Үҫмер баланы көсләп театрға алып барыу, картиналар галереяһына йәки башҡа төрлө күргәҙмәләргә ылыҡтырырға тырышыу - мәғәнәһеҙлек, сөнки көс менән бер ҡасан да үҙ теләгегеҙгә өлгәшә алмаясаҡһығыҙ. Шуға күрә, бөтә сәнғәт, мәҙәниәт өлкәһенә ытырғыныу тыуҙырмаҫ өсөн, уға ҡыҙыҡлы булырҙай музейҙарға, күргәҙмәләргә һәм тамашаларға ғына алып барыу дөрөҫ булыр.

Бала киләсәктә тирә-яҡтағылар менән яҡшы аралашһын өсөн уны бәләкәйҙән әңгәмәсеһенең исемен хәтерҙә ҡалдырырға өйрәтегеҙ. Был ғәҙәт уға уңышлы тормош ҡороу өсөн бик тә ярап ҡаласаҡ.

Бер-береһенә сәләм биреү - йәмғиәттә ҡабул ителгән ҡанун. Шуға күрә баланы һаулыҡ һорашырға өйрәтеү ҙә киләсәктә уның тормошона тик ыңғай тәьҫир итәсәк. Алты айлыҡ баланы, мәҫәлән, ҡул болғарға өйрәтеү әллә ни ауырлыҡ тыуҙырмай. Ә 3-4 йәшлектәр иһә кемгә "һин", ә кемгә "һеҙ" тип әйтергә кәрәклеген белергә тейеш. Матур итеп иҫәнләшә белеү - яҡшы аралашыуҙың нигеҙе.

Төрлө тәрбиә алымдарын ҡулланған саҡта баланың ниндәй енестән булыуын да иғтибарҙан ситтә ҡалдырмағыҙ. Мәҫәлән, булаҫаҡ ир-азаматтар бинаға ингәс уҡ баш кейемен сисергә, ҡыҙҙарҙы алдан үткәрергә, ололарҙы хөрмәт итергә, йәмәғәт транспортында өлкәндәргә урын биреү кәрәклеген бәләкәйҙән белеп үҫһә, киләсәктә ихтирамлы кеше буласаҡтар. Был өлгөнө уларға атай-әсәй күрһәтә икәнен хәтерҙән сығармаҫҡа ғына кәрәк. Ҡыҙҙарҙа нәфислек, ягымлылыҡ, мөләйемлек, итәғәтлек тәрбиәләү мөһим.

**Һуңғыһы.** Этикет ҡағиҙәләренә өйрәткәндә йәшкә ҡарап ташламалар яһарға кәрәкмәй. Өс йәшкә тиклем бәләкәскә махсус өйрәтеү кәрәкмәй - ул ғаиләһендә күргән бөтә ғәҙәттәрҙе (яҡшыһын да, уларын да, әллә насармы) үҙенә һеңдерә һәм шуны уҡ ҡабатлай. Ә өс йәштән ҙурыраҡ балаларҙа этикет ҡағиҙәләрен төрлө уйын аша тәрбиәләргә була. Ә үҙен мәҙәниәтле тотҡан мәктәп уҡыусыһын маҡтап тороу яҡшы һөҙөмтәләр бирер.

УҢЫШ ҠАҘАН



# ҮҘ-ҮҘЕҢӘ ЫШАНЫУҘЫҢ ТӨП СЕРҘӘРЕ

## Үҙ-үҙеңә абсолют ышаныуҙың төп серҙәре

Ғәмәлдә тормош китабын яҙыуҙа авторҙаш булараҡ, һеҙ уның теләһә ниндәй аспектын үҙгәртергә һәләтле көскә эйә. Барлыҡ бөйөк остаздар бер үк фекергә килә: үҙегеҙҙән башҡа берәү ҙә һеҙҙең проблемаларығыҙҙы хәл итә алмай. Бөйөк Уҡытыусы әйтеүенсә: "Аллаһ бәрәкәте һеҙҙең үҙегеҙҙә". Ул ҡайҙалыр алыҫ илдәрҙә йәки күктә түгел. Будда ла: "Бер кемгә, бер нәмәгә өмөтләнмәй, үҙегеҙгә үҙегеҙ юл яҡтыртығыҙ, үҙегеҙҙән башҡа бер нәмәлә лә терәк эҙләмәгеҙ", - тип, шундай уҡ һығымтаға килгән. Һауыҡтырыусы көс беҙҙең булмышыбыҙҙа ята. Сәләмәтлек, бәхет, муллыҡ һәм күңел тыныслығына кире фекерләү быуаҙарынан арынып ҡына өлгәшергә мөмкин.

Үҙегеҙҙең ысын баһағыҙҙы аңламай тороп, тулы ышаныс таба алмаясаҡһығыҙ. Үҙенсәлегегеҙҙе ниндәй дәрәжәлә таныйһығыҙ, шул кимәлдә генә үҙегеҙ ҡорған картәләрҙән арына аласаҡһығыҙ. Эйе, үҙегеҙ ҡорған! Ата-әсәләрҙең дә, ғаиләнең дә, етәксенең дә, йәмғиәттең дә быға ҡыҫылышы юҡ. Беҙ бары тик башҡаларға үҙ тормошобоҙҙо контролләргә мөмкинлек биреп, үҙебеҙҙе сикләйбеҙ.

Ғәйеплелек тойғоһонан һәм үҙегеҙ уйлап сығарған кәмселектәрегеҙҙән арынмай тороп, үҙ-үҙенә ышаныу һәм шәхес азатлығы өсөн бер файҙаһыҙ һәм бер туҡтауһыҙ көрәш алып барыусылар рәтенән сыға алмаясаҡһығыҙ. Ысын мәғәнәһендә ирекле, кешелекле, ярата белгән һәм иғтибарлы кеше булыу өсөн тәү сиратта үҙегеҙҙе аңларға һәм яратырға кәрәк. "Яҡыныңды үҙеңде яратҡан кеүек ярат", тиеүҙәре лә юҡҡа түгел. Үҙегеҙҙе баһаларға өйрәнмәй тороп, үҙегеҙгә лә, яҡынығыҙға ла файҙа булмаясаҡ!

### Ихтыяждарығыҙҙы ҡәнәғәтләндерегеҙ

Үҙегеҙгә ышанған шәхес булыу өсөн тәү сиратта үҙ ихтыяждарыңды ҡәнәғәтләндерергә кәрәк. Тәү ҡарашҡа был раҫлау эгоистик булып күренер һәм, әйҙәгеҙ, тағы бер тапҡыр ҡабатлайыҡ - бары тик үҙегеҙҙе тулыһынса тормошҡа ашырып ҡына ғаиләгеҙгә, дуҫтарығыҙға, коллегаларығыҙға, йәмғиәткә һ.б. файҙа килтерә алаһығыҙ.

Күптәр кешеләргә хеҙмәт итеү философияһын үҙ тормоштары өсөн яуаплылыҡты үҙҙәренән алып ташлау сәбәбе итеп күрә. Улар тәүге урында ир йәки ҡатын, дуҫ йәки әхирәт, ғибәҙәтхана, ғаилә йәки тотош донъя тороуын сәбәп итә. Был - үҙ-үҙеңде алдау ғына. Быны бары тик кеше үҙ проблемалары менән күҙгәкүҙ осрашмаҫ һәм уларҙы хәл итергә тотонмаҫ өсөн генә ниндәйҙер проектҡа башкөлләй сумыуы менән аңлатырға мөмкин.

Һеҙ донъяны үҙгәртә алмайһығыҙ, әммә үҙегеҙҙе үҙгәртергә хәлегеҙҙән килә. Һәр кем үҙ тормошон контролгә алып уның өсөн яуаплылыҡ тойғанда ғына кешелекте яҡшы яҡҡа үҙгәртергә мөмкин. Тәүге урынға үҙ ихтыяжыңды ҡәнәғәтләндереү ваҡыты еткәнен аңларға кәрәк. Был - ысын мәғәнәһендә азат һәм ирекле булыуҙың берҙән-бер юлы. Физик ҡоллоҡ, һис шикһеҙ, енәйәт булып тора. Әммә, эске һәм аң ҡоллого тағы ла ҡурҡыныраҡ, сөнки Декарт яҙғанса, ул - "төшөнкөлөккә бирелгән тормош".

**Роберт ЭНТОНИ.**



## 28 СЕНТЯБРЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (16+).
14.25, 15.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Татьянина ночь". Мелодраматический сериал. 1-я и 2-я серии (12+).
23.25 "Вечерний Ургант" (16+).
23.55 "Познер" (16+).
00.55 Ночные новости.
01.15 "Код 100" (18+).
03.00 Новости.
03.05 "Морской пехотинец". Худ. фильм

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41, 09.15 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Вести".
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". "Защита свидетеля". Детективный сериал (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Склифосовский-2". Драматический сериал (16+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-Башкортостан".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Непридуманная жизнь". 11-13-я серии. Драматический сериал (16+).
23.50 "Честный детектив" (16+).
00.50 "Небесные ласточки". 1-я серия. Музыкальная комедия.
02.15 "Чокнутая". Сериал (16+).
04.10 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 "Гимн Республики Башкортостан".**
**07.05 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Строитель" (12+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Городок АЮЯ" (0+).**
**11.00 Новости недели (на русск. яз.) (12+)**
**11.45 "Талисман любви". Сериал (12+).**
**12.30, 14.30, 18.30, Новости (на башк. яз.) (12+).**
**12.45 "Специальный репортаж" (12+).**
**13.00, 05.45 "Бәхетнамә" (0+).**
**13.45 "Башҡорт йыры" представляет…" (0+).**
**14.45, 05.00 "Говорящая с призраками". Сериал (16+).**
**15.45 "Цирк в 13 метров" (0+).**
**16.00 "Книга сказок" (0+).**
**16.15 "Борсаҡ" (0+).**
**16.30, 24.00 Новости (на русск. яз.) (12+).**
**16.45 "ФК "Уфа" - наша команда!" (12+).**
**17.15 "Быстрее! Выше! Сильнее!" (12+).**
**17.30 Новости культуры.**
**17.45 "Бай" (12+).**
**18.15 "Финликбез" (12+).**
**19.00 "Телецентр" (0+).**
**19.45 "Полезные новости" (12+).**
**20.00 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.15 "Асыҡ дәрес" (12+).**
**20.45 "Дознание" (16+).**
**21.20, 02.45 Хоккей. КХЛ. "Динамо Мск." (Москва) - "Салават Юлаев" (Уфа).**
**00.30 "Лермонтов". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**

## 29 СЕНТЯБРЯ
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Татьянина ночь". Сериал (16+).
14.25 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Время покажет" (16+).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Татьянина ночь". 3-я и 4-я серии (12+).
23.35 "Вечерний Ургант" (16+).
00.10 Ночные новости.
00.25 "Структура момента" (16+).
01.30, 03.05 "Луна". Худ. фильм (16+).
03.00 Новости.
04.20 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Ауаз".
09.55 "О самом главном". Ток-шоу.
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". "Срок давности". Детективный сериал (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Склифосовский-2". Драматический сериал (16+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-Башкортостан".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Непридуманная жизнь". 14-16-я, заключительная, серии (16+).
23.50 "Вести.doc" (16+).
02.00 "Небесные ласточки". 2-я серия. Музыкальная комедия.
03.25 "Чокнутая". Сериал (16+).
04.25 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 "Гимн Республики Башкортостан".**
**07.05 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Каспер: школа страха" (0+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Зеркальце" (0+).**
**11.00, 14.15 "Учу башкирский язык" (0+).**
**11.15, 18.15 "Орнамент" (0+).**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на русск. яз.) (12+).**
**11.45 "Талисман любви". Сериал (12+).**
**12.30, 14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.) (12+).**
**13.00 "Бәхетнамә" (0+).**
**13.45 "Тәмле" (12+).**
**14.45, 05.00 "Говорящая с призраками". Сериал (16+).**
**15.45 "Фанташ" (0+).**
**16.00 "Бауырһаҡ" (0+).**
**16.15 "Йырлы кәрәҙ" (0+).**
**16.45 "Дорога к храму" (6+).**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**17.30 Новости культуры.**
**17.45 "Асыҡ дәрес" (12+).**
**19.00 "Телецентр" (0+).**
**20.00 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.15, 04.00 "Автограф" (12+).**
**20.45 "Деловой Башкортостан" (12+).**
**21.00 "Народы Башкортостана" (6+).**
**22.00 Уфимское "Времечко".**
**23.00 "Роковая красотка". Худ. фильм**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.15 М.Мусифуллин. "Ночь, как вся жизнь".**

## 30 СЕНТЯБРЯ
## СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.35 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Татьянина ночь". Сериал (16+).
14.25, 15.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Татьянина ночь". 5-я и 6-я серии (16+).
23.35 "Вечерний Ургант" (16+).
00.10 Ночные новости.
00.25 "Политика".
01.30, 03.05 "Белые люди не умеют прыгать". Худ. фильм (16+).
03.00 Новости.
03.50 "Мотель Бейтс" Сериал (16+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41, 09.15 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Вести".
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". "Вызов". Детективный сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Склифосовский-2". Драматический сериал (16+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-Башкортостан".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Любовь говорит". 1-я и 2-я серии. Мелодраматический сериал (12+).
22.55 "Специальный корреспондент" (16+).
00.35 "Дон Сезар де Базан". Худ. фильм.
02.05 "Чокнутая". Сериал (16+).
03.05 "Цилиндры фараонов. Последняя тайна" (12+).
04.05 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 "Гимн Республики Башкортостан".**
**07.05 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 "Каспер: школа страха" (0+).**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Ал да гөл" (6+).**
**11.00, 14.15 "Учу башкирский язык" (0+).**
**11.15 "Замандаш" (6+).**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на русск. яз.) (12+).**
**11.45 "Талисман любви". Сериал (12+).**
**12.30, 14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**13.00 "Бәхетнамә" (12+).**
**13.45 "Башҡорт йыры" (12+).**
**14.45, 05.00 "Говорящая с призраками". Сериал (16+).**
**15.45 "Физра. Спортблог спецкора" (0+).**
**16.00 "Байтус" (0+).**
**16.15 "Капитономика".**
**16.45 "КЛИО" (0+).**
**17.30 Новости культуры.**
**17.45 "Алтын тирмә" (0+).**
**19.00 "Телецентр".**
**20.00 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.15 "Интервью" (12+).**
**20.45 "Полезные новости" (12+).**
**21.00, 04.00 "Автограф" (12+).**
**22.00 "Историческая среда" (12+).**
**23.00 "Одинокие сердца". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**01.30 Р.Киньязябаев. "Эх, друг Байтимер!" (12+).**

## 1 ОКТЯБРЯ
## ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.35 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами) (16+).
12.15 "Татьянина ночь". Сериал (16+).
14.25, 15.15 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Наедине со всеми" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Давай поженимся!" (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Татьянина ночь". 7-я и 8-я серии (12+).
23.35 "Вечерний Ургант" (16+).
00.10 Ночные новости.
00.25 "На ночь глядя" (16+).
01.20, 03.05 "Крутая компания". Комедия (12+).
03.00 Новости.
03.30 "Мотель Бейтс". Сериал (16+).
04.20 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести - Башкортостан".
09.00 "Ауаз".
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". Детективный сериал. "Черная магия" (12+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Склифосовский-2". Драматический сериал (12+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-Башкортостан".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Любовь говорит". 3-я и 4-я серии (12+).
22.55 "Поединок" (12+).
00.35 "Дон Сезар де Базан". Худ. фильм.
02.00 "Чокнутая". Сериал (16+).
03.05 "Натурщица для гения" (12+).
04.00 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 "Гимн Республики Башкортостан".**
**07.05 "Сәләм" (12+).**
**10.00 Мультфильм.**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Царь горы" (0+).**
**11.00 "Учу башкирский язык" (0+).**
**11.15 "Орнамент" (0+).**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на русск. яз.) (12+).**
**11.45 "Талисман любви". Худ. фильм (12+).**
**12.30, 14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**13.00 "Бәхетнамә".**
**13.45 "Мои года - мое богатство" (12+).**
**14.45, 05.00 "Говорящая с призраками". Сериал (12+).**
**15.45 "Шәп арба" (0+).**
**16.00 "Семәр" (0+).**
**16.15 "Йырлы кәрәҙ" (0+).**
**16.45 "Здоровое решение" (6+).**
**17.15 "История признания" (12+).**
**17.30 "Новости культуры".**
**17.45 "Историческая среда" (12+).**
**18.15 "Позывной "Барс" (12+).**
**19.00 "Телецентр".**
**20.00 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.15 "Башҡорттар" (6+).**
**20.45 "Полезные новости" (12+).**
**21.00 "Наука 102" (6+).**
**22.00 "Уфимское "Времечко" (12+).**
**23.00 "Июльский дождь". Худ. фильм**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**

## 2 ОКТЯБРЯ
## ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00 Новости.
09.10 "Контрольная закупка".
09.40 "Женский журнал".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.00 Новости (с субтитрами) (16+).
12.15 "Татьянина ночь". Сериал (16+).
14.25, 15.15 "Время покажет". Ток-шоу (16+).
15.00 Новости (с субтитрами) (16+).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
17.00 "Жди меня".
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым (16+).
19.50 "Поле чудес". Капитал-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Голос". Муз. конкурс (12+).
23.50 "Вечерний Ургант". Развлекательное шоу (16+).
00.45 "Джими Хендрикс". Док. фильм
02.40 "Странная жизнь Тимоти Грина". Худ. фильм (12+).
04.40 "Мотель Бейтс". Сериал (16+).
05.30 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.44, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.0, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан".
09.00 "Хрустальный соловей".
09.55 "О самом главном".
11.00 "Вести".
11.35 "Вести-Башкортостан".
11.55 "Тайны следствия". "Дорогой подарок". Сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.30 "Вести-Башкортостан".
14.50 "Вести. Дежурная часть".
15.00 "Склифосовский-3". Драматический сериал (16+).
17.00 "Вести".
17.30 "Вести-ПФО".
17.50 "Вести".
18.15 "Прямой эфир" (12+).
19.35 "Вести-Башкортостан".
20.00 "Вести".
21.00 "Осенний лист". Мелодрама (16+).
23.00 "Новая волна-2015". Открытие Международного конкурса молодых исполнителей. Прямая трансляция из Сочи.
01.30 "Малахольная". Мелодрама (16+).
03.30 "Горячая десятка" (12+).
04.35 "Вести. Дежурная часть".

### БСТ

**07.00 "Гимн Республики Башкортостан".**
**07.05 "Сәләм!" (12+).**
**10.00 Мультфильм.**
**10.30, 15.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Ғәләмәт донья" (0+).**
**11.00, 14.15 "Учу башкирский язык" (0+).**
**11.15, 19.45 "Замандаш" (6+).**
**11.30, 16.30, 21.30 Новости (на русск. яз.).**
**11.45 "Талисман любви". Худ. фильм (12+).**
**12.30, 14.30, 18.30 Новости (на башк. яз.).**
**13.00 "Бәхетнамә" (0+).**
**13.45 "Хазина" (6+).**
**14.45, 05.00 "Говорящая с призраками". Сериал (16+).**
**15.45 "Юные виртуозы Уфы" (6+).**
**16.00 "Сулпылар" (0+).**
**16.45 "Наука 102" (12+).**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+).**
**17.30 Новости культуры.**
**17.45 "Орнамент" (6+).**
**18.00 "Йома" (0+).**
**19.00 "Учу башкирский язык с Владиславом Черневым" (0+).**
**20.00 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.15 "Башҡорт йыры" (12+).**
**20.45 "Полезные новости" (12+).**
**21.00 "Аль-Фатиха" (12+).**
**22.00 "Быстрее! Выше! Сильнее!" (6+).**
**22.20 Хоккей. КХЛ. "Слован" (Братислава) - "Салават Юлаев" (Уфа).**
**01.00 "Великий мастер". Худ. фильм**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**03.15 "Мелодии души" (12+).**

## 3 ОКТЯБРЯ
## СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости.
06.10 "Американская дочь". Худ. фильм (6+).
08.00 "Играй, гармонь любимая!"
08.50 "Смешарики. Новые приключения".
09.00 "Умницы и умники" (12+).
09.45 "Слово пастыря".
10.00 Новости (с субтитрами).
10.15 "Смак" (12+).
10.55 "Там, где мне хорошо" (12+).
12.00 Новости (с субтитрами).
12.20 "Идеальный ремонт".
13.20 "На 10 лет моложе" (16+).
14.10 "Неисправимый лгун". Комедия (12+).
15.45 "Голос" (12+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.10 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым.
19.10 "Вместе с дельфинами".
21.00 "Время".
21.20 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым (16+).
23.00 "Что? Где? Когда?"
00.10 "Джон Картер". Приключения (12+).
02.35 "Мальчик с велосипедом". Худ. фильм (12+).
04.15 "Модный приговор".
05.15 "Контрольная закупка".

### РОССИЯ 1

04.50 "Алешкина любовь". Худ. фильм (12+).
06.35 "Сельское утро".
07.05 "Диалоги о животных".
08.00 "Вести".
08.10 "Вести-Башкортостан".
08.20 "Качество жизни".
09.30 "Правила движения" (12+).
10.15 "Это моя мама" (12+).
11.00 "Вести".
11.10 "Вести-Башкортостан".
11.20, 04.20 "Химия нашего тела. Сахар" (12+).
12.20 "Мать и мачеха". Мелодраматический сериал. 4 серии (16+).
14.00 "Вести".
14.20 "Вести-Башкортостан".
14.30 "Мать и мачеха". Продолжение сериала (12+).
16.45 "Знание - сила". Телевикторина.
17.35 "Главная сцена". Музыкальный конкурс (12+).
20.00 "Вести в субботу".
20.45 "Любовь на четырех колесах". Мелодрама (12+).
22.50 "Новая волна-2015". Прямая трансляция из Сочи.
00.45 "Полцарства за любовь". Мелодрама (12+).
02.45 "Моя улица". Худ. фильм.

### БСТ

**07.00 "Гимн Республики Башкортостан".**
**07.05, 12.30, 18.30 Новости (на башк. яз.).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.00 "Медведи-соседи. Вокруг света" (0+).**
**09.30 "Здоровое решение" (12+).**
**10.00 "КЛИО" (6+).**
**10.45 "Учу башкирский язык" с Владиславом Черневым (6+).**
**11.30 "Аль-Фатиха" (6+).**
**12.00 "Следопыт" (12+).**
**12.55 Хоккей. МХЛ. "Толпар" (Уфа) - "Стальные Лисы" (Магнитогорск).**
**15.00 "Дарю песню" (12+).**
**17.00 Т. Гарипова. "Не улетайте, журавли!" (12+).**
**19.00 "Клич мой будет звучать над землею" (12+).**
**19.45 "Замандаш" (6+).**
**20.00 "Сәңгелдәк" (0+).**
**20.15 "Осрашыу" (12+).**
**21.00 "Бай" (12+).**
**21.30, 06.30 Новости (на русск. яз.).**
**22.00 "Легенды спорта" (12+).**
**22.30 Новости недели (на башк. яз.).**
**23.00 "Башҡорт йыры-2015" (12+).**
**23.45 "Особо опасна". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**
**02.00 Хоккей. МХЛ. "Толпар" (Уфа) - "Стальные Лисы" (Магнитогорск) (12+).**
**04.30 "Мы оставшиеся на колоске пара зернышек" (12+).**

## 4 ОКТЯБРЯ
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости.
06.15 "Два Федора". Худ. фильм.
08.10 "Служу Отчизне!"
08.45 "Смешарики. ПИН-код".
08.55 "Здоровье" (16+).
10.00 Новости (с субтитрами).
10.15 "Непутевые заметки" (12+).
10.35 "Пока все дома".
11.25 "Фазенда".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.10 "Есенин". Драматический сериал.
17.15 "Время покажет" (16+).
18.45 "Клуб Веселых и Находчивых". Летний Кубок в Сочи-2015".
21.00 "Воскресное "Время".
22.30 "Татьянина ночь". 9-я, заключительная, серия (16+).
23.30 "Упрямец Хуциев". К 90-летию мэтра (16+).
00.35 Бокс. Бой за титул чемпиона мира. Хабиб Аллахвердиев - Эдриен Бронер.
01.35 "Клятва". Худ. фильм (16+).
03.35 "Модный приговор".

### РОССИЯ 1

05.55 "Выстрел в спину". Худ. фильм.
07.30 "Сам себе режиссер".
08.20 "Смехопанорама" Евгения Петросяна".
08.50 "Утренняя почта".
09.30 "Сто к одному". Телеигра.
10.20 "Вести-Башкортостан. События недели".
11.00 "Вести".
11.10 "Смеяться разрешается".
12.35 "Золотая клетка". Драматический сериал (16+).
14.00 "Вести".
14.20 "Золотая клетка". Продолжение сериала (16+).
20.00 "Вести недели".
22.00 "Воскресный вечер" с Владимиром Соловьевым (12+).
23.30 "Новая волна-2015". Прямая трансляция из Сочи.
01.20 "Дежурный по стране". Михаил Жванецкий.
02.20 "Семь стариков и одна девушка". Комедия.
04.00 "Комната смеха".

### БСТ

**07.00 "Гимн Республики Башкортостан" (12+).**
**07.05 Новости (на башк. яз.).**
**07.15 "Доброе утро!"**
**08.00 "Йома" (0+).**
**08.30 "Алиса знает, что делать!" (0+).**
**09.00 "Народы Башкортостана" (6+).**
**09.30 "Легенды спорта" (12+).**
**10.00 "День учителя физкультуры" (0+).**
**10.15 "Перекличка" (6+).**
**10.30 "Гора новостей" (0+).**
**10.45 "Ал да гөл" (6+).**
**11.00 "Сулпылар" (0+).**
**11.30 "Байтус" (0+).**
**11.45 "Алтын тирмә" (0+).**
**12.30 Новости недели (на башк. яз.).**
**13.00 "Тәмле" (12+).**
**13.30 "Башҡорттар" (12+).**
**14.00 "Дарю песню" (0+).**
**15.00 "Уйлан, кеше" (12+).**
**16.00 "Дорога к храму" (6+).**
**16.30 "Автограф" (12+).**
**17.00 Ф.Буляков. "Голубушки мои" (12+).**
**18.45 "Любимое дело" (12+).**
**19.15 "Быстрее! Выше! Сильнее!" (6+).**
**19.30 "История признания" (12+).**
**19.45 "Мир настоящих мужчин" (6+).**
**20.00 "Полезные новости" (12+).**
**20.20 Хоккей. КХЛ. "Медведшчак" (Загреб) - "Салават Юлаев" (Уфа).**
**23.00 Новости недели (на русск. яз.) (0+).**
**23.45 "Байыҡ-2015" (12+).**
**00.45 "Свидание с джазом" (12+).**
**01.15 "Страховщик". Худ. фильм (16+).**

*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

# ҮҘЕБЕҘҘЕҢ РЕЖИССЕРҘАР




Вәсилә ӘБДРӘХИМОВА төҙөнө.

## ҠОТЛАЙБЫҘ!

Сентябрь айында тыуған көндәрен билдәләүселәр - **Бөрйән районы** Иҫке Собханғол ауылынан Рәмилә Юлсурина, **Әбйәлил районы** Ташбулат ауылынан Рауза Ҡужахмәтова, Ҡырҙас ауылынан Рәсимә Хәлилова, **Йылайыр районы** Юлдыбай ауылынан Әнисә Алчинова, Ҡашҡар ауылынан Римма Байморатова, **Өфө ҡалаһынан** Вадим Ҡунафин, Әхмәт Аҫылбәков, Миңлеямал Йәнбулатова, **Хәйбулла районы** Бүребай ауылынан Ғөбәйҙулла Баймырҙин, **Ейәнсура районы** Байдәүләт ауылынан Гөлсөм Биҡәнова, Рәнилә Байсурина, **Илеш районы** Үрге Йәркәй ауылынан Ғәлимә Ғәлиева, **Күгәрсен районы** Мораҡ ауылынан Лариса Килмәтова, **Мәләүез ҡалаһынан** Рауза Хазиева, **Ғафури районы** Красноусол ауылынан Рәмзиә Монасипова, Юлыҡ ауылынан Нурсилә Ҡасҡынова, **Шишмә районы** Новотроицкое ауылынан Гөлйыһан Фазлыева, **Учалы районы** Оҙонгүл ауылынан Жәүәт Миһранов, **Баймаҡ районы** Ярат ауылынан Һәҙиә Әбдрәшитова, **Сибай ҡалаһынан** Фәрит Әхмәров һәм башҡа уҡыусыларыбыҙҙы ихлас ҡотлайбыҙ! Килер көндәрегеҙ көҙ сыуағылай йылы сағыу төҫтәргә, иңғай хис-тойғоларға бай булһын, күңелегеҙ тыныс, донъяғыҙ түңәрәк булһын тип теләйбеҙ һеҙгә.

**Иң изге теләктәр менән, "Киске Өфө"ләр.**

## СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**2 октябрь "Маҡтымһылыу, Әбләй һәм ҡара юрға"** (Т. Ғарипова), мюзикл
**3 октябрь "Ҡара йөҙҙәр"** (М. Ғафури)
**4 октябрь "Бәхет хаҡы"** (Х. Мөҙәрисова), музыкаль мелодрама

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**1 октябрь "Ҡыҙ урлау"** (М. Кәрим), комедия
**1 октябрь** Филармония артистары концерты
**2 октябрь "Гонаһлы хыялдарым..."** (Ф. Ғәлимов), комедия
**3 октябрь "Ай булмаһа, йондоҙ бар..."** (Т. Миннуллин), драма

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1436 һижри йыл.*

| Сентябрь - Октябрь (Зөлхизә) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 28 (15) дүшәмбе | 5:43 | 7:13 | 13:30 | 17:29 | 18:59 | 20:29 |
| 29 (16) шишәмбе | 5:45 | 7:15 | 13:30 | 17:26 | 18:56 | 20:26 |
| 30 (17) шаршамбы | 5:47 | 7:17 | 13:30 | 17:24 | 18:54 | 20:24 |
| 1 (18) кесе йома | 5:49 | 7:19 | 13:30 | 17:21 | 18:51 | 20:21 |
| 2 (19) йома | 5:50 | 7:20 | 13:30 | 17:18 | 18:48 | 20:18 |
| 3 (20) шәмбе | 5:52 | 7:22 | 13:30 | 17:16 | 18:46 | 20:16 |
| 4 (21) йәкшәмбе | 5:54 | 7:24 | 13:30 | 17:13 | 18:43 | 20:13 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

**38-се һандағы сканворд яуаптары. Горизонталь буйынса:** Псәнчин. Лобаз. Яҡтылыҡ. Аль. Әтәлге. Хәнйәр. Лейб. Иле. Озон. Морат. Аҡташ. Етмеш. Ғәббәсов. Йондоҙло. Әбеш. Энап. Ритм. Елән. Агат. Рейн.
**Вертикаль буйынса:** Хисмәтов. Акне. Рамай.Таған. Япаров. Дарма. АКБ. Әхлаҡһыҙлыҡ. Лэметр. Лимни. Суон. Нәзәкәтле. Европанан. Зәмәрә. Лобио. Ейск. Емеш.

*ИҒТИБАР!*

## ӘЙҘӘ, ЙҮГЕРӘЙЕК!



**27 сентябрҙә Өфөлә "Милләттәр кросы - 2015" Бөтөн Рәсәй йүгереү көнө буласаҡ. Ул ҡаланың үҙәк урамдарынан үтәсәк. Әлегә унда ҡатнашырға теләүселәрҙең һаны 700-гә еткән. Шулай уҡ Өфө мәктәптәре уҡыусылары 4,2 саҡрым араны айырым йүгерәсәк, унда сама менән 600 бала ҡатнаша.**

Марафонда федераль һәм республика власть органдары вәкилдәре, билдәле сәйәсмәндәр, эшҡыуарҙар, спортсылар ҡатнаша. "Өсөнсө быуын халыҡ университеты" тыңлаусылары өсөн айырым дистанция бар, улар 2 саҡрым араны йүгерәсәк. Бөтәһе был сарала 3 мең кеше ҡатнашасаҡ.

Ойоштороусылар хәбәр итеүенсә, Зәки Вәлиди, Театр, Ғафури, Пушкин, Аксаков, Карл Маркс, Ленин урамдары машиналар өсөн 16.00 сәғәткә тикләм ябылып тора.

ӘЙТЕШ

# КӘМӘЛӘ ЛӘ ИШКӘК ИКӘҮ БИТ,

## Ике яҡлап кәрәк ишергә!

**Сәсәндәребеҙ был юлы һүҙҙе ҡыҫҡа тотто: был һанда әйтеште тамамлап, "атты" башҡа сәсәндәргә тугарҙы. Вәсилә Садыкованың әйткәненә Рөстәм Нурыевтың һуңғы әйткәне ошо булғайны:**

**Тигеҙ ишле нигеҙ ташы**
**Эпостарҙа күптән һалынған,**
**Ир һәм ҡатын, милләт башы,**
**Меңге арыҫланға атланған.**
**Гөлбостандың сәскә атыу серен**
**Асайымсы уйын-ысынлы:**
**Күп балалы атай ҡукрәгенә лә,**
**Тағайыҡсы Герой миҙалы.**



**Вәсилә Садыкованың әйткәне:**
Һай, аҡыллы егет, заманаңы
Әүәләүҙән бармы файҙаһы?
Донъя йөгөн алып ҡатын-ҡыҙҙан
Ҡайнатырға ҡушын ҡаҙанды!
Ир-егеттәр ярһын ыҙанды
Арттырмайса ғына миҙанды.

Клара Цеткин йомшаҡ әмер биреп,
Ҡатын-ҡыҙға оло юл ярҙы.
Ә ирҙәргә көтөп торған кеүек,
Һылтау, эш юҡ - телевизор ҡалды.
Бөгөн халҡым ниндәй ауҙа йөшәй,
Үрмәкселәр ебәк ау ҡора.
Ир-егеттәр миҙал һорай икән,
Аҡыл эйәһенән һин һора,
Фәлсәфәне оҙонға һуҙма.

**Рөстәм Нурыевтың әйткәне:**
Замандарҙы, инәй, әүәләнем
Аңлар өсөн тая баҫҡанды.
Һораным мин оло-кеҫеһенән,
Ҡалдырманым хатта Йыһанды.
Күпме һорау, шул саҡ яуап,
Кеше ҡуя алға талабын.
Иң теүәлен Йыһан бирә:
"Йәшә, Әҙәм, белеп самаһын!"

Уңдан-һулдан берҙәй ишһен,
Тигеҙ иштәр тормош ишкәгән.
Ир-егеттәр, эйе, ыҙан ярһын,
Ҡатын-ҡыҙҙар аҫһын ҡаҙанын.
Йөштәр тапһын донъя малын,
Ҡарттар сәсһен рухи байлығын.
Ағинәйҙәр хуплап торһон илдә,
Аҡһаҡалдар алһын дилбегә!

**ШУЛАЙ ИТЕП...**
**Бәйгелә әйтеш ҡоророға теләүсе яңы авторҙарҙы көтәбеҙ. Улар ҡарамағында - СМС өсөн +7-937-835-34-74 телефоны, "Киске Өфө"нөң электрон почтаһы kiskeufa@ufacom.ru. Бәйге барышын "Бәйләнештә" сайтының "Башҡорт ҡатын-ҡыҙ бите"ндә күҙәтеп барыу мөмкинлеге лә бар.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡикәткә баҡ, һыҒымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# БАТША ҒАЛИМ БУЛҺА...

## йорт уҙыр

Атаһыҙ етем - туйҙа етем, әсәһеҙ етем көн дә етем.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Хоҙайҙан һуң беҙ ҡатын-ҡыҙ алдында бурыслыбыҙ: тәүҙә ул беҙгә йәшәү бүләк итә, шунан йәшәүебеҙгә мәғәнә өҫтәү өсөн бар көсөн һала.

**(Каролина Бови).**

Күпме эш, аҡрылғанға тиклем, бөтөнләй башҡарылмаҫ булып тойолғайны!

**(Плиний).**

Диагностика шул ҡәҙәре ҡаҙаныштар яуланы: сәләмәт кешеләр ҡалманы ла тиерлек.

**(Бертран Рассел).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер хаким күрәҙәсегә килгән һәм уға:**
**- Дәүләтте нисек көслө итергә? - тигән һорау биргән.**
**- Аҡыл эйәләре-карттарҙың тәжрибәһенә, белеменә таянырға һәм... - тигән күрәҙәсе һәм һүҙен артабан дауам итмәксе булған, ләкин хаким уны артабан тыңлап тормаған, әйләнеп китеп барған.**
**Хаким үҙенең һарайына ҡайтҡас, бөтөн ил буйынса аҡыл эйәләрен саҡырырға бойорған. Улар йыйылып бөткәс, һәр береһен үҙ һарайында урынлаштырып, бер нәмәгә лә мохтажлыҡ кисертмәйенсә йәшәткән. Тегеләре иһә хакимға аҡыллы кәңәштәр биргән, ул кәңәштәр ярҙамында ил көслө һәм бойондороҡһоҙ булып танылған.**
**Сирек быуат үткәс, халыҡ илдәге халыҡтың ҡырҡа кәмеүен, бары тик карттар ғына тороп ҡалып барыуын, балалар бөтөнләй һирәгәйеүен шәйләп ҡалған. Шунан ул баяғы күрәҙәсене эҙләп тапҡан һәм уға үпкәһен белдергән:**
**- Мин һинең кәңәшеңде тыңлап, эргәмә карттарҙы йыйып, улар тәжрибәһенә һәм белеменә таянып идара иттем. Ләкин отолдом. Һин миңә дөрөҫ кәңәш бирмәнең...**
**- Юҡ, бында һинең ашығыусанлығың һәм алдан күрә белмәүсәнлегең гәйепле, - тигән күрәҙәсе. - Теге ваҡыт һин минең кәңәшемдең тәүге яртыһын ғына тыңланың, икенсе яртыһын тыңларға түҙемлегең етмәне...**
**- Икенсе яртыһында ни тураһында әйтелә ине һуң? - тигән хаким.**
**- Бороноғо аҡылда әйтелеүенсә, идара иткәндә аҡыл эйәләре-карттарҙың белеменә, тәжрибәһенә таян, ләкин бар аҡсаңды балаларға һал. Сөнки аҡыл - ул нигеҙ, ә балалар - улар диуар, ә һарай дөрөҫ һалынған нигеҙ һәм диуарҙары менән көслө. Дәүләтте бөтөн һәм көслө көйө һаҡлау өсөн нигеҙ һәм диуарҙарҙың ныҡлы ғына түгел, ә матур булыуы, уның архитектураһында аҡыл көсөнөң һәм бөйөклөктөң ярашыуы ла кәрәк. Ә һин бар көсөңдө нигеҙ ҡороуға ғына йүнәлттең дә, диуарҙар тәҙәрге оноттоң..."**

ЯҢЫ КИТАП

# БАБИЧТЫҢ ИЖАД ОФОҠТАРЫ




**Зәйнәб Биишева исемендәге Башҡортостан "Китап" нәшриәтендә Ғиниәт Ҡунафиндың "Шәйехзада Бабичтың ижад офоҡтары" тип аталған хеҙмәте башҡорт һәм рус телдәрендә донъя күрҙе.**

Хеҙмәттә бөйөк башҡорт шағирының XX быуат башындағы тормош юлы, шиғриәтенең идея-эстетик, жанр-стиль тәбиғәте яҡтыртыла. Шәйехзада Бабич ул осорҙоң иң талантлы, күп яҡлы һәм төплө шағиры. Уның ижады фәлсәфәүи ҙә, социаль-сәйәси ҙә, әхлаҡи-этик та, мәҙхиәүи ҙә, элегик та, тәнҡити ҙә йүнәлешле булыуы, тормоштоң иң мөһим мәсьәләләрен тәрәнерәк һәм киңерәк яҡтыртырға ынтылыуы менән айырылып тора. Шағирҙы кешенең йәмғиәттәге урыны, серле күңел донъяһының тәбиғәте, йәшәүҙең мәғәнәһе тураһындағы мәңгелек һорауҙар ҡыҙыҡһындыра. Шағир ижадының нигеҙен нескә һәм ихлас, ярһыу һәм нәфрәтле тойғолар, ялҡынлы йөрәк, гражданлыҡ намыҫы һәм аҡыл ҡушылмаһынан тыуған фекер тәшкил итә. Ҡушымтала Ғ. Шафиҡов тәржемәһендәге һайланма әҫәрҙәре рус телендә бирелә.

"Бөгөнгө уҡыусыны шундай үҙ шағирҙың ижадына ылыҡтырыу өсөн уның әҫәрҙәрен өйрәнергә һәм пропагандаларға, уларҙың оҙон ғүмерле булыуы һәм йәмғиәттең төрлө ҡатламын үҙенә тартыуы серҙәрен асып бирергә кәрәк. Бөгөнгө уҡыусыға уның фекерләү манераһын, палитраһын һәм стилен, әҫәрҙәренең идея-тематик йөкмәткеһе байлығын, формаһы матурлығын һәм төрләнөгән күрһәтеү биреү мөһим. Үҙгәндә Шәйехзада Бабичтың художестволы-эстетик фекере, проблемаларҙы художестволы сисеүе, әҫәрҙәренең жанр-стиль үҙенсәлектәре мәсьәләләре торған был хеҙмәттең барлыҡҡа килеүе шуның менән аңлатыла ла инде", - тип билдәләнә был хеҙмәттең инеш һүҙендә. Китап киң ҡатлам уҡыусыларға тәғәйенләнә.

**Нәркәс КҮРПӘСЕВА.**

АТЫҢ КЕМ?

# ИЛЬЯС "ЯРҘАМСЫ" ТИГӘНДЕ АҢЛАТА

**Электән Ильяс тигән исемде оҡшата торғайным. Улым тыуһа, Ильяс тип ҡушырмын, тип тә алдан уҡ уйлап ҡуйғайным.**



Башҡорт халыҡ йырҙары араһында ла "Ильяс" иң яратҡан йырым. Уға ошо йырҙы йырлармын, ҡурайҙа көйөн уйнармын, тигән ниәтем дә булды. Икенсенән, Ильяс - ул бөйөгәбәр исеме һәм мосолмандарҙа ул бик юғары баһалана, кеше юлға сыҡҡанда, Хыҙыр Ильяс юлдаш булһын, тип тә теләйбеҙ. Шуға күрә улыбыҙ ҡайҙа йөрөһә лә, нимә эшләһә лә гел юлдары уң булһын, тип юрап, ошо исемде һайланыҡ. Әсәһе лә, олатай-өләсәйҙәр ҙә ҡаршы булманы. Хәҙер уға 2 йәш тә 9 ай.

"Ильяс" исеменең йыш осраған аңлатмаһы - "ярҙамға килеүсе". Улыбыҙ исемен бик ярата, "Ильясик" тип йөрөтә үҙен. Исеме есеменә тап килә, бәләкәй булыуына ҡарамаҫтан, өлкәндәрҙең эшенә тотонорға ғына тора. Ауыр әйбер күтәрһәң дә йүгереп килеп осона йәбешә, хатта төҙәлөш эштәре менән булышҡанда ла үҙенең кәрәк кеүек эш ҡоралдарын тотоп, арттан йөрөй. Өфө эргәһендәге ауылда үҙ йортобоҙҙа йәшәйбеҙ, баҡсабыҙ ҙа бар. Ильяс йәй буйына баҡсаға һыу һибеште. Иртән уяна ла, тышҡа сығып, иң тәүҙә йәшелсә-емешкә һыу һибә. Ризыҡтың өҫтәлгә ҡайҙан килеүен, нисек үҫеүен күреп үҫһен тибеҙ. Өлкәнәйгәс тә улыбыҙ шулай егәрле һәм ярҙамсы булыр, тип ышанабыҙ.

Ильяс улыбыҙҙың теле лә иртә асылды. Матур итеп башҡортса һөйләшә. Йырларға ярата, күп кенә башҡорт халыҡ йырҙарын белә, яратҡан көйҙәренә төшөп бейей тә китә. Үҙе бик тә иғтибар үҙгәндә булырға ярата, кешене көлдөрөргә тиһәң, уға ҡуш. Йырҙарҙы, шиғырҙарҙы бөтөнләй икенсәләй бороп, башҡа һүҙҙәр ҡушып, көләмәс итеп тә һөйләп ҡуя.

**Зәһир ИШКИН.**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририят:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Азамат ӘБҮТАЛИПОВ,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@mail.ru**
«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Баш мөхәррир урынбаҫары** 246-03-24
**Бухгалтерия** 246-03-23
**Хәбәрселәр** 252-39-99
Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 25 сентябрь 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.
«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**
Тиражы - 4717
Заказ 4403